# шоңқар



2*2011




Рәхәт – донъя һәр саҡ имен булһа,
Гөрләп торһа эшсән уңғанлыҡ,
Кеше йөрәгенә үрелеп үҫһә
Һуғыш түгел – дуҫлыҡ, туғанлыҡ.

Зәйнәб БИИШЕВА.

№2(127)*2011
ОС ИРЕККӘ, БАШҠОРТОСТАН!
1994 йылдың 1 ғинуарынан башлап нәшер ителә.
*Башҡортостан йәштәренең айлыҡ ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы*
БАШҠОРТОСТАН ЙӘШТӘРЕ ЖУРНАЛЫ
ШОҢҠАР

## БЫЛ ҺАНДА:

**ТҮҢӘРӘК ӨҪТӘЛ**



**Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА.**
«Юҡ, моңланмай ҡурай ят ҡулдарҙа...» 2

**БИЗМӘНГӘ ҺАЛЫП**
З. ӘЙЛЕ.
Тотош донъяны үҙгәртә алмаһаң... үҙең үҙгәр! 8

**ИЛҺАМ**
Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.
Шиғырҙар. 12

**СӘСМӘҮЕР**



Рәсүл СӘҒИТОВ. Хикмәтле хикәйәләр. 14

**ИЖТИМАҒИ МӨНБӘР**
Азамат БУРАНШИН.
Модернизация һәм башҡорт ҡала мәҙәниәте. 19

**ЙӘШӘЙЕШ**
Альбина САДЫҠОВА.
Ни хәлдә һин, йәш ғаилә? 22
Земфира АБУШАХМАНОВА.
Мөхәббәттән донъя ҡотайыр. 26

**БЕҘҘЕҢ ЖУРНАЛ ТЫШЫНДА**
Филүзә СӘЛИХОВА.
Маҡсаттарға табан юл ярып. 29

**ҒИБРӘТ**
Мөҙәрис БАГАЕВ.
«Кәкүк» булғым килмәй. 32
В. ҠЫРЫМҒУЖИНА.
Һауалағы торна. 37

**УҘАМАН**
Г. БАТЫРШИНА.
Өр-яңынан тыуғас донъяға. 41

**ИЖАД КУХНЯҺЫ**
Леонид ЛЕОНОВ.
Күҙҙәр – барин, ҡул – хеҙмәтсе. 44

**ПРОЕКТ 2020** 46



**ИЛҺАМ**
Риф МИФТАХОВ.
Шиғырҙар. 52

**ЙӘШӘЙЕШ**
Илшат ЗАРИПОВ.
100% айыҡлыҡҡа ата-әсәләр ҡаршы. 54

**ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ ТАП**
Милә БИЛАЛОВА.
Аҡса – иҫәпте, аҡыл үлсәүҙе ярата. 64

**ВИРТУАЛЬ ДОНЪЯ**
Р. СӘЛИМОВ.
«Ысул»ды «мөмкинлек» менән бутама! 68

**СЫҠ МАЙҘАНҒА**
Ләйсән ШӘРИПОВА.
Кудо. 70

**СӘЙЕР КЕШЕЛӘР**
Г. ҒӘЙЗУЛЛИНА.
Стена аша үткән кеше. 74

**КӨҘГӨ АЛДЫНДА**
Филиә БУЛАТОВА.
Үткән модаға заманса һулыш. 76

**ЙОНДОҘНАМӘ** 78

**БЕҘҘЕҢ АШ-ҺЫУ** 80

шоңҡар ИНТЕРНЕТТА: WWW.SHONKAR.RU
www.video.shonkar.ru
www.music.shonkar.ru
http://vkontakte.ru/club13743478
http://www.facebook.com/#!/profile.php?id=100000936043132

© Шоңҡар, 02(127), 2011

# «ЮҠ, МОҢЛАНМАЙ ҠУРАЙ ЯТ ҠУЛДАРҘА...»

**Башҡортостанда байтаҡ йылдар инде үҙенсәлекле берлек эшләп килә. Әлбиттә, ижади союздар күп, тик былдай ойошма Башҡортостанда, Рәсәйҙә генә түгел, тотош донъяла берәү генә. Һүҙ 1998 йылда Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының (ул саҡтағы Өфө дәүләт сәнғәт институтының) башҡорт музыкаһы факультеты деканы, профессор Айрат Ҡобағошов тарафынан нигеҙ һалынған Ҡурайсылар союзы хаҡында. Уның тарихы әллә ни ҙур түгел. Тәүҙә союз менән Айрат ағай үҙе етәкселек итә. 1999 йылда был эш сәнғәт иститутында уҡытып йөрөүсе йәш ҡурайсы Вилдан Йомағужинға йөкмәтелә. Көс-ғәйрәте ташып торған, даланлы, рухлы егет ине, тиҙәр уның хаҡта. Ҡыҙғаныска ҡаршы, 2000 йылда ул мәрхүм булып ҡала. Һәм Союздың эше оҙайлы ваҡытҡа туҡталып тора. 2007 йылда иһә ҡурайсылар II съезға йыйыла. Был юлы етәксе итеп Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов тәғәйенләнә. Мәғлүм булыуынса, 2010 йылдың көҙөндә ҡурайсылар йәнә ҡор йыйҙы, Союзға яңы идаралыҡ һайланды. Һәм бөгөн беҙҙә ҡунаҡта — донъялағы берҙән-бер ойошманың йәш вәкилдәре.**

**Был һөйләшеүҙә, бәлки, ҡурай һәм уның мөмкинлектәре, ошо өлкәләге хәл ителмәгән мәсьәләләр хаҡында ниндәйҙер яңы фекер еткереүгә өлгәшә лә алмаҫбыҙ. Әммә бәғзе бер төшөнсәләрҙе йәштәр күҙлегенән сығып баһаларға тырышырбыҙ.**

## ТҮҢӘРӘК ӨҪТӘЛ АРТЫНДАҒЫ ҺӨЙЛӘШЕҮҘӘ ҠАТНАШАЛАР:



**Фәиз ШӘРИПОВ —** З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының ҡурай класы уҡытыусыһы. Уҡыу йортоноң музыка студияһы һәм фольклор кабинеты етәксеһе.

**Илшат СОЛТАНГӘРӘЕВ —** Ҡурайсылар союзы рәйесе. З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында буласаҡ ҡурайсыларға дәрестәр бирә. Академияның Ҡурайсылар ансамбле етәксеһе.

**Венер ЙЫЛҠЫБАЕВ —** З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының ҡурай класы уҡытыусыһы.

**һорау.** Шуныһы иғтибарға лайык: ниһайәт, тормош дилбегәһе йәштәр ҡулына тапшырыла. Ҡурайсылар союзына ла заманса фекерләгән, дәрт-дарманы ташып торған һәм, иң мөһиме, көнсөлөк һаҙына батмаған, бер-береһе менән дуҫ һәм татыу мөғәмәләлә торған йәштәр килде. Әйтегеҙ әле, егеттәр, был боламы, әллә тәбиғи процесмы?

**Венер Йылҡыбаев.** Әлбиттә, тәбиғи процесс.

**Фәиз Шәрипов.** Заман шуны талап иткәндер, күрәһең.

**Илшат Солтангәрәев.** Бола тип әйтеү бик үк урынлы булмаҫ. Әммә Союздың эшмәкәрлегенә ҡарата ризаһыҙлык тойғоһо бар ине. Шуға ла егеттәр менән кәңәшләшеп, эште үҙебеҙҙең ҡулға алып ҡарайык, тигән фекергә киленде. Эйе, быға тиклем йәштәр тарафынан Союздағы хәл-вакиғаларға, унда ниндәй мәсьәләләр күтәрелеүенә әллә ни әһәмиәт бирелмәне. Хәйер, ҡыҙыҡһыныуҙар булған осракта ла, яңылыктар хаҡында бер ни ҙә белмәй кала торғайнык. Егеттәр менән йыйылыштык, һөйләштек. Йәшерен-батырыны юк, алдан уҡ стратегия, бизнес-план төҙөнөк. Структура ҡабул иттек. Уның буйынса союздың иң юғары органы булып съезд һайлана. Союз менән идара етәкселек итә. Ә инде оло йәштәге арҙаклы ҡурайсыларҙан торған Аҡһаҡалдар ҡоро, ревизия комиссияһы һәм төрлө йүнәлештәге секциялар Ҡурайсылар союзының эшмәкәрлегенә булышлык итер тигән өмөттәбеҙ. Финанс мәсьәләһенә килгәндә, артык проблема юк, сөнки аксаның үҙе юк.

**һорау.** Ошо мәсьәләгә асыҡлык индереп үтәйек әле: Ҡурайсылар союзы бөтөнләй дәүләт тарафынан финансланмай.

**Илшат Солтангәрәев.** Эйе, һеҙ хаҡлы.

**Венер Йылҡыбаев.** Әйтәйек, алдағы дүрт йыллыкта иҫәпкә бөтөнләй акса күсмәгән. Уны нулгә аскандар, нулгә япкандар. Шуға күрә Союздың эше өлөшләтә генә алып барылған. Был, әлбиттә, беҙгә тиклемге етәкселәр тейешле органдарға йөрөмәгән, һорамаған тигәнде аңлатмай. Бәлки уларға ныкышмалылык етмәгәндер. Уйлап ҡараһаң, оло башыңды кесе итеп, ураған һайын кемдәрҙәндер акса һорап йөрөү ҙә килешеп бөтмәгән һымак. Ә беҙгә, йәштәргә нимәнән оялып, уңайһыҙланып торорға?

**Илшат Солтангәрәев.** Һуңғы йылдарҙа шуға иғтибар итәм: башка халык вәкилдәренең ҡурайҙа уйнарға өйрәнергә теләге ҙур һәм хатта ҡайһы бер осракта улар башкорт халкының милли музыка коралын үҙҙәренеке тип иҫбат итергә тотона. Әммә Рәми Ғариповтың бер шиғырында ошо мәсьәләгә ҡағылышлы тәрән мәғәнәле, урынлы ғына һүҙҙәр бар. "Юк, моңланмай ҡурай ят ҡулдарҙа", – тиелә унда.

**Венер Йылҡыбаев.** Шуға ҡарамаҫтан, бәғзе берәүҙәр ҡурайҙы үҙҙәренеке итер өсөн ваҡыттарын да, аксаларын да йәлләмәй. Әммә шул уҡ ваҡытта беҙҙең Ҡурайсылар союзы бөгөнгә көндә бер тин аксаһыҙ ултыра.

**Фәиз Шәрипов.** Ысынлап та, Союз бөгөн ҡурайсыларҙың үҙ ихтыяры, үҙ теләге буйынса ғына эшләргә һәм йәшәргә мәжбүр. Барлык мәсьәләләрҙе Аҡһаҡалдар ҡоро менән кәңәшләшеп башкарабыҙ. Нимәнелер хәл итергә кәрәк булғанда, әйтәйек, репертуар һайлағанда, йә булмаһа ҡурайсылар конкурсы үткәргәндә һәр ваҡыт Юлай Ғәйнетдиновка, Азат Айыткуловка һәм башка арҙаклы ҡурайсыларға шылтыратып кәңәшләшәбеҙ.

**һорау.** Ә аҡһаҡалдар һәр сак хаклымы?

**Венер Йылҡыбаев.** Хаклы.

**һорау.** Улайһа ни өсөн идаралыкка өлкәндәрҙе генә һайлап ҡуйманығыҙ?

**Фәиз Шәрипов.** "Бер олоно, бер кесене тыңла" тиҙәр. Аҡһаҡалдар ҡорон бушка ғына булдырмағанбыҙ. Кәңәшле эш таркалмаҫ.

**Илшат Солтангәрәев.** Идаралык ағзаларының фекере лә күҙ уңында тотола инде...

**һорау.** Уныһы аңлашыла. Әммә һеҙ кушканды үтәүсе ролендә генә булырға тейеш түгел. Был осракта үҙ аллы карарҙар ҡабул итергә һәләтлелек талап ителә. Өлкәндәрҙең дә бөтә мәсьәләлә лә хаклы булыуы икеле. Ҡытайҙарҙа ғына кеше ни тиклем оло булһа, шул сама акыллы һанала.

**Венер Йылҡыбаев.** Өлкәндәрҙең һәр береһенең кәңәшен тыңлайбыҙ. Әммә ҡайһы тәкдимде – ҡабул итергә, ә ҡайһыһын кире ҡағырға кәрәклеген үҙебеҙ хәл итәбеҙ.

**һорау.** Ана шул яуапты әйттерергә тырышабыҙ ҙа инде. Йәнә бер һорау: Союзда ағзалык бармы?

**Илшат Солтангәрәев.** Әлегә юк. Әммә шуны тормошка ашырыу өҫтөндә уйланабыҙ. Сөнки Союзға ҡабул ителеүҙең ниндәйҙер шарттары булырға тейеш. Йәғни ҡурайсыларҙы белеменә, һәләтенә карап һайлап аласакбыҙ.

**Венер Йылҡыбаев.** Ысынлап та, заман шуны талап итә. Элек традицион башҡарыу алымы йәш быуынға айырым кешеләр тарафынан ғына тапшырыла килгән. Хәҙер быны өсөн махсус уҡыу йорттары – сәнғәт училищелары, музыка мәктәптәре, сәнғәт академияһы бар. Яңы быуын, белемле ҡурайсылар үсеп сыҡҡас, билдәле бер талаптар ҙа булырға тейештер, миңә ҡалһа.

**Һорау.** Ҡурайҙы халыҡ араһында, шулай уҡ донъя кимәлендә популярлаштырыуға бәйле ниндәйҙер яңы проекттар күҙалланамы?

**Илшат Солтангәрәев.** Идаралыкта Сибайҙан да, Салауаттан да, Красноусолдан да, Дәүләкәндән дә егеттәр бар. Уларҙы һәр осрашыуға ла саҡырып тора алмайбыҙ. Әммә Өфөләге йәш ҡурайсылар менән осрашып, ошо мәсьәләгә бәйле һөйләшеүҙәр уҙғарабыҙ. Шулай ҙа әлегә ниндәйҙер кәтғи үҙгәрештәр, аныҡ ҡына пландар хаҡында һүҙ йөрөтөп булмай.

**Фәиз Шәрипов.** Йәйға һалаһы мәсьәләләр күп. Райондарҙан ҡурайсылар, уҡытыусылар мөрәжәғәт итә. Ҡурай буйынса махсус әҙәбиәт, яҙмалар булмауына ризаһыҙлыҡ белдерәләр. Әле иһә аудиояҙмалар сығарыу, китаптар нәшер итеү хаҡында уйланабыҙ. Интернетта сайт булдырҙыҡ. Унда ҡурайға бәйле бай архив тупланасаҡ. Ҡурайҙың тарихын сағылдырған мәғлүмәттәр урын аласаҡ. Арҙаҡлы ҡурайсылар хаҡында мәҡәләләр, яҙмалар, ноталар һәм башҡа бихисап әйберҙәр табырға мөмкин буласаҡ. Әлеге көндә алдыбыҙҙа сайтты материалдар менән байтыу мәсьәләһе тора.

**Венер Йылҡыбаев.** Әйтәйек, йылына бер-ике тапҡыр концерт ойоштороу ҙа ҡулдан килер. Бынан тыш, ҡурайсыларҙың башҡарған эштәрен баһалау, ниндәйҙер дәүләт наградаларына тәҡдим итеү эше лә алып барыласаҡ.

**Илшат Солтангәрәев.** Эйе, лайыҡлыларҙың хеҙмәтен үҙ ваҡытында күреп баһалау мөһим. Әйтәйек, Роберт Юлдашевты ғына алайыҡ. Ҡурайҙы ниндәй кимәлгә күтәреүгә өлгәште. Уйлап ҡараһаң, ул бит барыһын да үҙ көсө, үҙ аҡсаһы иҫәбенә башҡара. Әммә дәүләтебеҙ уға мактаулы исем биреү хаҡында уйламай ҙа. Эйе, ул Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты. Әммә Роберт Юлдашевтың хеҙмәтен Башҡортостандың халыҡ артисы исеме менән баһалау ҙа артыҡ түгел.

**Венер Йылҡыбаев.** Проекттар хаҡында һүҙ сыҡҡас, биш йылға бер уҙған Йомабай Иҫәнбаев исемендәге ҡурайсылар бәйгеһе тураһында ла телгә алыу урынлы булыр. Ул план буйынса 2011 йылда үтергә тейеш. Ошоға саҡлы был конкурс Хәйбулла районы бюджеты иҫәбенә үткәрелә килде. Әммә быйыл финанс юклыктан, район хакимиәте был сараны ойоштороуҙы үҙ өҫтөнә алырға теләмәй. Республика хөкүмәте ошо сараны үткәрергә ярҙам итһен ине.

**Фәиз Шәрипов.** Аҡһаҡалдар тарафынан 2012 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүгә 200 йыл тулыуға бағышлап, шул яуҙа ҡатнашыусы 28 башҡорт полкының батырлығын данлап, ҙур йыйын ойоштороп, шунда 2000 ҡурайсынан торған ансамбль менән сығыш яһарға тигән тәҡдим индерелде. Әлеге ваҡытта ҡурайсыларҙы һанау, барлау эше бара. Өҫтөбеҙгә шул ҙур бурысты алдыҡ. Бындай акцияны ойоштороу хөкүмәт тарафынан яҡлау табыр һәм был сараны ойоштороуға ла матди ярҙам күрһәтелер тигән ышаныстабыҙ.

**Венер Йылҡыбаев.** Эйе, башҡорт яугирҙарының рухы алдында баш эйеү буласаҡ ул. Был ҙур акция хаҡында хәбәрҙәр республика менән генә сикләнеп ҡалмаһын ине. Рәсәй һәм хатта донъя кимәленә танытырға кәрәк буласаҡ ул эште. Даны ни тора һуң: “Төньяҡ амурҙары” иҫтәлегенә 2000 ҡурайсынан торған ансамбль сығыш яһай!

**Һорау.** Ә ни өсөн ҡурайсыларҙың һанын, әйтәйек, 2012-гә еткермәҫкә?

**Илшат Солтангәрәев.** Улай ҙа мөмкин. 2000 башҡарыусы табыуын-тапҡас, өҫтәмә рәүештә 12 башҡарыусы йәлеп итеүе ауыр булмаҫ.

**Һорау.** Йәш-елкенсәк араһында ҡурай менән ҡыҙыҡһыныусылар байтаҡ. Улар башта махсус түңәрәктәрҙә шөғөлләнә. Һуңынан уҡыу йортон тамамлай. Әммә күбеһе киләсәктә үҙ һөнәре буйынса эш таба алмай. Улар ҡурайҙы үҙе өсөн генә өйрәнә булып сығамы?

**Илшат Солтангәрәев.** Был һорау һәр ҡурайсыны борсой торғандыр. Институтта уҡыған дәүерҙә мин дә йыш ҡына ошо хаҡта уйландым. Ысынлап та, күпселек мәктәптәрҙә ҡурай түңәрәктәре эшләй. Минеңсә, барыһы ла уҡытыусының эшмәкәрлегенә бәйле. Әлбиттә, ул уҡыусының иғтибарын ҡурайға ғына йүнәлтергә тейеш түгел, баланы мораль йәһәттән дә тәрбиәләргә, ниндәйҙер ынтылышҡа, үсешкә әйҙәргә бурыс-

лы. Һәм ҡурай менән ҡыҙыҡһыныусылар көңелдәрендә музыка ҡоралына, ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәтенә, тарихи әҫәрҙәргә ҡарата һөйөү һәм ихтирам тойғоһо йөрөтһөн ине. Улар киләсәктә ошо өлкәлә эшләйәсәкмен тип үҫергә тейеш, тип уйлайым. Ә ҡурайҙы тормошоноң бер өлөшө тип ҡабул иткән кеше ошо йүнәлештә эшләп уңыш ҡаҙанмай ҡалмаясаҡ.

**Фәиз Шәрипов.** Унан ҡурай класында уҡығандар араһында барыһы ла башҡарыусы түгел бит. Оҫта уйнауға өлгәшә алмаһа ла, балаларға һәйбәт итеп аңлата белеүе ихтимал. Ундайҙарҙан яҡшы ойоштороусы сығыуы мөмкин. Ә инде урынына еткереп уйнай белеүселәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Минеңсә, ысын ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов, Азат Айытҡоловтар һымаҡ булырға тейеш.



**Һорау.** Эволюция хаҡында һүҙ йөрөткәндә, нисек уйлайһығыҙ, ҡурай сәнғәте үҙенең иң юғары камиләненә еттеме икән әле? Һеҙҙеңсә, ҡурай бөгөн ниндәй дәүер кисерә?

**Фәиз Шәрипов.** Оҫта ҡурайсы, Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Азат Айытҡоловтан дәрестәр алғанда, ул: "Әле булһа ҡурайҙың серен сисеп бөтөрә алғаным юҡ, ҡустым", – ти торғайны. Ғөмүмән, музыканттар йыш ҡына: "Бер үк көйҙө ҡурайҙа нисә тапҡыр ғына башҡарма, уйнаған һайын уны яңынан асҡандай булабыҙ", – ти.

**Илшат Солтангәрәев.** Унда түбә тигән нәмә юҡтыр, миңә ҡалһа.

**Венер Йылҡыбаев.** Традицион башҡарыу камиләнә килгәндә, ҡурай әлеге ваҡытта шул традицияларҙы дауам итә, әүәлге камилендә ҡалырға тырыша. Был йүнәлештә ниндәйҙер эксперименттар булырға тейеш тә түгел. Борон ата-бабаларыбыҙ көйҙәрҙе ҡурайҙа нисек башҡарһа, уларҙы шул килеш, төкмәй-сәсмәй киләһе быуынға еткерергә бурыслыбыҙ. Ә быуна академик йүнәлешкә килгәндә, ҡурайҙы юғары уҡыу йорттары, училищелар стандарттары программаларына яраҡлаштырыу өсөн ниндәйҙер үҙгәрештәр индереү, бәлки, кәрәктер ҙә. Был йүнәлештә ҡурай әле эҙләнеү өҫтөндә.

**Фәиз Шәрипов.** Классик көйҙәрҙе уйнайбыҙ. Төрлө сит ил композиторҙарының әҫәрҙәрен алып, транскрипция яһап, ҡурайға яраҡлаштырабыҙ. Ҡурайға ниндәйҙер циклөүҙәр ҡуйырға кәрәкмәйҙер. Тулы ҡанлы музыка ҡоралы ул. Киреһенсә, эҙләнеүҙәр, эксперименттар талап итеүе.

**Илшат Солтангәрәев.** Ғөмүмән, ҡурайҙа теге йәки был көйҙө башҡарып буламы, тигән һорау тыуырға тейеш түгел. Барыһын да уйнарға мөмкин. Теләк кенә кәрәк.

**Һорау.** Ҡурайҙың бәҫе төшөүе хафаға һала. Бөгөн уның исеме менән нимәне теләйҙәр шуны атайҙар. Хатта араҡыны ла... Ҡурайсылар союзы ошоға ҡаршы тора аламы?

**Илшат Солтангәрәев.** Был һорауҙы Азат ағай Айытҡолов байтаҡ йылдар элек үк күтәрҙе. Быны өсөн ҡурайға патент кәрәк.

**Венер Йылҡыбаев.** Президент тарафынан брендтарҙы патентлау хаҡында һүҙ сыҡты бит инде. Шул исемлектә иң беренселәрҙән булып башҡорттоң милли музыка ҡоралы – ҡурай торорға тейеш.

**Илшат Солтангәрәев.** Халыҡ араһында ҡурайҙың бәҫе төшөүе, ысынлап та, уйға һала. Бәғзе бер милләттәштәребеҙҙең ҡурайҙы боронғолоҡ ҡалдығы тип ҡабул итеүе бигерәк тә үкенесле. Беҙгә йылына бер нисә мәртәбә сит илгә сығып ҡайтырға тура килә. Европа халҡы алдында сығыш яһайһың – баҫып ҡул сабалар. Күрер күҙгә ябай ғына булған музыка ҡоралының моңон ишетеп таң ҡалалар. Ә беҙҙекеләр алдында ни тиклем генә тырышып уйнама – алҡыштарға йыбаналар. Беләһегеҙме, ни өсөн сит илдә ошондай халыҡ ижады фестивалдәре үтә? Сөнки уларҙың үҙ фольклоры онотолған, бөгөнгәсә һаҡланып ҡалмаған. Шуға ла улар



төрлө халыҡтың үҙенсәлекле сығыштарынан торған аҙналар дауамында барасаҡ фестивалдәр ойошторол, рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә. Халыҡ моңға һыуһай. Шундай замана беҙгә килмәһен. Аллаға шөкөр, рухи мәҙәниәтебеҙ һағында тороусы сәнғәт әһелдәребеҙ бар. Теҙгенде артабан да ҡулда нык тоторға кәрәктер тип уйлайым.

**Венер Йылҡыбаев.** Әгәр ҙә Башҡортостан юлдаш телеканалы ла дөйөм шаблонға әүерелмәк булып, халыҡсанлығын юғалта, зәңгәр экрандар аша яратҡан көй-моңдарыбыҙҙы яңғыратмай, “Байыҡ”, “Тылсымлы ҡурай”, “Хазина” кеүек тапшырыуҙар йәшәүҙән туҡтай икән, быны асылыбыҙҙы юғалтыуға илткән юл тип билдәләргә кәрәк. Ә бит ниндәй генә заманса тапшырыуҙар күрһәтмәһендәр, телевизорҙы барыбер 100 процент халыҡ ҡарамаясаҡ.

**Һорау.** Олораҡ башҡарыусыларҙың ҡурайҙы микрофонға уйнау уның моңона хилафлыҡ килтерә тиеүен йыш ишетергә тура килә. Һеҙҙең был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?

**Илшат Солтангәрәев.** Ҡурай саксофон ише ҡыҫҡыртып микрофонһыҙ ғына уйнай торған музыка ҡоралы түгел. Әммә тамашасы үҙен ипле тотоп, тын ғына ултырып тыңлай икән, микрофондың кәрәк булмауы ла ихтимал. Әйтәйек, 2008 йылда Испанияла шундай хәлгә тарыным. Сәхнәгә сығып уйнай башлағайным, микрофон боҙолдо ла ҡуйҙы. Залда 1500-2000 кеше булғандыр. Микрофонһыҙ уйнаным. Яҡшы ишетелде. Ә беҙҙә шул сама халыҡ алдында сығыш яһарға тура килһә, һис һүҙһеҙ ишетелмәйәсәк. Шуға ла күберәк микрофонға уйнарға тура килә.

**Венер Йылҡыбаев.** Йәнә барыһының да микрофон менән эшләй алмауы ла ихтимал. Бына Роберт Юлдашев көн дә микрофонға уйнай. Унда ниндәйҙер иммунитет барлыҡҡа килгән тип әйтергә лә мөмкин. Ә бәғзеләр микрофондан бөтөнләй ҡурҡа. Ҡыҫҡаһы, был бик бәхәсле мәсьәлә.

**Һорау.** Профессионалдар ҡурайсының тауышын ғына ишетеп, көйҙә кем башҡарыуын әйтеп бирергә, хатта уның асмы, туҡмы икәнлеген дә аңларға мөмкин, тиҙәр...

**Илшат Солтангәрәев.** Эйе, әгәр ҙә ҡурайсы ас ҡорһаҡҡа уйнай икән, тауышы ярлыраҡ, тоноғораҡ сыға. Иғтибар менән тыңлаһаң, тауышы аша ҡурайҙың ниндәй материалдан эшләнгәнлеген дә айырырға мөмкин.

**Венер Йылҡыбаев.** Ҡурайсы барлыҡ башҡарыусыларҙы ла таный белергә тейеш. Сөнки һәр кемдең үҙенә генә хас тембры, моңо бар.

**Фәиз Шәрипов.** Бына хәҙер ниндәй генә ҡурайсының яҙмаһын ҡуйһағыҙ ҙа, кем башҡарғанын әйтеп бирә алаcаҡбыҙ. Бигерәк тә миңә, фольклор кабинетында эшләгән кешегә, ҡурайсыларҙы тауышҡа айырмау гонаһ булыр ине.

**Һорау.** Бөгөнгө көндә ҡурай өсөн этюдтар һәм башҡа ҡатмарлы әҫәрҙәр яҙыла тип әйтеп үттегеҙ. Ә бына ҡурай хаҡында ниндәйҙер фәнни хеҙмәттәр бармы?

**Венер Йылҡыбаев.** Ҡурай филологик йәһәттән өйрәнелгән. Ул яҙыусыларыбыҙ, рәссамдар тарафынан тасуирланған, һынландырылған. Ә музыкаль инструмент булараҡ ҡурай тураһында әле бер генә төплө ғилми эш тә юҡ. Тәү ҡарашҡа ҡурай ябай ғына музыка ҡоралы төҫлө. Әммә шул уҡ ваҡытта әлегә саҡлы өйрәнелмәгән килеш ҡала. Әлбиттә, Айрат Ҡобағошовтың, Ришат Рәхимовтың был өлкәлә башҡарған ҡайһы бер эштәре бар. Уларҙың башланғысына нигеҙләнеп, ҡурай тураһында ғилми хеҙмәт яҙыу, хатта фәнни асыштар яһау ҙа талап итә. Фәнде финанслау мәсьәләһенә килгәндә, беҙ ниндәйҙер урталыҡта ҡалабыҙ. Сөнки Өфө сәнғәт академияһын федераль ҡаҙнанан финанслау ҡаралған. Ә инде фән өлкәһендә ниндәйҙер эштәр атҡарыр өсөн Мәскәүгә барып аҡса һорап йөрөүе ахмаҡлыҡ һымаҡ тойола. Һәм шул уҡ ваҡытта уҡытыу системаһында ҡурайсыларҙың ниндәйҙер фәнни эш менән шөғөлләнеп китеү юлдары әлегә эшләнеп бөтмәгән. Теоретиктар, музыка белгестәре ҡурайсы-

ларҙы фән өлкәһендә күрмәй. Мөрәжәғәт итеп ҡараныҡ. Фәнни етәксе беркетеүҙәрен һораныҡ. Әлегә һаҡлыҡ менән генә кире боралар.

**Һорау.** Бөгөн ҡурайсылар кемдең ҡурайҙарына өҫтөнлөк бирә?

**Илшат Солтангәрәев.** Шуныһы ҡыуаныслы: ҡурай яһаусы оҫталар һаны арта. Музыка ҡоралын яңы ысулдар, материалдар менән эшләйҙәр. Оҙаҡ ваҡыт Вәкил ағайҙың ҡурайҙары ҙур һорау менән ҡулланылды. Әлеге ваҡытта беҙгә ҡурайҙы Күгәрсен районы Юлдыбай ауылында йәшәүсе Рәмил Хөснуллин тигән оҫта эшләй.

**Венер Йылҡыбаев.** Ҡурайҙы төрлө оҫталар эшләп ҡарарға тейеш. Сөнки конкуренция булған осраҡта ғына әйберҙең сифаты арта. Әгәр ҙә бер генә кеше эшләһә, ул ялҡаулана, үҙ эшенә илке-һалҡы ҡарай башлай, яуаплылыҡ тойғоһо юғала.

**Һорау.** Роберт Юлдашевҡа ҡурайҙы донъя кимәленә сығарыр өсөн күпме аҡса кәрәк, тигән һорау биргәйнек. Ул: "Аҡса кәрәктер тип, ваҡытты ғына әрәм иткәнмен. Баҡһаң, теләк кенә талап ителә икән", – тигәйне. Һеҙ ошо һорауға ни тип яуап бирерһегеҙ?

**Илшат Солтангәрев.** Был бик ҡатмарлы һорау. Уйлап ҡараһаң, ҡурай үткән быуатта уҡ донъя кимәлендә танылыу яулаған. Ата-бабаларыбыҙ ҡурай менән тотош донъяны урап сыҡҡан.

**Венер Йылҡыбаев.** Телевидениены 100 процент халыҡ ҡарамаған һымаҡ уҡ, ҡурайҙы ла 100 процент кеше тыңламаясаҡ. Был һәр кемдең зауығына бәйле.

**Фәиз Шәрипов.** Әммә бөгөнгө интернет, глобализация заманында бер халыҡтың культураһын тотош донъяға танытыу мөмкин. Һәм ҡурайҙы ла бөгөн донъяның төрлө мөйөшөндә яратып тыңлаусылар бар.

**Һорау.** Йәш ҡурайсыларҙан "Шоңҡар" журналын уҡыусыларға теләктәр.

**Венер Йылҡыбаев.** Әлбиттә, һәммәбеҙҙе лә иң тәүге сиратта киләсәк хаҡында уйҙар борсой. Ун, егерме, йөҙ, һәм хатта мең йылдан һуң башҡорт телен, башҡорт музыкаһын ниндәй яҙмыш көтә? Билдәһеҙ. Әммә халыҡ үҙ телендә һөйләшә һәм ҡурай моңо яңғырай икән, рухи мәҙәниәтебеҙ, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары ла, йырҙарыбыҙ ҙа, әҙәбиәтебеҙ ҙә йәшәйәсәк. Башҡорт – ерле халыҡ. Шул ерҙә ышаныслы атлап йөрөргә яҙһын. Халыҡ ниндәйҙер сит ил



ҡиммәттәренә, ялтырауыҡҡа алданмаһын, асылына хыянат итмәһен, үҙ-үҙе булып ҡалһын.

**Илшат Солтангәрев.** Венер ялтырауыҡ хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, шундай уй тыуҙы: кемдер ғүмер буйы эшләһә лә хеҙмәте күренмәй. Бәғзеләр, бер ни атҡармаһа ла, ялтырап тик йөрөй. Ниндәй генә эшкә тотонһаҡ та, еренә еткереп, күңел һалып башҡарһаҡ ине. Юғиһә, бер нәмә эшләмәйенсә халыҡты алдап, күҙ буяп йөрөүҙәр күңелде өйкәй. Әйтәйек, академияла йылына ике тапҡыр башҡорт музыкаһы факультеты студенттарының отчет концерты булып тора. Бик үкенесле хәл – халыҡ йөрөмәй. Әллә уны етди сара тип ҡабул итмәйҙәрме? Әллә баһалап бөтмәйҙәрме? Мәҙәниәт министрлығы хеҙмәткәрҙәренә, Ҡоролтай етәкселәренә, хакимиәт вәкилдәренә саҡырыу ҡағыҙҙары таратып сығабыҙ. Әммә улар концерттарға йөрөүҙе кәрәк тип тапмай. Килһәләр, ниндәйҙер етешһеҙлектәр хаҡында белдерһәләр, йәиһә хуплаһалар эшкә дәрт, илһам артыр ине. Тик шундай мөмкинлек бирмәйҙәр. Шулай уҡ, юғарыла ултырыусы ағайҙарға ярҙам һорап мөрәжәғәт итһәң, ҡустым, һинең ҡайғың юҡ әле, тип ҡул һелтәүселәр осрай. Ул бит минең ҡайғым түгел – ҡурайсыларҙыҡы, халҡыбыҙҙыҡы. Үҙ мәҙәниәтебеҙгә ҡарата битараф булмаһаҡ ине.

**Фәиз Шәрипов.** Барыһына ла именлек, һаулыҡ теләйем. Аллаһы Тәғәлә тән, рух сәләмәтлегенән һәм моңобоҙҙан айырмаһын. Сөнки моң – ул матурлыҡ. Ә матурлыҡ, билдәле булыуынса, донъяны ҡотҡарыр.

***Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.***

# ТОТОШ ДОНЪЯНЫ ҮҘГӘРТӘ АЛМАҺАҢ... ҮҘЕҢ ҮҘГӘР!

## АСТАН ҮЛГӘН АКУЛА

Әллә ниндәй заман тыуҙы, тиһәң, өләсәй: “Заман элекке, үҙегеҙ генә үҙгәрәһегеҙ”, – ти торғайны. Ысынлап та, заман күҙ йомоп асҡансы үҙгәрә, беҙҙең фекерләүебеҙ, тормошҡа ҡарашыбыҙ хатта уның артынан өлгөрә лә алмай. Бәлки, шул уҙған быуаттың нисәнселер йылдарында ҡатып ҡалған фекерләүебеҙ менән бөгөн шундай хәлгә төшкәнбеҙҙер ҙә. Йәмғиәттә, тормошобоҙҙа күсәгилешлек тигән төшөнсә бөтөнләй онотолдо, һөҙөмтәлә тағы бер юғалған быуын барлыҡҡа килде.

Күсәгилешлек булмауҙың сәбәбе – ололарҙың йәштәр менән үҙ тәжрибәһен бүлешмәүе, уларҙың позицияһын һәм ҡарашын аңламауы, уларға һаман да бала итеп ҡараүындалыр, моғайын. Ғалимдар билдәләүенсә, тыуғанда һәр бала тиерлек гений булып тыуа, унан биш йәшенә тиклем беҙ, өлкәндәр, робот әүәләйбеҙ икән. Бында “ярамай!” тигән һүҙ ҙә етә. Артабан инде балаларҙы, хатта ярағанда ла, ҡайҙалыр күңел төпкөлөндә “ярамай” тигән һүҙ тыйып тик тора. Шул уңайҙан бер тәжрибә иҫкә төшә: ҙур аквариумға акула ебәрәләр ҙә, уртанан үтә күренмәле пластмасс материал менән бүлеп, икенсе яғына ваҡ балыҡтарҙы төшөрәләр. Асыҡҡан акула ваҡ балыҡтарҙы ашарға тип ажарланып ынтыла, ләкин мороно менән кәртәгә төртөлә. Бер нисә көн шулай дауам иткәс, урталағы кәртәне алалар. Ваҡ балыҡтар рәхәтләнеп эргәһендә йөҙөп йөрөһә лә, акула уларға иғтибар ҙа итмәй, сөнки төпкөл аңында һаман кәртә һаҡлана. Шулай бер нисә көндән акула астан үлә... Йәштәр ҙә шулай күп тапҡыр тыйыуҙар, хатта елкәһенә “ҡундырыуҙар” ҙа алғас, артабан ынтылыш яһап та тормай, яйлап деградацияға бирелә.



Демократия елдәре иҫә башлағас, яңы быуын лидерҙары күренә башланы. Әммә уларҙың фекерләүе иҫке формация кешеләренекенән ҡырҡа айырыла һәм икенсе төрлө ине. Шуға ла, йәштәрҙең уйы өлкәндәрҙеке менән тап килмәгәнлектән, улар араһында даими аңлашмаусанлыҡтар булып тора. “Атайҙар һәм балалар” проблемаһы тип ҡарай быны белгестәр. Ярамай, тип үҫкән атайҙар хәҙер инде үҙенең белгән урыны, вазифаһы, креслоһы өсөн ҡурҡһа, йәштәр, максимализмға бирелеп, уларҙы аңларға теләмәй.

## ҮЛГӘН ҺЫЙЫР ҺӨТЛӨ БУЛА...

Тарихтан күренеүенсә, пионер, комсомол тәрбиәһе менән бергә йәштәр лидерлыҡ сифаттарына ла эйә булып сыға ине мәктәптән, белем усаҡтарынан. Ул ваҡытта ниндәй ғаиләнән, атай-әсәйеңдең кем булыуы мөһим түгел ине. Әгәр һин мәктәптә өскә уҡып та лидер икәнһең, барыбер һинең өсөн юлдар

асыҡ. Бында, әлбиттә, башланғыс синыф уҡытыусыларының да роле ҙур. Юҡҡа ғына уға икенсе әсәй тимәйҙәрҙер. Сөнки ғаиләһендә, балалар баҡсаһында асылмаған, үҙ йүнәлешен тапмаған, "ярамай" ҙан арына алмаған баланың күңеленә тап ул юл таба. Мин һаман да энтузиазм менән һәр ҡайһыбыҙға был тормоштоң ауырлығына зарланмаҫҡа, ә уларҙы еңеп, йылмайырға өйрәтергә тырышҡан үҙемдең башланғыс синыф уҡытыусыһын һағынам, һаман да уның уҡытыу методикаһына һоҡланам. Ул дөрөҫ юлдан барған, тик беҙҙең мәғариф системаһы ғына дөрөҫ булмаған. Ә инде барлыҡ стереотиптарҙы емереп, һәр баланан лидер яһаған уҡытыусының сәскән орлоҡтарын артабан үҫтереү, һүлытмай йәшәтеү – һәр кемдең үҙенән тора.

Бөгөн иһә мәғариф системаһындағы лидер тәрбиәләү айырым балаларҙы төрлө конкурстарға һәм Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләү менән алмаштырылды, ахыры. Лидерлыҡ бит уҡытыусы ҡуйған бурыстарҙы ваҡытында яҡшы итеп үтәүҙән һәм яҡшы баһа алыуҙан ғына ғибәрәт түгел. Лидер – үҙ артынан кешеләрҙе эйәртергә, шул уҡ ваҡытта уларҙың именлеген тәьмин итеп, һөҙөмтәгә алып барырға тейеш. Бынан икенсе мәсьәлә тыуа – беҙ үҙебеҙ лидерлыкты ҡабул итеп алырға, иңебеҙгә яуаплылыҡ һалырға әҙерме? Юҡтыр, моғайын, сөнки ете тиҫтә йыл буйы бер иш совет кешеһе әүәләргә тырыштылар. Ә күңелендә дингә ихтирам, телгә һөйөү булмай тороп, кеше бер ваҡытта ла лидер була алмай. Булған хәлдә лә ялған лидер булып, былай ҙа саҡ торған халыҡты икенсе йүнәлештә алып китеүе ихтимал.

Лидерлыкты йәшәү өсөн көрәштең бер алымы тип ҡарайым мин. Тәбиғәттә көслө йән эйәһе генә йәшәүгә хоҡуҡлы булған кеүек, тормошта ла бары тик лидерҙар ғына алдына ҡуйған маҡсатына өлгәшә. Тик уны карьера артынан ҡыуыусы менән бутамағыҙ. Карьеристың лидер булмауы ла бар. Бөгөн республикала Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы "пачкалап" тигәндәй буласаҡ чиновниктарҙы әҙерләй. Ул партия заманындағы Юғары партия мәктәбенә алмаш булараҡ ойошторолғандыр, күрәһең. Ә бит ул партмәктәпкә инеү еңел булмаған. Уның ҡарауы, партмәктәпте тамамлаусылар араһынан ниндәй лидерҙар сыҡҡан!?

**Бөгөн иһә мәғариф системаһындағы лидер тәрбиәләү айырым балаларҙы төрлө конкурстарға һәм Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләү менән алмаштырылды, ахыры. Лидерлыҡ бит уҡытыусы ҡуйған бурыстарҙы ваҡытында яҡшы итеп үтәүҙән һәм яҡшы баһа алыуҙан ғына ғибәрәт түгел. Лидер — үҙ артынан кешеләрҙе эйәртергә, шул уҡ ваҡытта уларҙың именлеген тәьмин итеп, һөҙөмтәгә алып барырға тейеш. Бынан икенсе мәсьәлә тыуа — беҙ үҙебеҙ лидерлыҡты ҡабул итеп алырға, иңебеҙгә яуаплылыҡ һалырға әҙерме?**

Чиновник булырға резервта тороусылар күп, тик лидерҙар ғына юҡ. Сөнки барыһы ла, аҡса түләп булһа ла, ошо академияны тамамларға тырыша. Тимәк, ҡасан да булһа бер йылы урынға барып ултырып, үҙенең һәм ғаиләһенең, бәлки яҡындарының да, киләсәген, ҡартлығын гарантиялай. Бер заман барыһы ла етәксе булып бөтһә, атка бесән кем һала, тип ултырырбыҙмы икән?

## МӘҒЛҮМӘТЛЕ – ЕҢЕҮСЕ...

Тәртәне саҡ ҡына ситкә борҙом шикелле. Бөгөн башҡорттар араһында күҙ терәп торорлоҡ лидер булмауы хаҡында ине бит һүҙем. Республикала барған һуңғы ваҡиғалар ҙа быны асыҡ күрһәтмәйме һуң?

Заманына ҡарап, лидерҙар ҙа үҙгәрергә, халҡыма зыян итмәйем, тигән принциптан сығып эшләргә тейештәр, минеңсә. Әгәр уҙған быуаттың 90-сы йылдарында – суверенитет яулаған йылдарҙа – урамдарҙы тултырып пикеттар, митингылар ойоштороу, лозунгылар яҙыу, трибуна артынан ялҡынлы һүҙҙәр һөйләү үҙен аҡлаһа, хәҙерге көрәш алымдары бөтөнләй икенсе. Бөгөн мәғлүмәт быуаты. Мәғлүмәтле кеше генә еңеүсе була.

Барыбыҙға ла мәғлүм, әле республика дары мискәһе өҫтөндә ултырған кеүек. Үҙҙәрен лидер тип атаусыларҙың береһе генә яңылыш шырпы сыйһын – икенсе Чечня тоҡаныуы ла бик ихтимал. Бер кешенең аҡылһыҙлығы

арҡаһында тотош милләт, тотош республика халҡы ни өсөн зыян күрергә тейеш әле?

**Бөгөн йәштәр айыҡ аҡылға ҡарағанда яндырайлығы менән иғтибарҙы йәлеп итә. “Уйламай һөйләгән — ауырымай үлгән“ тигәндәре дөп-дөрөҫ. Ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙынан, беҙҙе ҡурҡыталар, ҡурҡмағыҙ, тигәнде ишетергә тура килә. Әгәр ҡурҡмауың тотош республика халҡына хәүеф менән янай икән, ҡурҡырға кәрәк. Ҡурҡыу — ҡурҡаҡлыҡ билдәһе түгел, бары тик һинең арҡала башҡалар зыян күрмәһен тип уйлау ғына.**

Лидерҙар юҡ бөгөн. Дәүләт сәскә атһын, алға барһын өсөн, лидер ошо мөхиттә тыуып, ошо мөхиттә үҫеп, ошо мөхиттән сығырға тейеш. Ә тәғәйенләп ҡуйылған лидер бер ваҡытта ла лидер була алмай. Сөнки уның яҙмышын бер нисә кеше генә хәл итә, ә тотош халыҡ түгел.

Шул уҡ суверенитет яулау йылдарында милләтебеҙҙең бына тигән лидерҙары бар ине. Улар ысын мәғәнәһендә лидер булып, үҙ артынан меңәрләгән кешене эйәртте. “Аҡ тирмә”, “Урал” башҡорт халыҡ үҙәге тап республика киләсәген хәл итте, тиергә лә мөмкин. Үҙ абруйы, зыялылығы, айыҡ аҡылы, үлсәп һөйләгән телмәре менән улар дәүләтебеҙҙе ҡан ҡойошһоҙ, имен-аман яңы формацияға алып сыҡты. Ул ваҡыттағы лекторҙар, агитаторҙар, трибундар республиканы арҡырынан-буйына йөрөп сыҡҡандыр.

## УЙЛАМАЙ ҺӨЙЛӘГӘН...

Бөгөн йәштәр айыҡ аҡылға ҡарағанда яндырайлығы менән иғтибарҙы йәлеп итә. “Уйламай һөйләгән – ауырымай үлгән” тигәндәре дөп-дөрөҫ. Ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙынан, беҙҙе ҡурҡыталар, ҡурҡмағыҙ, тигәнде ишетергә тура килә. Әгәр ҡурҡмауың тотош республика халҡына хәүеф менән янай икән, ҡурҡырға кәрәк. Ҡурҡыу – ҡурҡаҡлыҡ билдәһе түгел, бары тик һинең арҡала башҡалар зыян күрмәһен тип уйлау ғына. Ә бөгөнгө йәштәр уйлап баш ватмай, уларға оран һалырға ла, халыҡты йыйырға. Артабан? Еңгәнгә тиклемме? Ҡаршы тороусы ла еңелергә теләмәһә?

Бөгөн – мәғлүмәт заманы. Мәғлүмәттең ҡайһы бере файҙалы, ҡайһыһы зыянлы, бары тик айырып ҡабул итергә генә кәрәк. Көнө-төнө телевизорҙан яңғыраған негатив төпкөл аңға һеңеп, негативты үҙенә тарта. Ошо уңайҙан тағы бер миҫал килтереү урынлы булыр, моғайын. Тереза әсәнән уның оҙаҡ йәшәү серен һорағас, ул: “Мин бер ваҡытта ла нимәгәләр ҡаршы булманым, ә тик нимәләр өсөн сығыш яһаным”, – тигән. Уйлап ҡараһаң, беҙ гел нимәгәләр ҡаршы сығабыҙ түгелме? Уҡытыу системаһынан төбәк компонентын алыуға ҡаршы, үҙәккә ҡаршы, наркотиктарға ҡаршы, эскелеккә ҡаршы... Бәлки, ҡаршы тигән лозунгыларҙы “өсөн”гә алмаштырырға кәрәктер. Сәләмәт тормош өсөн, төбәк компонентын ҡалдырыу өсөн, үҙ президентыбыҙ өсөн...

## ТӨП МӘҒЛҮМӘТ СЫҒАНАҒЫ

Икенсе яҡтан ҡарағанда, беҙ оло мираҫты – диндә иҫәпкә алмайбыҙ. Унда яҙылғандар ҙа шул уҡ мәғлүмәт, тик яҡшылыҡҡа әйҙәгән, ыңғай заряд һалынған мәғлүмәт бит. Әле йәштәр дингә күпләп ылыға. Бында шуныһы ҡыҙыҡлы – дин әһелдәренең өгөт-нәсихәтенә ҡарағанда, ҡасандыр сәхнәлә йырлап, ырғанлап йөрөгән Айгөл Үтәгәнова, Илгиз Абдрахманов, Фәнзил Әхмәтшин кеүек йәштәр дингә китеп, үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә алды. Был нимә тураһында һөйләй – тимәк,



һәр йәш категорияһындағы кеше менән уның телендә, уға аңлайышлы телдә һөйләшергә кәрәк. Ә һуңғы ваҡытта нимә күҙәтелә: һөйләүселәр, шулай уҡ зарланыусылар ҙа етерлек, бары тик тыңлаусылар ғына юҡ. Һәр кем мөмкин булғанда, яйы сыҡҡанда һүҙен әйтеп, зарланып, кемделер ғәйепләп ҡалырға тырыша. Ләкин төп ғәйептең үҙендә икәнен бирәү ҙә аңларға теләмәй. Лидерҙың тағы бер ыңғай сифаты – кешене тыңлай белеү. Ысынбарлыҡта беҙҙә мөнәсәбәттәр сарсап килеп һыу һораған кешегә ҡоро икмәк тотторған кеүек. Беҙ лидер тип уйлаған етәкселек араһында иһә ниндәйҙер мәсьәләне хәл итә алмай тупһа тапап арыған халыҡ артабан инде вазифа биләүселәргә ышанмай башлай. Халыҡ ышанмаған лидер лидер була аламы? Тимәк, лидер булыр өсөн ҡайһы бер ғәмәлдәрҙән тыйылып торорға кәрәк. Был тыйыуҙар барыһы ла диндә бар. Христиандар уны заповедь тип атаһа, мосолмандар тыйыу тип йөрөтә.

**Һәр кем мөмкин булғанда, яйы сыҡҡанда һүҙен әйтеп, зарланып, кемделер ғәйепләп ҡалырға тырыша. Ләкин төп ғәйептең үҙендә икәнен бирәү ҙә аңларға теләмәй. Лидерҙың тағы бер ыңғай сифаты — кешене тыңлай белеү. Ысынбарлыҡта беҙҙә мөнәсәбәттәр сарсап килеп һыу һораған кешегә ҡоро икмәк тотторған кеүек.**

Бөгөн диндә әллә нисәмә йүнәлеш барлыҡҡа килде һәм йәштәребеҙ тағы ла бер ярҙан икенсеһенә бәргеләнә. Мин дин белгесе түгел, шулай ҙа унда ла, зыян итмә, тигән мәғәнә ятыуына шикләнмәйем. Әгәр кемгәлер зыян килтерә икән, тимәк, ул Мөхәммәт пәйғәмбәр тараткан дин түгел, тимәк, ошо йүнәлештә үҙен дини лидер тип танытыусылар ҙа шик тыуҙыра.

## ДИОГЕН КЕШЕ ЭҘЛӘҺӘ...

Лидер булмауҙың тағы бер сәбәбе – үс алыу, ҡон ҡайтарыу. Башҡа халыҡтарҙы әйтә алмайым, әммә беҙҙең халыҡта был киң таралған. Йыш ҡына, "күрһәтермен әле", "белерһең әле", "иҫеңә төшөр" һәм шуға оҡшаш янауҙар ишетелә. Һәм, мөмкинлек сыҡҡанда, шым ғына этлек эшләргә лә күп һорамайбыҙ. Бигерәк тә был вазифа биләүсе менән хеҙмәткәр араһында йыш күҙәтелә. Вазифа биләүсе хеҙмәт вәкәләттәре менән яуыз ниәттә файҙалана, тибеҙ ундай осраҡта. Ә күпме кеше шуға риза булып, баш баҫып эшләй, урамға ҡыуып сығарып ебәреүҙәренән ҡурка. Сөнки елкәлә әллә нисәмә кредит түләүе ята...

Система боҙа кешене. Юҡҡа ғына "башҡорт түрә булһа – сабатаһын түргә элә" тимәйҙәр. Бер башҡортҡа ғына ҡағылмай был мәҡәл. Лидерҙар боҙолмай, улар үҙенең урынына алмашҡа бер нисә лидер әҙерләй. Күсәгилешлек шулай дауам итә. Ҡеүәтле империя шулай һаҡлана, шулай ул оҙон ғүмерле була.

...Ә беҙҙә бөгөн лидерҙар юҡ. Диоген көпә-көндөҙ шәм яҡтыртып кеше эҙләгән кеүек, лидер эҙләп сығырға ҡалдымы икән?



## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Лидер тәрбиәләү ғаиләнән, мәктәптән, бәләкәй генә коллективтан, йәмғиәттән башлана. Киләсәк ышаныслы ҡулдарҙа булһын өсөн, балаларға бәләкәйҙән яуаплы эште ышанып тапшырыуҙан ҡурҡырға ярамай. Уларҙа бәләкәй еңеүҙән үҙ-үҙҙәренә ышаныс уяна. Мәктәп, коллектив, йәмғиәт ошо ышанысты үлтерергә түгел, артабан үҫтерергә бурыслы. Бары тик артыҡ ышаныс мин-минлеккә әүерелеп, милләткә, тотош республикаға ғына зыян итмәһен.**

*З. ӘЙЛЕ.*



Тамара ИСКӘНДӘРИӘ

# ЙЫЛЪЯҘМАНЫҢ ТӨП НӨСХӘҺЕН ЯҘА БИТ ИЛАҺ ҠУЛЫ



## КЛЕОПАТРА

Оҙон муйын, наҙлы ҡараш –
Мысыр батшабикәһе,
Һулыштарҙың иң ҡайнары,
Ҡараштарҙың – текәһе!

Һырғаланған алҡалары,
Борғоланған йыланы.
Клеопатра, һинең янда
Битарафтар буламы?

Ҡыйыу, бәҫле уй һалынған
Һинең бейек ҡалпаҡҡа.
Цезарь үҙе эләккән бит
Һинең ҡараш-ҡармаҡҡа.

Һөйөүеңдә һин илгәҙәк,
Һөйөүеңдә һин ихлас,
Ләкин күпкә иркенерәк
Уй-фекереңдә ҡолас.

Теләктәрең бейеклеге –
Талаптарың хаҡлығы!
Ҡараштарың бөйөклөгө –
Терәктәрең юҡлығы...

Илең өсөн, улың өсөн,
Ғәзиз Мысыр хаҡына
Һин инәһең йөҙ бәхәскә,
Йөҙ ҡылыстың аҫтына.

Ниндәй моң ул,
Тирбәндереп,
Аса дәүер ишеген?..
Клеопатра! Бәүелтәһең
Тарихтарҙың бишеген.

## ТАРИХ ЮЛЫ

Тарих, тибеҙ. Ә ул тарих
Күҙ буяуға ҡоролған.
Бер дөрөҫлөк,
Мең әйләнеп,
Ҡырҡ тарафҡа боролған.
Йәнәһе, килер быуындар
Тәрбиә алһын унан,
Ялғандан эҙләһен хаҡлыҡ,
Иманһыҙлыҡтан – иман.
Күрәһең дә, тарих юлы
Түгел хәҡикәт юлы.
Һин мәшһүрлек ҡолоһоңмо,
Әллә изгелек ҡоло,
Эй, тарих?!
Бөйөктәрендең
Ҡайһының ҡанһыҙ ҡулы?
Күрәһең дә, тарих юлы
Түгел ғәҙеллек юлы.
Оло золом ҡылынамы,
Ҡотороп шашамы хис –
Тарихҡа баш булам, тиеп,
Сиктәрҙән аша иблис!

Юҡ, быға килешмәйем мин:
Алда – рухи ихтилал.
Тарихтағы боролмалар –
Һынауҙыр ул, ихтимал...

Боролманың батыры бар,
Боролманың – бахыры.
Ҡағыҙҙарға яҙылмаған
Тарихтарҙың ахыры!

Асылыр иман юлы, тим,
Табылыр ул Рух юлы.
Йылъяҙманың төп нөсхәһен
Яҙа бит Илаһ ҡулы.

* * *

Һин уҡыйһың шиғырымды...
Килә минең илағым.
Ниңә ошо туңбаш йәнгә
Ғашиҡ иттең, илаһым?

Наҙлы хистең остоғо юҡ
Уға барып етәһе.
Мин тип уйға ҡалаһы юҡ
Һәм юҡ мине көтәһе.

Ҡул һыртына эйәк терәп,
Текәлеп шиғырыма,
Әйләнәһеңме, бахырым,
Әҫәрем батырына?

Бөркөт саңҡыр бейеклектән,
Сөңгөлдәр тәрәненән,
Зиһен асыр тамғаларҙан,
Бураҙна төрәненән

Мин уҡыған яҙыуҙарҙы
Таный алһаң да хатта,
Йөрәгемде танымауың –
Иң оло һинең хата.

## ҺИН ТЕРЕМЕ

Икебеҙгә генә мәғлүм
Һөйөү сере.
Һин тереме, тылсым хуры?
Ә мин тере!

Һокландым мин был донъяға
Һин бар өсөн.
Һин тереме, пакландырсы
Рухым көсөн!

Һакландым мин ҡыуан елдән,
Зәһәр нурҙан.
Һин тереме, мин арбалдым
Һинең хурҙан!

Һин тереме?
Йылдар үтә,
Һорау – һере.

Саф көйөмө күңелеңдә
Һөйөү сере?

Бергәнәмдең булдым мин дә
Берҙән-бере.
Һин тереме, мөхәббәтем?
Ә мин тере!

## БЫЛ МӘҢГЕЛЕК

Болот ҡуйырып күктә ҡаплаһа ла,
Уйнаһа ла йәшен уғы зәһәр,
Һин уйлама, был мәңгелек, тиеп,
Күктәр төпһөҙ, йәнем,
Күктәр зәңгәр.

Ел-дауылға ҡаршы тора алмайса
Бөтһә лә ер кибеп, үлән көйөп,
Был мәңгелек, тиеп уйлама һин,
Тауҙар ғорур, йәнем,
Тауҙар бейек.

Ҡырыҫ күңеләңдән китһә ырыҫ,
Мәрхәмәтең бөтөп, тапмаһаң бол,
Мәңгелектә ҡосоп, йыһан илар...
Шәфҡәтле бул, йәнем,
Шәфҡәтле бул.

Ә бит беҙгә – ҡанат ҡағырға ла
Тауҙан юғарыраҡ ынтылырға!
Сикһеҙ күктәй, йәнем, мөхәббәттә,
Был мәңгелек, тиеп
Онотолорға!..

## ИШЕК

Ишек асыҡ көйө ҡалды –
Хәҙер, ябам.
Тәҙрәнән үрелде ҡорған
Тышҡа табан.

Тәҙрәнән талпынды ҡорған
Һиңә табан.
Киттең.
Хәҙер ҡайҙан ғына
Толҡа табам?

Елпенде ел ыңғайына
Ебәк ҡорған.
Күңелемдең хәлен ҡайҙан
Белеп торған?

Елкенде йәнем офоҡҡа,
Һиңә табан.
Ишек асыҡ көйө ҡалған...
Хәҙер, ябам.



*Рәсүл СӘҒИТОВ*

# МАТУРЛЫҠ

Хикмәтле хикәйә

Ҡарт, етмеш етеһе менән барһа ла, нык ҡына әле. Үҫмер сағынан алтмышынаса ауыл хужалығында эшләүе, бөтә ғүмере баштараҡ хатта электрһыҙ, телефонһыҙ, юлһыҙ, дауаханаһыҙ, әле лә газһыҙ шарттарҙа үтеүе бабайҙы әллә ни бөгә алмаған. Ир ҡорона етә төшкәс, мөдир, бригадир, бүлексә идарасыһы кеүек урта етәксе вазифаларҙы тартҡан инде былай, уныһы бар, пенсияға ла үҙенә күрә түрә булып сыҡҡан, шулай ҙа быларҙы ла еңел йөк тиергә тел әллә ни әйләнмәй. Бында сәбәп уның затын ҡыуып, ҡаны буйынса һауһаҡлығынандыр ҙа, моғайын: ана, тештәре, һәр хәлдә алдағылары, күренеп торғанда-



ры – бөтәһе лә теүәл, үҙенекеләр. Ләкин ныҡлығын нәҫеленә генә лә бәйләү хаҡ түгелдер. Төп ғилләһе уның, ун етенсе йыл инде хаҡлы ялда булһа ла, мейескә арҡа терәп йылынып ҡына ятмауында, ә иртәнән кискә тиклем хеҙмәт менән булыуында һымаҡ.

Ауылына газ әле лә үтеп өлгөрмәгән һәм, утынының һәр ваҡыт мул булыуына ҡарағанда, алдағы биш йыллыҡта үтере көтөлмәй ҙә. Быны – ағас өсөн тейешле урында түләп, ҡағыҙ яҙҙырып, түмәрҙәрҙе ярҙырып алыуҙы, унан алда урмандан йығып, ботап, турап алып ҡайтыуҙы – ҙур бер эштәй, мәҫәләнән, бесән әҙерләүҙәй күрә, ифрат яуаплы ҡарай, бер ҡасан да утыны бөткәнсе ултырмай. Һәр хәлдә минең шаһит булғаным юҡ. Ярҙырып ала тиелһә лә, был эшкә яңыраҡ ҡына кеше ҡуша башланы ул, шуғаса үҙе туҡылдай торғайны. Әрҙәнәләре сак ҡына бушай башлаһа, тыныслығы ла бөҫкәрә, иплә кенә утынлыҡты тулыландырыу хәстәренә тотона.

Бер осрашҡанда балта һаплап йөрөй был.

Ике ҡуллап күрешкәс:

- Ниңә ыҙаланаһың, утының ярылған, өйөлгән, балта кәмендә тағы берәй йылһыҙ кәрәкмәҫ? – тим, үҙем һаптың бик тәфсирләп эшләнгәненә иғтибар итәм. Уны бысҡан, юнған, йышҡандан һуң, ана, боронғоса, быяла киҫәге менән ҡырып, шымартыу менән мәшғүл уҙаман.

- Донъя бит... – Йөҙөнә ихлас йылмайыу сығарып, шулай тине ул, оҙон һорауыма, ғәҙәтенсә, яуабын ҡыҫҡа тотто. – Әйҙә ултыр. Ни хәлдә йөрөйһөң?

- Бик арыу, шөкөр. Ә һин донъя көтәһең әле.

- Эйе. Көтмәй ҡайҙа бараһың инде...

- Эшеңде бүлдерҙем шикелле. Әйҙә-әйҙә дауам ит. – Шулай тим, сөнки ҡарттың эшен яратып, уға күңелен һалып башҡарыуы, йәшермәйем, һоҡландыра, быға артабан да шаһит булғы килә.

- Ярай һуң, һин хәл-әхүәлеңде һөйләй ултыр. Шымартып бөтөрәйем, һаплайым да, өйгә инербеҙ, әбей сәйен ҡуйғандыр ул, ҡапҡа эсенә ингәнеңде күргәндер. Ярты-йорто ташлап ҡалдырмайым инде. – Ҡарт йәнә һапҡа тотондо.

Эшенә тағы мөкиббән китте шикелле. Шулайҙыр, сөнки, ана, ауыҙын ослайтып, иплә кенә һыҙғыра ла башланы. Һыҙғырыуы ғына түгел икән был, ә көйләү. Үҙе көйләй, үҙе, һыңар күҙен ҡыҫып, туҡтауһыҙ һаптың төҙлөгөн тикшерә. Уныһы быяла менән ҡырғандан ғына әллә ни төҙәйеп тә, ҡыйшайып та китмәйҙер ҙә инде былай, әммә шулай итә. Һыҙғырмаһа ла насар сығырҙай һымаҡтыр, кәкре булырҙай. Ә ҡыйыш һаплы балта менән йырлап эшләүе лә мөмкин түгелдер...

- Булды шикелле. – Бер аҙҙан оҫта быяла киҫәген иплә кенә ситкә ҡуйҙы, бейәләйен систе. Көйләүҙән дә туҡтаны.

- Ул хәтлем үк шымартыу кәрәкме ни, утын ярыу ни – оҙаҡ эш түгел. Етмәһә, хәҙер магазин тулы осһоҙ бирсәткә, шуны кейһәң, бер ниндәй шырауҙан да ҡурҡмаҫҡа ла була, – тим, былайтып ентекле ышҡыуҙың утынға тип махсус сығарылғанға түгел, ә, бәлки, оҫталыҡ балтаһы өсөн генә хажәтлеккә ишаралайым. Йәнәһе, үҙе лә тупаҫ нәмәгә ярай ул, уның менән йылына ике-өс көн генә булышаһың, өҫтәүенә һабы, түмәргә яҙараҡ сабып ебәрһәң, шыҡылдап һына һалып та бара. Йәмһеҙ генә бер тимер киҫәгенә бындай нәфис һап килешеп тә етмәйҙер инде ул. Оҫталыҡ өсөн икән – икенсе мәсьәлә, бик оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән бындай ҡоралдарҙы беләм. Һаптарының ялтырауы хәҙер инде быяла менән шымартҡандан ғына түгел, ә һөнәрмәндең ҡулдары тотоуҙан да.

Үҙем шуларҙы уйлайым, үҙем ниңәлер ҡарттың китапса: «Донъяла бөтә нәмә лә матур булырға тейеш», – тигәнен көтәм. Ни өсөндөр нәк ошо һүҙҙәрҙе әйтер кеүек. Хәйер, алданым, ниңә икәнен мин беләм ул – үҙе күркәм булғанға, хеҙмәткә хөрмәт менән ҡарағанға. Әрҙәнәләре лә, әле лә бына күреп ултырам, бик гүзәл итеп һалынған, ярҡалар бер-береһенә тура килтереп, кәлләп кенә теҙелгән. Гүйә, был – утын өйөмө, ваҡытлыса нәмә түгел, ә быуаттарға тип иҫәп тотоп ҡалҡытылған ҡоролма. Бындай өйөмдәрҙең, ярҡалар кибә бара, ҡайһы бер әрпешерәктәрҙеке ише, ауып төшмәгәнен дә беләм. Кипһәләр ҙә бер-береһенән алыҫлашмайҙарҙыр инде ярҡалар, киреһенсә, яҡынлайҙарҙыр.

Әйтте уҙаман. Ләкин икенсене:

- Һаплы ятһын, әтеү юғала башлай ул.

Шымартыуҙың кәрәклеге-юклығына ҡағылып торманы, матурлыҡ мәсьәләһенә сүптәй ҙә ишара яһаманы.

Үҙе былай, абзый менән ризалашып баш ҡағам, хаҡты белдерҙе инде: һапһыҙ балта эйәһеҙ мал кеүектер, юғалырға ғына торалыр. Ватылып ултырған автомобиль һымаҡ. Ғаиләһеҙ әҙәм ише.

Һап әҙер. Балтаға ҡуйылды, артыҡ осо бысып төшөрөлдө, шынаһы ҡағылды. Ҡорал эргәләге өҫтәлгә һалынды – тыҡ итте. Йылмайып барып ятҡандай тойолдосо... һәм, бынамын тигән һап ҡуйып ебәргәс, әллә ни тупаҫ та күренмәгәндәй әле ул. Шулай шул – күркәм генә әйбер икән дә.

Был донъяла эйәле булыу ҙа – матурлыҡтыр ул.



# ДАҺИ

Хикмәтле хикәйә

Юлаусы ҡулын, үткенсе автомобилдә йыраҡтан уҡ күреп, күтәрҙе. Хәйер, «йыраҡтан» тиеү бында, географик шарттарҙы иҫәпкә алғанда, тура ла килеп етмәйҙер әле, сөнки был – тау-таш араһы, урманлы төбәк һәм машиналар хәрәкәтен алыҫтан, әлеге һүҙҙең тулы мәғәнәһендәге оҙон аранан, күҙәтеү мөмкин түгел. Улар анауы ялан-ғас морон аръяғынан ҡапыл пәйҙә булалар ҙа һәм тиҙ генә килеп тә еткәләр, гүйә, шунда йәшенеп ятып, үҙҙәренә кәрәкле ваҡытта ғына юлға төшәләр. Шулайын шулай, әммә тап бына ошо кеше, был һығымтаға аҙағырак киленер, автомобилде, ул боролоштан сыҡмаҫ борон уҡ, «күрмәнеме» икән? Күңел күҙе менән. Ай-һай, шулайҙыр...

Һәм күреп кенә лә ҡалманы шикелле, ә ... күренде лә. Эйе, үҙен дә күрһәтте. Йәнәһе – мин бына бындамын, ә һин, шофер иптәш, морондо урағанда юғалтҡан тиҙлегеңде яңынан ҡайтарырға бик ҡабаланма, аяғыңды акселераторға әллә ни батырма, киреһенсә, күтәрә төш, яйла, уңға тарт: мотлаҡ туҡтап, ватандашыңды ултыртып алырға тейешһең. Тейешһең, тейешһең, сөнки миңә шулай кәрәк!

Был, «күренеү», нисек тормошҡа ашты, тигән һорау тыуҙымы? Әллә инде... Баҫып торошо, ҡарағыҙ әле, нисектер айырымыраҡ, үҙенсәлеклерәк түгелме һуң бының?.. Ҡараш шулайлыҡты аңғарғандай, әммә юлаусының, алтмышҡа яҡынлағандыр, моғайын, ағайҙың, бында бүтән «тауыш биреүселәрҙән» ни яғы менән айырылғанын тәғәйен генә әләктерә алмай. Хикмәт, бәлки, кейемендәлер? Улай тиергә лә мөмкиндер инде, ризабыҙ: йәйге эҫе көн булыуына, төш ауыуға уның тағы ла ҡыҙыуланыры асыҡ көтөлөүгә ҡарамаҫтан, өҫтөнә ҡарағусҡыл йәшел тоҫтағе, ярайһы ҡалын штормовка кейгән, башында иҫкерәк, ләкин йәме китеп өлгөрмәгән һорғолт эшләпә, аяғында – шулай уҡ был миҙгелгә тура килеп етмәгән, бейек табанлы ботинкалар. Салбары ҡыҫҡараҡ, балаҡтары ботинкаларына етмәйерәк туҡтаған.

«Күренде, үҙен күрһәтте» тиһәк тә битен, киреһенсә, төрлө яклап ҡымтыған кеүек әле ул. Шулай шул, ана: самаһыҙ ҙур, әйтерһең дә, якшыраҡ күрер өсөн генә түгел, ә шуға өҫтәп, себен-серәкәйҙән, ел-ямғырҙан, буран-туҙандан һаҡлау өсөн дә хеҙмәт иткән күҙлеге ҡуңыр ҡакса йөҙөн тотошлай тиерлек ҡаплай яҙған. Эшләпәһенең ҡырҙары киң генә икәнен, эйәһенең маңлайын ҡаштарына тиклем йәшергәнен дә өҫтәмәнек шикелле, өҫтәйек. Етмәһә, әллә ни ҡуйы булмаһа ла, ерәнерәк мыйығы бар, «майҙандың» күләмен ул да ярайһы кәметә. Сикәләре шыма былай, ҡырылған, ә бына ослайып барып бөткән эйәгенә бер услам һаҡал еленгән. Айырымлыҡ әллә ошонда – йөҙөнөң йомоғораҡ булыуындамы?..

Нисек кенә булмаһын, мораҙына иреште – иғтибарҙы шундуҡ йәлеп итте был: туктамай үтергә барыбер ҙә ирек бирмәне. Әллә, күҙлек аша булһа ла, туп-тура тишеп ҡарауы туктатырға мәжбүр ҡылды, әллә ҡулын ғәҙәттәгенән башкаса, хатта йәпһеҙерәк тә, юғарыға һоноп тороуы буйһондорҙо. Әллә ... тфү-тфү, берәй ырымлы әҙәмме? Хәйерлегә юрайыҡ инде...

Ә-ә-ә, был бит ҡулын хас үткән быуатта илдә һәр балаға тиклем якшы белгән «донъя пролетариаты башлығы»са күтәргән, тап һәйкәлдәгесә – уң ҡулын, усын текә баҫтырып! Ғилләбына нимәлә икән! «Һәйкәлдәгесә» тиеү нык дөрөҫтөр, сөнки уны, башкалар һымаҡ болғамай ул. Болғамай, ләкин ҡаты тота, был да әллә ҡайҙан һиҙелеп тора. Ҡоро кәүҙәле, тарамыш кешеләр шулай бит – көсәнмәйенсә генә лә ҡатыңҡылар.

Янына барып туктау менән, ғәҙәттәге юлаусылар ише, ҡабаланып, алғы ишеккә, йүнәлеште, хаҡ-маҡты белешергә атлыкманы был. Атланы, әммә ашыҡманы. Һорашырға ла түгел икән. Ашыкмаһа ла тиҙ килеп етте. Туп-тура һуктырҙы, гүйә тартылып ҡуйылған еп буйлап килде. Ҡырын баҫып, көс тә, ваҡыт та әрәм итмәне. Һы, даһи ҙа (ун етенсе йыл инкилабының төп етәксеһе, иҫләйбеҙ, шулай тип тә ололанды бит ), бик теремек булған, тиҙәр ҙә. Буйға хайран ыҡсымлығы йылдам хәрәкәт итеүенә һис ҡамасауламаған, хатта ярҙам да иткәндер әле. Машина хужаһының уйланғаны ла бар: шул төпөш кенә әҙәм тотош донъяны үҙенсә үҙгәртергә һелтәнгән дә баһа! Һәм уның бер өлөшөн, ваҡытлыса булһа ла, үҙгәртеп ҡорған да. Ниндәй көс ултырған эсендә, күпме маҡсатка өлгәшергә теләү!

«Даһи», әйтелеүенсә, атланы, ләкин башта арткы ишеккә төбәп хәрәкәт ҡылды. Уныһын бер тартыуҙа асты ла, ҙур ғына сумкаһын ултырғыска ултыртырға самаланы. Автомобиль хужаһы, быны аңғарып, «бысратаһың бит, ана, иҙәнгә ҡуй, бөгөн иртәнсәк кенә, әллә күпме аҡса түләп, йыуҙыртып сыҡтым» тигәнерәк мәғәнәлә өндәшергә укталғайны, өлгөрмәне, теге йөгөн йәтеш кенә баштүбән әйләндерҙе лә һалды. Шуны ла әйтәйек: хужаның киҫәтергә укталғанын ул, уға ҡарамайынса ғына, ниндәйҙер ҡабырға күҙҙәре менән күрҙе. Һәр хәлдә укталыусыға шулай тойолдо.

Әле лә, бына, башын уның яғына күтәреп тә ҡараманы, ә үҙенә төбәләр, хәҙер инде киҫәтеүҙең түгел, ә һорауҙың Хужа ауыҙында әҙерләнгән, юк, мейеһендә ярала башлаған мәлендә үк эләктерҙе:

- Борсолмағыҙ, түгелә торған нәмә юк унда.

Ғәжәп: ысынлап та, сумкала, бәлки, ниндәйҙер шыйыҡса булып, һауыт баштүбән әй-



ләндерелгәс, һаркып сығыуынан хәүефләнеү арҡаһында тыуып килә ине һорау.

Шул арала юлаусы алғы ишекте аса һалып, күрше ултырғысҡа урынлашты ла инде. Ишекте ҡып итеп кенә ябып ҡуйҙы. Быны тиҙ, бер тынала атҡарҙы, әйтерһең дә ғүмере буйы тик ошоноң менән генә шөғөлләнеп, был хәрәкәтте башҡарыуҙа бөйөк бер камиллыҡҡа күтәрелгән.

Артабан хужаға ҡарап:

- Һаумыһығыҙ! – тине.

- Һаубыҙ әле.

Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә үҙҙәренән һыра еҫе аңҡып тороуға, тимәк, быны ӧсөн аҡса табыуҙарына ҡарамаҫтан, бушлай йөрөргә ынтылыусы мут әҙәмдәр ише, күрешергә ҡул һонманы. Һаулыҡ һорашты ла, яуап сәләмен дә көтөп тормайынса, тәҙрә аша алға төбәлде. Хәүефһеҙлек ҡайышын да таҡҡан әле ул. Ҡасан өлгөрҙө һуң? Ҡайыш эҙләп башта уң яҡ яурыны яғында һәрмәнеп, тартып сығарғас, һул яғындағы билдән аҫтараҡ осон ҡаптырырға белмәй ыҙаланманы ла. Бөтә нәмәне лә бер ынтылыуҙа башҡарғанға оҡшаған был. Үткенсе автомобилдәр ҙә, моғайын, гел генә ҡулын һәйкәлдеке ише бер күтәреүендә үк туҡтайҙыр. Әллә нәк ҡайһыһының туҡтарын алдан беләме икән? Мәҫәлән, машинаның, хужаһының тышҡы ҡиәфәттәренә ҡарап. Йәки – тәгәрмәстәрҙең тәгәрләүенән. Уҫаллыҡ-йыуашлыҡ, тәкәбберлек-мәрхәмәтлелек, ышаныслылыҡикеләнеү замана арбаһының килә ятыуынан үк беленеп торалыр, быны ӧсөн тәжрибәле күҙ генә талап ителәләр.

- Ҡайҙа бараһығыҙ? – Ҡыҙыҡ килеп сыҡты: һорауҙы Даһи, йәғни юлаусы түгел, ә Хужа бирҙе.

Даһи шунда уҡ, сатнатып күрше район үҙәген атаны. Артабан, юлдан күҙен алмайынса ғына:

- Һеҙ ҙә шундалыр бит? – тип һораны. Юҡ, һораманы, раҫланы.

- Эйе...

Өндәшмәй бара бирҙеләр.

- Ә ... минең тап шунда юл тотҡанды ... ҡайҙан белдегеҙ? – Сираттағы үрҙе менеп төшә башлағанда Хужа юлдашының раҫлауына кире әйләнеп ҡайтты.

- Шунда инде, башҡа ҡайҙа булһын? – Даһи ҡарашын юлдан был юлы ла алманы, әйтерһең дә руль хужала түгел, ә уның ҡулында һәм ул эшенән әҙгә генә лә ситләшмәҫкә бурыслы.

- Ну-у ... ауылдар унһыҙ ҙа бөтмәгән бит. Тотош ике район.

- Һеҙҙең ишеләр тик шунда ғына бара ул.

- Ә кемдәр улар – минең кеүектәр?

- Ялға барыусылар.

«Ысын даһи һымаҡ шул был, ана бит баһалай һалып та өлгөргән, – тип уйланы Хужа, үткән быуатта китаптарҙа уның шулай һүрәтләнгәнен иҫенә төшөрөп. – Мыйыҡ-һаҡалы ла шул даһиҙыҡы ише бит бының, нәк шуныҡы. Композицияны күҙлек кенә «боҙа» икән. Хәйер, эшләпә аҫтында ярайһы ҡуйы сәстәр ҙә барҙай тойола, ҡаҡ башлы түгелдер».

Башҡаса өндәшмәнеләр.

Юлдашы күрше район үҙәгендә төшөп ҡалды. Артҡы ишектең тотҡаһын тағы тиҙ генә тапты, тартты, эскә үрелеп йөҙтүбән ҡапланған йөгөн аҫтан оҫта ғына эләктерҙе, уныһы ла сәғәт ярым элек нисек әйләндереп һалынғайны, үпкәләгән бала шикелле, ҡыбырламай ятты бит әле шунда, ҡырҡа боролоштарҙа, ҡапыл йәйләгән саҡтарҙа ла, алға шыуып, гөрҫ итеп иҙәнгә төшөп ыҙалатманы. Йөҙтүбән ятһа ла, эсенән бер нәмә лә, ысынлап та, һарҡмаған да. Әйләндереп бауынан тотто, маһир ғына ҡыланып, тышҡа сығарҙы, ҡайҙандыр етеҙ генә йөҙ һумлыҡты сығарып, үҙе ултырып килгән урынға һалды.

Хужа йәнә бер ни ҙә әйтеп өлгөрмәне, Даһи тағы алдараҡ өлгөрҙө:

- Ә былай шул да булмаҫ ине.

«Әҙһенмәгеҙ» тиеүе инде.

Ишек бер этәреүҙә ябылды, абзый ғәйеп булды.

Автомобиль хужаһы, барыр еренә етмәһә лә, урынынан тиҙ ҡуҙғалып китмәне – аптырап ҡалғайны. Ғәйеп булыусы киләсәктән килгән бәндәләй, юҡ, хатта роботтай тойолдо. Бөтә нәмәне күрә, анализлай, иң дөрөҫ юлды, ысулды тәҡдим итә.

Юлдаштары менән «әҙәмсә» һөйләшеп йөрөргә күнеккән кешегә ҡыйыныраҡ ине.

Ни теләгәненде һүҙһеҙ аңлап торһалар ҙа шәп түгел икән.

# МОДЕРНИЗАЦИЯ ҺӘМ БАШҠОРТ ҠАЛА МӘҘӘНИӘТЕ

Хәҙерге сит ил һәм Рәсәй фәнендә йәмғиәттәге социаль-мәҙәни үҙгәрештәргә ҡағылған ярайһы уҡ уңышлы эшләнгән концепция бар. Ул традицион йәмғиәттең әкренләп либераль йәмғиәткә күсеүе, йәғни уның аграр, ауыл хужалығы, патриархаль йәмғиәттән заманса, индустриаль йәки "постиндустриаль", ҡала, демократик, индивидуалистик йәмғиәткә әүерелеүе тураһындағы тезиска нигеҙләнә. Көнбайыш йәмғиәте тарихында ошо процесс нисек барған һуң? Икенсе мең йыллыҡ уртаһында көнбайышта әлегәсә күрелмәгән үҙгәрештәр башлана, һәм ундағы ауыл тормошо әкренләп емерелә, юҡҡа сыға башлай. XVI—XVII быуаттарҙа Көнбайыш Европала халыҡ хеҙмәте феодаль хужалыҡ менән тығыҙ бәйләнеште өҙә. Географик асыштар һәм техник уйлап табыуҙар һөҙөмтәһендә уның эшмәкәрлеге өсөн киңлек асыла, һәм ул феодаль, игенселек капиталы менән ярышҡа ингән өр-яңы ҡала йәки сауҙа-сәнәғәт капиталы менән яңы майҙанда көсөргәнешле эш итә башлай. Ҡала "буржуаз индустриализм"ы Европаның көнбайышында йылдам үҫә. XIX быуатта ошо үҫеш һөҙөмтәһендә көнбайыш Европа аграр йәмғиәттәре, патриархаль һәм ауыл тормошо өҫтөнлөк иткән Рәсәйҙе артта ҡалдырып, әкренләп сәнәғәт, ҡала йәмғиәтенә әүерелә башлай. Тап ошо күренеш 1917 йылғы социалистик революцияға күп яҡлап сәбәпсе була ла инде. Совет осорондағы иҡтисади үҙгәрештәр тиҙләтелгән модернизацияға матди һәм социаль нигеҙ һала, бер үк ваҡытта Рәсәйҙә күптән өлгөрөп еткән башҡа байтаҡ процестарҙы ла ҡуҙғыта. Ауыл йәмғиәтен ҡала йәмғиәтенә әүерелдереү, йәғни урбанизация шулар иҫәбенә инә. Тап ул совет йәмғиәтен яңыртыуҙың төп звеноларының береһе була. Урбанизацияның совет осорондағы моделенең үҙенсәлеге нимәгә ҡорола һуң?

Ҡала менән ауыл, бер-береһенә ике типтағы биләмә булараҡ түгел, ә социаль тормошто ойоштороуҙың ике принцибы булараҡ ҡаршы тора. Кешенең "ауыл" йәмғиәтенән "ҡала"нығына күсеүе ошо йәмғиәттең сифат йәһәтенән яңы баҫҡысҡа күтәрелеүен күҙаллай. Ҡаланың ошо һыҙаттары ундағы хәҙерге мөхиттең физик үҙенсәлектәре — киңлектең ҡатмарлы структураһы, матди объекттар күплеге, уларҙың төрлөлөгө һ.б. менән билдәләнә. Был үҙенсәлектәре менән ҡала, ауылдан айырмалы, кеше йәшәйешенә, үҙ циклауҙарен билдәләй, уға үҙ талаптарын ҡуя, шәхси һәм коллектив тормошто ойоштороу рәүешен үҙгәртергә мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә физик киңлек кенә түгел, социаль мөхит тә ҡатмарлаша, ә был йәмғиәттә кешеләр тәртибен "ябай" көйләүселәрҙең баһаһын төшөрә. Ҡалалағы һәр кешегә, ауылдағыларҙан айырмалы, ҡылыҡ-фиғелдәрҙе, карьераны, тәртип-ғәмәлдәрҙе һайлау йәһәтенән киң мөмкинлек асыла. Шул уҡ ваҡытта ҡала мөхитендәге тормош аноним. Ауылдағы кеүек социаль контролде, һәр кемдең тәртибен күҙәтеүҙе бында тормошҡа ашырып булмай.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең, заманса ҡала урта быуат ҡалдыҡтары менән яраҡлаша алмай, үҙенең асылы буйынса ул һәр төрлө патриархаль ҡоролоштоң дошманы, шуға ла ул ҡала модернизацияға этәреүсе яңынан-яңы күренештәрҙе даими тыуҙыра һәм тәрбиәләй тип иҫәпләүенә ҡарамаҫтан, беҙҙеңсә, совет осоро тәжрибәһе яңы йәмғиәткә күсеүҙең ҡотолғоһоҙ түгеллеген асыҡ сағылдыра — һәр йәмғиәт ҡала йәмғиәте лә, шул уҡ ваҡытта традицион йәмғиәт тә була ала (хәҙерге Ҡытай, Япония).

Мәҫәлән, урбанизацияның совет моделе донъяға индивидуалистик ҡарашлы кеше тәрбиәләй алманы, ә Homo soveticus — заман һәм традицион һыҙаттарға эйә булған аралаш шәхес төрөн барлыҡҡа килтерҙе.

Хәҙерге ҡала — баҙар, аҡса мөнәсәбәттәре мөхите, уларҙың еңеү майҙаны. Ҡаланың кешегә йоғонтоһоноң төп көсө лә тап ошоға ҡоролған. Әүәл-әүәлдән йәшәп килгән баҙар, аҡса тарихтың "ҡала" дәүерендә бөтә социаль тормоштоң кеүәтле көйләүсеһенә әүерелә. Совет осорондағы ҡыҙыу урбанизация нимәләр менән генә оҙатылып килмәне, баҙар мөнәсәбәттәрен үҫтереүгә килтермәне. Сә-

**Совет осорондағы яңырыу башҡорт йәмғиәтен урбанизациялау үҙенсәлектәрен дә билдәләне. СССР сиктәрендә башҡорт халҡы бер нисә урбанизация тулҡынын үткәрҙе. Был процесс ауыр һәм ҡаршылыҡлы барҙы. Мәҫәлән, ул этник аңды актуалләштереүгә йәшерен ихтыяж тыуҙырҙы. Аралаш мәҙәниәткә эйә булған рус телле башҡорттар барлыҡҡа килеүгә нигеҙ һалды. Әлегә тиклем бер бөтөндә тәшкил иткән башҡорт халҡы әкренләп өлөштәргә бүленә башланы.**

нәғәт һәм ауыл хужалығы кеүек үк ҡала ла баҙар көйләүе даирәһенән сығарылды.

Икенсе төрлө әйткәндә, СССР-ҙа “дәүләт” йәмғиәтте атомлаштырыуҙы туҡтатыуға өлгәште, ә иктисади яңырыу, илде аграр дәүләттән индустриалгә әүерелдереп, уға заманса технологик цивилизацияның төп элементтарын бирҙе.

Совет осорондағы яңырыу башҡорт йәмғиәтен урбанизациялау үҙенсәлектәрен дә билдәләне. СССР сиктәрендә башҡорт халҡы бер нисә урбанизация тулҡынын үткәрҙе. Был процесс ауыр һәм ҡаршылыҡлы барҙы. Мәҫәлән, ул этник аңды актуалләштереүгә йәшерен ихтыяж тыуҙырҙы. Аралаш мәҙәниәткә эйә булған рус телле башҡорттар барлыҡҡа килеүгә нигеҙ һалды. Әлегә тиклем бер бөтөндә тәшкил иткән башҡорт халҡы әкренләп өлөштәргә бүленә башланы. Әлбиттә, был — объектив процесс, этностың урбанизацияһы һөҙөмтәһе. Структураһы йәһәтенән ул ҡатмарлаша төштө. 1970 йылға урбанизация һәм белем биреү революцияһы “хәҙерге заманға” күсеүен тамамланы. Рәсми һыҙаттары буйынса башҡорт йәмғиәте традицион булып ҡала, бер үк ваҡытта ҡала йәмғиәтенә лә әүерелә. Әммә “ауылса” аңдың һәм ҡеүәтле боронғо мәҙәниәт ҡатламының һаҡланып ҡалыуы хистойғоларға бай интеллигенция менән берлектә этниклыҡ өсөн ҙур хәүеф тыуҙырҙы. 1985 йылда башланған “үҙгәртеп ҡороу” быға этәргес булды. БАССР-ҙа ул “милли үҙбилдәләнеш” байрағы һәм “тамырҙарға әйләнеп ҡайтыу тураһында”ғы миф аҫтында үтте. Урбанизация процестарының тамамланмауы хәҙерге башҡорт йәмғиәтенең социаль-мәҙәни үҙенсәлектәрен билдәләй. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡала башҡорттары 50 процентҡа етеүгә ҡарамаҫтан, бөтә билдәләре буйынса башҡорт йәмғиәте хатта бөгөн дә аграр, ауыл, йәғни традицион йәмғиәт булып ҡала. Был, иң элек, башҡорт йәмғиәтендә XX быуатта модернизацияның төплө булмауына, этносоциаль ролдәрҙең структура йәһәтенән бик аҙ үҙгәрештәр кисереүенә бәйле.

Мәҫәлән, башҡорттарҙан айырмалы, татар халҡының ҙур өлөшө XX быуат башында уҡ ҡала, диаспоралы цивилизацияға күсте. Был, үҙ сиратында, ғәҙәти татар йәмғиәте структураһының үҙгәреүенә, киң милли интеллигенция ҡатламының барлыҡҡа килеүенә сәбәпсе булды. Татар этносы эсендә ике “халыҡ” йәшәй кеүек. Береһе — аграр, тупраҡ һөйөүсән (совет осоронан һуң М. Шәймиев уның символик шәхесе булды), икенсеһе — киҫкен яңырыу һөҙөмтәһендә тыуған ҡатмарлы социаль-мәҙәни субъект. Быуат башында татар йәмғиәтендәге “йәҙитселек” (“жәдитселек”) һәм “ҡәҙимселек” (“кадимселек”) кеүек модернистик көрәнештәр ҙә ошоға бәйле. Татарҙарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт йәмғиәте үҙ мәҙәниәтен һаҡлау йәһәтенән һәр саҡ юғары кимәлдә булды. Мәҫәлән, башҡорттарҙың революцияға тиклемге оҡшашлығы, берҙәмлеге урындағы ябыҡ йәмғиәт мөхите тарафынан һаҡланды. Империя иерархияһы эсендә был шулай уҡ ҡатлам (хәрби) статусы һәм Ислам менән нығытылды.

1990 йылдарҙа сираттағы урбанизация тулҡыны һөҙөмтәләре – хәҙерге башҡорт йәмғиәтенә хас икенсе үҙенсәлек. Кисәге ауыл халҡының ҙур өлөшө теге йәки был сәбәптәр арҡаһында “ҡалаларға бикләнә”, йәғни үҙҙәре өсөн ят һәм таныш булмаған мөхиткә эләкте. Был йәмғиәт өсөн хәүефле күренеш, сөнки тикшеренеүселәр билдәләүенсә, махсус психологик үҙенсәлектәргә эйә булыусылар, ҡатмарлы һәм хәүефле урбанизация донъяһына эләккәс, үҙҙәрен сәйер тота. Был кешеләр үҙҙәренең мәҙәни мөхитенә ят күренештәргә, бөтөнләй икенсе тормош шарттарына эшмәкәрлеген әүҙемләштереү менән яуап ҡайтара. Уларға ғәҙәти ҡала кешеһендә күҙәтелмәгән мифологик аң тибы хас (был үҙенсәлеккә шулай уҡ икенсе быуын ҡала башҡорттары ла эйә). Бындай кешеләр тормошта башлыса ҡыҙыҡһыныуҙарға түгел, ә ҡиммәттәргә таянып эш итә.

**Татарҙарҙан айырмалы рәүештә, башҡорт йәмғиәте үҙ мәҙәниәтен һаҡлау йәһәтенән һәр саҡ юғары кимәлдә булды.**

Тимәк, башҡорт йәмғиәтендә урбанизацияның тамамланмауын танырға кәрәк. Совет осоро һәм унан һуңғы урбанизация тиҫтәләрсә мең башҡортто ауылдан ҡалаға күсерҙе, уларҙың көндәлек социаль аралашыу шарттарын үҙгәртте, әммә шул уҡ ваҡытта ҡалала башҡорт мәҙәниәте барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итмәне. Был процесс (яңы субмәҙәниәт-

тәр барлыҡҡа килеү) башҡорт йәмғиәтендә үҫеш ала ғына башланы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул традицион халыҡ мәҙәниәтен ҡыйратыу иҫәбенә бара. Бынан тыш, тикшеренеүселәр билдәләүенсә, ҡала башҡорттары араһында юғары квалификациялы гуманитар интеллигенция ҡатламы ҙур түгел, уның ҡарауы, түбән квалификациялы эшселәр бихисап. Ҡалалағы тотош социаль өлкәләр, иктисад тармаҡтары (сәнәғәт етештереү, эшҡыуарлыҡ, сауҙа һ.б.) әлегә тиклем башҡорттар тарафынан үҙләштерелмәй ҡала тиерлек.

Дөйөм алғанда, хәҙерге башҡорт йәмғиәте асылда иһә ике кимәлле (шартлы) структураға эйә. Уны, иң элек, йәмғиәттең түбәнге ҡатындағы кешеләр — ауыл, йәғни традицион йәмғиәт вәкилдәре һәм юғары ҡаттағы бәләкәй генә ҡатлам — милли һәм ижади интеллигенция, номенклатура, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәре, ҡала һәм ауыл интеллигенцияһы тәшкил итә. Бындай күренеш йәмғиәт социумын тоторокһоҙландырыуға килтерә. Ул шулай уҡ үҙенсәлекле ҡала мәҙәниәтенә эйә булған, уны якларға һәм үҫтерергә һәләтле урта ҡала ҡатламының (Көнбайышта "урта синыф"ты тәшкил итеүселәр) булмауын билдәләй. Башҡорттарҙың хәҙерге ҡала йәмғиәте — ул "ҡалаһыҙ ҡалалылар" йәмғиәте, йәғни традицион йәмғиәт кешеһенең үҙенә сит-ят ҡала мөхитендә көн итеүе.

Был үҙенсәлек башҡорттарға ғына түгел, ә тотош Рәсәй йәмғиәтенә хас. Көнбайыш Европала ваҡ буржуазия юғары синыф менән халыҡ араһында аралашсы бурысын үтәгәнгә күрә, бар халыҡ ҡатламдарын милли мәҙәниәт йәһәтенән бер бөтөнгә туплаған. Ундағы ҡоролош ваҡ буржуазияның барлыҡҡа килеүенә ерлек тыуҙырһа, Рәсәйҙә ул осорҙа был күренеш шытымдары ла күҙәтелмәй. Сауҙагәрҙәр һәм сәнәғәтселәр Рәсәйҙә булған, әлбиттә. Ләкин сығышы, йәмғиәттә һәм дәүләттә тотҡан урыны, йоғонтоһо, үҙаллылығы буйынса улар Көнбайыш Европалағы буржуанан бик йыраҡ торған. Икенсе төрлө әйткәндә, хәҙерге башҡорт йәмғиәтендә "урталыҡтағы" мещандар мәҙәниәте юҡ. Бының сәбәптәре төрлө.

Тарихтан билдәле булыуынса, традицион йәмғиәттә, ҡағиҙә буларак, баҙар алмашыуы түгел, ә ҡайтанан бүлеү мөнәсәбәттәре өҫтөнлөк итә. Үҙ сиратында баҙар иктисады элементтары ҡәтғи көйләнә. Ҡайтанан бүлеү системаһы традиция, ғөрөф-ғәҙәттәр тарафынан яйға һалына, ә баҙар хаҡтары — юҡ. Традицион йәмғиәттә иктисади файҙа алыуға ынтылыу йыш ҡына әхлаҡи йәһәттән тәнкитләнә, эскерһеҙ, ихлас ярҙамға ҡаршы ҡуйыла. Унда тигеҙләү идеалы асыҡ сағыла. Икенсе төрлө әйткәндә, һәр бер традицион мәҙәниәт баҙар ҡиммәттәрен ҡәтғи тыя. Хатта бөгөн, либераль реформаларҙан һуң 20 йыл үткәс тә, "урталыктағы" буржуаз мәҙәниәт һөнәрҙәре — адвокаттар, сауҙа һәм хеҙмәт күрһәтеү өлкәһе хеҙмәткәрҙәре, юристар, бизнесмендарҙы йәмғиәт әллә ни үҙһенмәй (мәҫәлән, башҡорт халҡында, шул иҫәптән башҡорт интеллигенцияһы араһында "торгаш" тигән әрләшеү һүҙе таралған).

Бынан тыш, башҡорт йәмғиәтенең социаль һәм социаль-мәҙәни һыҙаттары, ҡоролош үҙенсәлеге 1990 йылдар башында тәүге мөмкинлектәрҙең сикле булыуын сағылдырҙы. "Баҙарға күсеү" һөҙөмтәһендә башҡорт халҡының күпселеге эш хаҡы түбән булған абруйһыҙ эш урындарын тулыландырҙы, социаль тигеҙһеҙлек тыуҙы. Киләсәктә бындай хәлде яйға һалыу бик ауырға төшәсәк.

**Тулы ҡиммәтле урта ҡала ҡатламдарын булдырыуҙы күҙ уңында тотҡан ҡала революцияһын аҙағына еткереү заман талабына әүерелә. Ошо ҡатламдарһыҙ, "өсөнсө ҡатлам"һыҙ күрсөктән сығыу, артабанғы үҫеш, башҡорт йәмғиәтенә яңы һулыш биреү мөмкин түгелдер, күрәһең.**

Шулай итеп, урбанизацияның совет моделен үҫтереү һөҙөмтәһендә башҡорт йәмғиәтендә яңы ҡала йәмғиәтенең тышҡы ҡатламы, уның материаль формаһы ғына барлыҡҡа килде. Асылда иһә унда әлегә ауыл һыҙаттары бихисап. Башҡорт йәмғиәтендә урта ҡала ҡатламдары яңы ғына шытым бирә. Һөҙөмтәлә "ҡала" йәмғиәте тормошонда иҫке формаларға ҡаршылыҡ арттҡандан-арта бара. Күрәһең, башҡорт йәмғиәте һуңғы сиккә килеп еткәндер һәм унда әүәлге "аралаш" хәлдә һаҡлап ҡалыу мөмкин түгелдер. Совет осоронан һуңғы дәүерҙә был айырыуса нык һиҙелә. Тулы ҡиммәтле урта ҡала ҡатламдарын булдырыуҙы күҙ уңында тотҡан ҡала революцияһын аҙағына еткереү заман талабына әүерелә. Ошо ҡатламдарһыҙ, "өсөнсө ҡатлам"һыҙ күрсөктән сығыу, артабанғы үҫеш, башҡорт йәмғиәтенә яңы һулыш биреү мөмкин түгелдер, күрәһең. Шул уҡ ваҡытта был традицион мәҙәниәт башҡорттарҙың аңында быуаттар буйы формалашҡан ҡиммәттәр менән бәйләнеште ҡырҡа өҙөүҙе аңлатмай. Урбанизация кисергән күп кенә илдәр тәжрибәһе күрһәтеүенсә, һәр йәмғиәттә ғөрөф-ғәҙәттәр менән заман талаптарын, яңылыҡтар менән мәҙәниәтте яраштырырға мөмкин.

*Азамат БУРАНШИН,*
*тарих фәндәре кандидаты, БР ФА-ның*
*Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының*
*этнополитология бүлеге мөдире.*
*buranchin@yandex.ru*

# НИ ХӘЛДӘ ҺИН, ЙӘШ ҒАИЛӘ?

ӨЙЛӘНЕШЕҮ – НӘҪЕЛ ИШӘЙТЕҮ, БАЛАЛАР ҮҪТЕРЕҮҘЕҢ ИҢ ГҮЗӘЛ ЮЛЫ, АТА-ӘСӘЛЕК ХИСЕНЕҢ ҺӘМ ТОЙҒОҺОНОҢ БАРЫ ТИК ҒАИЛӘЛӘ ГЕНӘ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕН КҮРҺӘТЕҮСЕ, ЯУАПЛЫЛЫҠ, РӘХИМЛЕК-ШӘФҠӘТЛЕЛЕК, МИҺЫРБАНЛЫҠ-МӘРХӘМӘТЛЕЛЕК КЕҮЕК ЫҢҒАЙ СИФАТТАР ТӘРБИӘЛӘҮҘӘГЕ ЕТДИ АҘЫМ. ШУЛАЙ ҘА НИНДӘЙ ГЕНӘ ҒАИЛӘЛӘРҘЕ КҮРЕРГӘ ТУРА КИЛМӘЙ БӨГӨН. ҺОҠЛАНЫРЛЫҠ, БАШҠАЛАРҒА ӨЛГӨ БУЛЫРЛЫҠТАРЫ ҺИРӘГӘЙӘ ТӨШКӘН КЕҮЕК. СӘБӘБЕ НИҘӘ ҺУҢ? ЭЙЕ, КҮПТӘРЕБЕҘ ҮҘ АЛЛЫ ТОРМОШ КӨТӨРГӘ ӘҘЕР БУЛМАЙ СЫҒА. ҒАИЛӘ – УЛ ДУҪЛАШҠАН САҠТАҒЫ КЕҮЕК БЕРЕҢ ӘЙТКӘН ФЕКЕРГӘ ИКЕНСЕҢ ҠУШ ҠУЛЛАП РИЗА БУЛЫУ, МАТУР ИТЕП КЕЙЕНЕП, ГЕЛ ҺӨЙГӘНЕҢ КҮҘЕНӘ БИҘӘНЕП-ТӨҘӘНГӘН КИЛЕШ КЕНӘ КҮРЕНЕҮ ТҮГЕЛ ШУЛ. БЕРГӘ ДОНЪЯ КӨТӘ БАШЛАҒАС, ИКЕНСЕ ЯРТЫҢДЫ ТЫҢЛАЙ БЕЛЕРГӘ ЛӘ, ЯҠШЫ ТОРМОШ ХАҠЫНА НИМӘНЕЛЕР ҠОРБАН ИТЕРГӘ ЛӘ ТУРА КИЛӘ. ИҢ МӨҺИМЕ – УНЫ НИСЕК БАР, ШУЛАЙ ҠАБУЛ ИТЕҮ.

БӨГӨН, ЯҢЫ ҒАИЛӘ ҠОРОП БЕРГӘ ЙӘШӘЙ БАШЛАҒАН ЙӘШТӘР ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ ҠУЙЫРТҠАНДА, УЛАРҘЫ БЕР НИСӘ ТӨРКӨМГӘ БҮЛЕРГӘ БУЛА: БАЙҘАР, УРТА ХӘЛЛЕЛӘР, ЭСЕРГӘ ЯРАТҠАНДАР ҺӘМ ЯҢҒЫҘ ӘСӘЛӘР. УЛАРҘЫҢ ҺӘР БЕРЕҺЕНӘ ҠЫҪҠАСА ҒЫНА ҠЫЛЫҠҺЫРЛАМА БИРӘЙЕК.



## БАЙҘАР

Уларҙың киләсәген алдан уҡ ҡалын кеҫәле ата-әсәһе хәстәрләп ҡуя. Юғары уҡыу йортона уҡырға индереү, уны тамамлағас, аҡсалы эш урыны табыу, хәлле ғаиләнән килен төшөрөү, кейәүгә биреү. Йәштәр туйҙа уҡ фатирлы ла, машиналы ла була. Үндайҙар ғәҙәттә туй үткәреүгә ҡаршы төшөп, шул аҡсаға балаларына ҡиммәтле бүләктәр алып биреүҙе хуп күрә. Яңы барлыҡҡа килгән ғаиләнең киләсәккә бер ниндәй ҙә маҡсаты юҡ кеүек. Бөтәһе лә бар. Шулай ҙа атай күтәреп алып барып баҫтырған баҫҡыстан түбән төшмәү – уларҙың төп бурысы.

## УРТА ХӘЛЛЕЛӘР

Улар бөтәһен дә хәләл көстәре менән яулай. Йортто ла үҙҙәре һала, эшен дә таба, аҡсаһын да. Атай-әсәйҙәр ҙә ярҙамдарынан ташламай – аҡмаһа ла тамып тора. Был төркөмдөң яртыһы ауылда йәшәһә, ҡалғандары ҡалала йәки район үҙәктәрендә көн итә. Һуңғы 1-2 йылда йәштәр араһында ауылға ҡайтыусылар ҙа осрай. Ер алып, нигеҙ ҡоралар, өй күтәрәләр. Ауылда йәшәүҙең өҫтөнлөгө шунда: ҡалала һине бер кем дә ҡолас йәйеп көтөп тормай, ә ауылда атай-әсәйҙең ишеге һәр саҡ асыҡ. Ҡалалағылар кеше фатирында көн итә. Эш хаҡының да күпселек өлөшөн фатир өсөн түләйҙәр. Шулай ҙа уларҙың хеҙмәт урыны бар. Эшһеҙҙәр ҙә иртәгә, һис юғы икенсе аҙнала килеп сығырына өмөтләнә ала. Ауылдағылар фатир өсөн түләмәһә лә, эш мәсьәләһе киҫкен тора. Ауылда эш юҡ тип әйтергә йыйынмайым, киреһенсә, эштән күп нәмә юҡ бында, тик үҙеңә үҙең тир түгәһең.

## ЭСЕРГӘ ЯРАТҠАНДАР

Йәштәребеҙҙең ҡайһылары эсергә әүәҫләнеп алды. Байрамдарҙа ғына түгел, көпә-көндөҙ һуҡмыш йөрөргә лә тартынмай улар. Ошо төркөмгә ҡайһы бер таныштарыңдың да инеүе йөрәкте өйкәй. Йәш балалары булыуы ла туҡтатмай уларҙы. Бер көн иҫерек атай бер йәшлек балаһын коляскала этеп шешәләшенә килә. Сабыйҙың өҫтө лә, бите лә бысраҡ. Атай кеше дуҫы менән закускаға балаһының ҡулындағы кукуруз таяҡсаһын услап алып һоғона. Әсәһе айыҡ булһа, ни йөрәге менән бәләкәсен иҫерек кешегә ышанып ебәрһен инде.







## ПСИХОЛОГ КӘҢӘШЕ
## Анастасия СЕМЕНОВА:

# ИКӘҮ-АРА ҮПКӘЛӘШТЕГЕҘМЕ? ИКЕГЕҘ ҘӘ ҒӘЙЕПЛЕ!

ЯҘМЫШ ЙЫШ ҠЫНА ТӨРЛӨ ТЕМПЕРАМЕНТЛЫ КЕШЕЛӘРҘЕ ОСРАШТЫРА, ҠАУЫШТЫРА. УЙСАН ФЛЕГМАТИК ИР МЕНӘН ШАРТЛАП ТОРҒАН ХОЛЕРИК ҠАТЫНДЫ, МӘҪӘЛӘН. ҠАТЫН КЕШЕ ЙЫШ ҠЫНА ИРЕ ТАРАФЫНАН ҮҘЕНӘ ИҒТИБАРҘЫҢ ЮҠ ДӘРӘЖӘЛӘ БУЛЫУЫНАН ҘУР ҒАУҒА ҠУПТАРА. Ә АРАЛАҒЫ ҺӘР НИЗАҒТЫ ИКЕ ЯҠ ТА АУЫР КИСЕРӘ. БЫНДАЙ ОСРАҠТА ШУНЫ ХӘТЕРЕГЕҘҘӘ ТОТОҒОҘ: ҠАТЫН-ҠЫҘҘАН АЙЫРМАЛЫ РӘҮЕШТӘ, ИР-АТ ХИС-ТОЙҒОЛАРЫН ЙӘШЕРЕП, АҠЫЛЫН ЭШКӘ ЕГӘ ҺӘМ ҒАУҒА ҠУПҠАНДА, АҠЛАНЫП ТОРМАЙ, ӨНДӘШМӘҮҘЕ ХУП КҮРӘ. Ә ҠАТЫН БЫЛ ХӘЛДЕ ИҒТИБАРҺЫҘЛЫҠТЫҢ ДАУАМЛЫ САҒЫЛЫШЫ ТИП ҠАБУЛ ИТӘ ҺӘМ ТАҒЫ ҠЫҘА ТӨШӘ. БЫНДАЙ МӘЛДӘ НИЗАҒЛАШЫУҘЫ АРТАБАН ЙӘЙЕЛДЕРМӘҮ МӨҺИМ. ҮПКӘЛӘШЕҮҘЕҢ БАШЫНДА УҠ САҠ ҠЫНА ЙЫЛМАЙЫУ ҘА, ҺҮҘҘЕ УРЫНЛЫ ҒЫНА ИТЕП ИКЕНСЕГӘ БОРОУ, ЙӘИҺӘ САФ ҺАУА ҺУЛАП ИНЕРГӘ, КИНОҒА БАРЫП КИЛЕРГӘ ТӘҠДИМ ИТЕҮ ҘӘ ХӘЛДЕ ЯҠШЫРТЫР. ҺИС ЮҒЫ: "МИН ДӘ ҺИНЕ ЯРАТАМ!" – ТИП ЙЫЛМАЙЫҒЫҘ. БЫНДАЙ "ДИПЛОМАТИК ҺӨЖҮМ"ГӘ ГҮЗӘЛ ҒАУҒАСЫЛАРҘЫҢ БЕРЕҺЕ ЛӘ ҠАРШЫ ТОРА АЛМАҪ.



Үкенескә күрә, ул да эсергә ярата, тиҙәр. Ә уларҙың икеһенә лә 30 йәш тә юк бит. Йәл, әлбиттә. Эх, бөтә сабыйҙар ҙа ата-әсәһенә иркәләнеп, бәхетле ғаиләлә йәшәһен ине... Ҡалаға барғанда ла эскән ата-әсәһенә эйәреп йөрөгән балаларҙы күрергә тура килә. Уларҙы бер кем дә етәкләп йөрөтмәй, бысракта аунаһалар: "Ярамай, балам!" – тип тыйыусы юк.

## ЯҢҒЫҘ ӘСӘЛӘР

"Баланың бәхете атаһы умырткаһында ярала" тип өйрәтә динебеҙ. Тимәк, атай алдында балаһын бәхетле итеү бурысы тора. Һуңғы йылдарҙа үҙем өсөн генә тип бала тапҡан йәш әсәләрҙең күбәйеүе күптәрҙе борсой. Сөнки баланың атайлы, таянысլы булыуы зарур. Шулай бер апайҙың һөйләгәне хәтерҙә калған: "Һеңлемдең кыҙынан атайың кайҙа, тип һораһак, бешереп ашаныk, тип әйтә," – тигәйне ул. Ҙурайғас: "Минең атайым..." – тип ғорурланып һөйләй ҙә, тиҫтерҙәре менән бәхәсләшкәндә: "Атайға әйтәм", - тип ошаҡлаша ла алмаясаk ул. Ғаилә башлығы мәктәпкә барып әрләшеп, йә урам буйында малайҙарҙың колағын бороп йөрөмәһә лә, тылсымлы һүҙ ул, "атайға әйтәм" тиеүҙәре.

Бер ғаиләлә булған хәл. Ҡышын караңғы иртә төшә. Атай кеше әле эштән кайтып өлгөрмәгән. Береһенән-береһе бәләкәй ике малай: "Атай юк", – тип мыжый. Әсә кеше шаяртып:

- Атайығыҙҙы бүре ашағандыр әле, – ти.

- Юк, атайҙы бүре ашамаһын, атыу беҙҙе малайҙар тукмай, – тип иларға тотона балалар.

- Ниңә улай тиһегеҙ? – тип төпсөнә әсәләре.

- Ана, Илнур менән Рәмилдең аталары булмағас, уларҙы гел малайҙар туkмай, шуға беҙҙең менән генә йөрөйҙәр, – тип яуаплай улар.

Кейәүгә сығып, айырылған йәш әсәләр ҙа байтаk. Бының сәбәбе – ғаилә башлығының йәшел йылан колона әйләнеүе. Шулай ҙа башка сәбәптәр ҙә етерлек. Ир кеше ғаиләһен матди йәһәттән тәьмин итә алмауында. Был осракта айырылышыуға күберәк катынkыҙ ғәйепле. Туйҙан һуң беҙ ни эшләйбеҙ? "Арығанһыңдыр, магазинға үҙем барам, бына ашарға алып килдем. Һут эсәһеңме? Юк, ярҙам кәрәкмәй, мин үҙем..." Ошо юл менән мөхәббәтебеҙҙе иҫбатларға тырышабыҙ. Ғаилә башлығы эшендә ниндәйҙер проблеманы хәл итеү юлын уйлағанда ла кыҫылабыҙ,

ошолай эшләп ҡара, юҡ, минең фекер дөрөҫ, тип бәхәсләшәбеҙ. Тора-бара ғаилә башлығы ролен дә үҙ яуаплылығыбыҙға алабыҙ. Аҙаҡ ир кешенең ғаиләһенә иғтибары кәмеүенә зарланабыҙ, уларҙы игәйбеҙ. Ҡатын – уҡытыусы, ир икегә өлгәшкән уҡыусы түгел бит. Киреһенсә, атай кеше – ғаилә башлығы, әсә – уның ярҙамсыһы. Ошоно онотмаһаҡ ине.

## ҺЫҒЫМТА

Ата-әсәһе туй үткәреү өсөн алған бурыстарын ҡаплап та бөтмәҫтән, йәш ғаиләнең тарҡалып ҡуйыу осраҡтары ла бар. Ә элегерәк кешеләр сыҙам булған. Әсә һөйөүе 10-15 балаға ла еткән. Эшенә лә өлгөргән, ғаиләһен дә ҡараған. "Заман башҡа – заң башҡа" тиерһегеҙ. Бәхәсләшмәйем, ә шулай ҙа һөйгәнең эшкә киткәндә: "Табалағы картуфты йылытып ашарһың", – тип түшәктән торорға иренеп ятҡансы, иртәнге сәйҙе бергәләп эсеү, изге теләктәр әйтеп оҙатып ҡалыу үҙе бер ғүмер бит. Бигерәк тә көнө буйы бер-береңде күрмәгәндә. Бына ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙән торалыр ул ғаилә ныҡлығы. "Хистәр һүрелде", – тибеҙ. Һүрелмәй ул, бары бергә йәшәй башлағас, көн һайын һөйөүеңде иҫ китерлек батырлыҡтар менән иҫбатлап тороуҙың кәрәге лә юҡ кеүек.

Бергә йәшәй башлағас, иптәшеңдең һәр аҙымы тиерлек йәнеңде көйҙөрөүе мөмкин. Ирең эштән ҡайтҡас, кейемен сисеп ултырғысҡа ырғытамы, ҡатының сәғәттәр буйы телефондан һөйләшәме, хатта теш таҙартыу пастаһын һин һыҡҡан урындан тотмауы ла талашыуға сәбәп була... Тәү сиратта бер-береңә юл бирергә кәрәк. Күптәребеҙ "Үлһәм дә баш эймәйем (умру, но не поклонюсь)" принцибына таянып йәшәй. Яратҡан кешеңдең күңеле булһын өсөн генә лә кейемеңде шкафҡа тәҫләп һалырға, әхирәттәр менән һөйләшеүҙе ҡыҫҡартырға була бит. Уның ҡарауы, бәхәскә урын ҡалмаясаҡ. Былар ваҡ-төйәк кенә, ләкин ғаилә бәхете шунан башлана.

Өйләнешкәндә ҡәйнәм беҙгә шундай аҡыллы һүҙҙәр әйткәйне: "Бер-берегеҙгә үпкәләгән саҡта, бер ни ҙә өндәшмәйенсә, эстән унға саҡлы һанағыҙ. Шул арала барыһы ла онотола ул".

*Альбина САДЫҠОВА.*

шоңкар

## ӨЙЛӘНЕШЕҮ ФАЙҘАЛЫ

ҒАЛИМДАР ТӨРЛӨ ЯҠЛАП АНАЛИЗЛАҒАНДАН ҺУҢ, ОҘАҠ ЙӘШӘҮ ТУРАҺЫНДА ШУНДАЙ ФЕКЕРГӘ КИЛГӘН: БЕР-БЕРЕҢӘ ТОҒРОЛОҠ ҺАҠЛАУ, ХЫЯНАТ ИТМӘҮ ҒҮМЕРҘЕ ОҘОНАЙТА.

ФЛОРЕНЦИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ ДОКТОРЫ ЭММАНУЭЛЬ ДЖАННИНИ ЕТӘКСЕЛЕГЕНДӘ ҮТКӘРЕЛГӘН ТИКШЕРЕНЕҮҘӘР ҺӨҘӨМТӘҺЕ ШУНЫ КҮРҺӘТКӘН: АКТИВ ЕНСИ ТОРМОШ АЛЫП БАРҒАН ҺӘМ ҠАТЫНДАРЫНА ТОҒРО БУЛҒАН ИРҘӘР ЙӨРӘК-ҠАН ТАМЫРҘАРЫ АУЫРЫУҘАРЫ МЕНӘН ҺИРӘК СИРЛӘЙ ҺӘМ ОҘАҒЫРАҠ ЙӘШӘЙ.

ТИКШЕРЕНЕҮҘӘРҘӘ ДҮРТ МЕҢДӘН АШЫУ ИР-ЕГЕТ ҠАТНАША. ДОКТОР ДЖАННИНИҘЫҢ ӘЙТЕҮЕ БУЙЫНСА, ИРҘӘРҘЕҢ АКТИВ СЕКСУАЛЬ ТОРМОШ АЛЫП БАРҒАНДА ТЕСТОСТЕРОН – ИРҘӘР ГОРМОНЫ КҮБЕРӘК БҮЛЕНЕП СЫҒА ИКӘН. БЫЛ ДЕПРЕССИЯНАН ҺАҠЛАЙ, ЙӨРӘК-ҠАН ТАМЫРҘАРЫ СИСТЕМАҺЫН ЯЙҒА ҺАЛА ҺӘМ ТОТОШ МАТДӘЛӘР АЛЫШЫНЫУЫН ЯҠШЫРТА. ШУЛАЙ УҠ ТОҒРОЛОҠ ИР-ЕГЕТТӘРҘЕ НЕРВЫ АУЫРЫУҘАРЫНАН ДА ҺАҠЛАЙ.

## НИКАХТАР ТАРИХЫНАН

**Рәсәйҙә никахҡа инеүсе граждандарҙы тәүге тапҡыр 1722 йылда, Петр I указы нигеҙендә, кешенең милләте буйынса мәсет һәм сиркәүҙәрҙә теркәй башлайҙар. Башҡортостанда 536 сиркәү һәм 2074 мәсет ошо йүнәлештә эш алып барған. Архивтарҙа сиркәү яҙыуҙары — 1786 йылдан, мәсеттәрҙә 1829 йылдан һаҡланып килгән. Бары тик Октябрь революцияһынан һуң, 1917 йылдың 18 декабрендә гражданлыҡ акттарын теркәүҙе дәүләт органдарына йөкмәтәләр. XX быуаттың 60-сы йылдарына тиклем ЗАГС органдары урындағы халыҡ комиссариаты ҡарамағында була. 1961 йылдан уларҙың эшен ҡала һәм ауыл советтары алып бара.**

# МӨХӘББӘТТӘН ДОНЪЯ ҠОТАЙЫР

Хәҙер күпселек йәштәр уҡыу йорттарын тамамлағас та киләсәк тормошон ҙур ҡалалар менән бәйләргә тырыша. Кемгәлер тыуған яғында һөнәре буйынса эш юҡлыҡтан карьера баҫҡысы буйлап үрләү мөмкинлеге булмай сыға. Бәғзеләр көнкүрешен шау-шыулы ҡала тормошонда ҡайнап йәшәүҙән тыш күҙ алдына ла килтерә алмай.

Йәштәрҙең ҡайтып төпләнеүен көтө-көтә көтөк булған бәләкәй ауылдар бөтөүгә табан барғанда, Әбйәлил районы Буранғол ауылында бер-бер артлы өйләнешеп, урында төпләнеп ҡалыусы, уҡыуҙарын тамамлап эшкә ҡайтыусы йәштәр төҙөгән йорттар ҡалҡып сыға.

Ҡыҙыл йылғаһы буйында урынлашҡан Йәштәр урамындағы **ФИЛҮЗӘ** менән **ИЛНУР ҒИЛМАНОВТАРҘЫҢ** ҙур йорттары әллә ҡайҙан күҙгә ташланып, үҙенә әйҙүкләй. Ихата эсенә аяҡ баҫыу менән бар ерҙә тәртип, һәр нәмәнең үҙ урынында булыуы күҙгә ташлана. Был йорт хужаларының эшһөйәр икәнлегенә шикләнергә урын ҡалмай. Заманса йыһазландырылған дүрт бүлмәле иркен йорт эсе зауыҡ менән биҙәлгән, бөхтәлеккә сорналған.



Илнур менән Филүзәнең сәстәрен сәскә бәйләүҙәренә быйыл ун йыл тула. Ошо ваҡыт эсендә улар йорт һалып инеп, мал-тыуар үҫтереп, кәртә-ҡура, мунса төҙөп, үҙ хужалыктарын яйға һалырға ғына түгел, өс балаға атай-әсәй ҙә булырға өлгөрҙө.

"Ун йыл ваҡыт үтеп китһә лә, Филүзәгә тәү күргәндәге кеүек ғашиҡмын. Мин БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының икенсе курсына күскәс, беренсе курсҡа уҡырға килгән Филүзә тәү күреүҙән үк күңелемә ятты. Төҫ-киәфәтендәме, үҙ-үҙен тотошондамы әсәйемдә хәтерләткән һыҙаттар бар ине. Шул көндө стипендия алғайныҡ, оҙаҡҡа һуҙмай, бер ҡап кәнфит һатып алдым да ҡыҙ йәшәгән бүлмәгә инеп, танышып сыҡтым. Дуҫтарса аралашып йөрөп, бер-беребеҙҙе һынағас, ныҡлап йөрөп киттек. Булаcаҡ кәләшемде әсәйемә оҡшатып һайлағаныма һис тә үкенмәйем", – ти Илнур.

"Илнур бер курсҡа юғарыраҡ уҡығас, имтихандарға, семинарҙарға әҙерләнгәндә миңә ярҙамлаша ине. Аҡыллы, иғтибарлы булыуы, һәйбәт холҡо, башҡа егеттәр кеүек эскелек менән мауыҡмауы, тырышып уҡыуы көндән-көн күңелемдә яулай барҙы. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға яратҡан Илнур мин икенсе курсты тамамлау менән беҙгә барып атайымдан ҡулымды һораны ла, өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Бергә йәшәгәндә кешенең яҡшы һыҙаттарын китап биттәре кеүек йылдан-йыл асаһың. Ошо ваҡыт эсендә Илнурға булған һөйөүем артҡандан-арта барҙы. Уның ябайлығына, тырышлығына, ғаиләһен, яҡындарын мөкиббән китеп ярата белеүенә һоҡланып йәшәйем", – ти Филүзә.

Илнур булмышы менән ер кешеһе, тыуған төйәгенең тоғро улы. Күңеле ауыл тормошона ереккәндәр инде, ул үҙенең тыуып үҫкән ауылынан ситтә йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмай. Ата-әсәһенең күҙ терәп торған улдары булыуы ла быға йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Илнурҙың ауыл тормошон һайлауына Филүзә ҡуш ҡуллап риза була. Гөрләтеп, ике районды бер итеп туй үткәргәс, икеһе лә бер һүҙҙән ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсәләр ҙә Буранғолға, Илнурҙың тыуған йортона йәшәргә ҡайталар. Һис ҡасан юғалып ҡалмаған егет ваҡытлыса урман хужалығына эшкә урынлаша, үҙҙәренә йорт төҙөүгә тотона. Ул арала тәүге ҡыҙҙары Зөлфиә донъяға килә. Ике йыл эсендә йорттарын һалып бөтөп, йәштәр үҙ донъяһына аяҡ баҫа. Ситтән тороп уҡыу менән бер рәттән, яйлап йорттарын ҙурайталар.

"Тырышҡан – тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан" ти ололар. Ауыл ерендә эшһеҙлектән ыҙа сигеү, аҡса юҡлыҡҡа бошоноп ултырыу – ялҡауҙар эше. Ауылда "йәйҙең бер көнө ҡышты туйҙыра" тип йәшәй Ғилмановтар. Үҫтергән картуфтарын үҙҙәренән арттырып Магнитогорск ҡалаһына алып барып һаталар. Уңған килен өс баланы тәрбиәләргә, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек йорт эштәренә лә, баҡсасылыҡ менән шөғөлләнергә лә өлгөрә. Ҡышҡылыҡҡа күп итеп ҡыяр-помидор тоҙлай, йәшелсә салаттары, емеш-еләктән ҡайнатмалар, компоттар яһай. Өс һыйыр, ҡошҡорт, ваҡ мал аҫраған Ғилмановтар ғаиләһе, ҡул аҫтында еңел машиналары ла булғас, итен, һөтөн, эремсеген, майын йыйып баҙарға алып барып һатып аҡса эшләй. Күктән байлыҡ көтөп эшһеҙ ятыуы ғына рәхәт. Йәшәйем, балалар үҫтерәм тигән кеше таң һарыһынан тороп тир түгә, көнө буйы аяҡ өҫтөндә.

Буранғол мәктәбендә ойоштороусы булып эш башлаған Филүзә хәҙер башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. Эше лә тынғыһыҙ, әммә һис тә зарланмай ул, төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша, өсөнсө синыфта уҡыған ҡыҙы Зөлфиәгә ярҙам итергә лә өлгөрә. Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, ҡыҙы ла уҡыуҙа һынатмай, тик дүрт һәм биш билдәләренә генә өлгәшә. Алты йәшлек ҡустыһы Ғайсарҙы һәм ете айлыҡ һеңлеһе Азалияны ҡарашыуҙа әсәһенең уң ҡулы. Бәләкәй генә булһа ла, ата-әсәһе эштән ҡайтыуға һауытһаба йыуып, өй йыйыштырып ҡуя. Ғайсарҙары атаһынан бер аҙым да ҡалмай, ул нимәгә тотонһа ла ярҙамлашырға әҙер тора. Көтөү ҡаршылауға, мал-тыуар барлауға ул яуаплы, үткән көҙ атаһына картуф сүпләшкән, утын әҙерләүҙә лә ярҙам иткән.

Илнур Буранғол мәктәбе интернатында тәрбиәсе булып эшләй. Ғаилә башлығының аҡса табыу, хужалыҡ эштәрен атҡарыу бурыстарынан тыш балаларын тәрбиәләүҙә лә

роле ҙур. Әйткәндәй, Илнурҙың әсәһе Фариза Сәғәҙи ҡыҙы ла оҙаҡ йылдар мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Атаһының әсәһенә ауыр һүҙ әйтмәй, һәр эштә ярҙам итеп татыу ғүмер кисереүҙәрен күреп үскән Илнур балаларын яҡындарына ихтирамлы, атай-әсәйҙе яратып, үҙ-ара дуҫ-татыу йәшәргә өйрәтә.

"Ғаиләләге төп мәсьәләләрҙе Илнур хәл итә, уның менән кәңәшләшмәйенсә бер эшкә лә тотонмайым. Бер-береңде ярты һүҙҙән аңлап, ихтирам итеп йәшәгәндә, йөрәктәрҙә ҡабынған тәүге һөйөү уты һүрелмәйенсә һаҡланыр. Тормош көткәндә иптәшеңдең ата-әсәһен, туғандарын да хөрмәт итергә, үҙеңдекеләй күреп яратырға кәрәк. "Ике баланы – берәүгә, берҙе юкка һана" тип бушҡа ғына әйтмәгәндәрҙер. Беҙҙең төп маҡсатыбыҙ – ошо балаларҙы аяҡҡа баҫтырып, лайыҡлы кешеләр итеп тәрбиәләү", – ти хужабикә.

Ейәнсура яҡтарынан килен булып төшкән көләкәс, һәр кем менән уртаҡ тел таба белгән Филүзәне мәктәп коллективы ла, ауыл халҡы ла һәр саҡ маҡтап телгә ала. "Килеңдән уңдың бит, үҙ донъяһы, мәшәҡәте күп булһа ла, ҡулыңа эш тейҙермәй", – ти күрше-күләне Фариза Сәғәҙи ҡыҙына. Берҙәм ғаиләнең шатлыҡ-ҡыуаныстары ла, ашы ла, эше лә уртаҡ. Аш-һыуға оҫта, эшкә тырыш Филүзәнең күңеленән ташып урғылған дәртдарманына һоҡланырлыҡ та шул. Йәш йөрәктәрҙә мөхәббәт уты һүрелмәһә, кешенең күңеленән нур, йөҙөнән йылмайыу китмәҫ, берҙәм иңдәргә тормош ауырлығы һиҙелмәҫ.

"Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын" тиҙәр бит. Көслө зат донъя күтәргә атлығып торғанда, бәләкәй генә эшен дә күккә күтәреп маҡтап, һәр уңышын ҡеүәтләп ебәреүсе, татлы һүҙен, тәмле аш-һыуын йәлләмәгән, ирҙең тапҡанын сарыф итмәйенсә, кәрәгенсә ҡуллана белгән ҡатын-ҡыҙҙар булғанда ғына ғаилә усағының уты дөрләп янып, балаларҙың күңелен йылы килеш һаҡлар, әйләнә-тирәләгеләрҙе илаһи нурға күмер. Унан төшкән яҡтылыҡ туғандарҙың, дуҫ-иштәрҙең, күрше-күләндең дә күңелен йылытырға етер.

*Земфира АБУШАХМАНОВА.*

## шоңкар

АЛТЫНҒА КҮМЕЛГӘН ҠАТЫН-ҠЫҘҘАН БЕЛЕМЛЕҺЕ ҺӘЙБӘТЕРӘК.
*Р. ФӘХРЕТДИНОВ.*

БАТША ЛА ҠАТЫНЫНА БАШ ЭЙӘ.

БИСӘҢӘ АСЫУЫҢ КИЛҺӘ, ҠАРҒАНМА, ҠАРҒА ҺАЛЫП, КЕЛӘМДӘРЕНӘН ҮС АЛ.

КӨНЛӘШЕҮ – ҺӨЙӨҮГӘ КӨЙӘ ТӨШӨҮ.

УЙЫ МАТУР ЙӨҘӨ МАТУРҘАН МЕҢ АРТЫҠ.

ХӘЙЛӘЛЕ ҠАТЫН ТИПКЕЛӘП ОҘАТЫУ УРЫНЫНА ҮПКЕЛӘП ОҘАТЫР.
*Ғ. САДЫҠОВ.*

БЕР БӘХЕТЛЕ, БЕР БӘХЕТҺЕҘ, БЫЛ – ИРЛЕ ҠАТЫН.
*З. ҠОТЛОГИЛДИНА.*

ҺИН – ҠАТЫН-ҠЫҘ, ҺӘМ ШУНЫҢ МЕНӘН ХАҠЛЫҺЫҢ ДА.
*В. БРЮСОВ.*

АҠЫЛЛЫ ҠАТЫН-ҠЫҘ ТОРМОШҠА СЫҠҠАНДА БӘХЕТ ВӘҒӘҘӘ ИТӘ, АХМАҒЫ – КӨТӘ.
*В. КЛЮЧЕВСКИЙ.*

ӨЙЛӘН. ҮКЕНМӘҪҺЕҢ. ЯҠШЫ ҠАТЫН ЭЛӘКҺӘ, БӘХЕТЛЕ БУЛЫРҺЫҢ, ЯМАНЫ ТУРА КИЛҺӘ, ФИЛОСОФҠА ӘҮЕРЕЛЕРҺЕҢ.
*СОКРАТ.*

ТАР КҮҢЕЛ ДӘ,
ТАШ КҮҢЕЛ ДӘ –
ИРГӘ ЙҮН ТҮГЕЛ.
*ӘСХӘЛ ӘХМӘТ-ХУЖА.*

ЯФА КҮРМӘЙ ИРҘӘР ИР БУЛМАЙ.
*БУРАНБАЙ СӘСӘН.*

# МАҠСАТТАРҒА ТАБАН ЮЛ ЯРЫП…

**ҺӘР КЕМ ҮҘ ЯҘМЫШЫ, ҮҘ ТӘҠДИРЕ МЕНӘН ДОНЪЯҒА КИЛӘ, ТИҘӘР. КЕМДЕР БЫНЫҢ МЕНӘН КИЛЕШӘ АЛМАЙ, ҮҘЕН ТУҠТАУҺЫҘ ҺЫНАУҘАРҒА ҺАЛА, ТОРМОШОН АЛЛЫ-ГӨЛЛӨ СӘСКӘГӘ КҮМЕРГӘ ТЫРЫША, Ә КЕМДЕР, БАРЫҺЫНА КҮНЕП, ТЫНЫС ҠЫНА ҒҮМЕР ИТӘ. ЖУРНАЛЫБЫҘ ТЫШЛЫҒЫНДАҒЫ ГЕРОЙЫБЫҘ – БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ МЕДИЦИНА УНИВЕРСИТЕТЫНЫҢ V КУРС СТУДЕНТЫ МӘҺӘҘИЕВ ТАНҺЫҠ-МАРСЕЛЬ РЕНАТ УЛЫН ТӘҮГЕЛӘР РӘТЕНӘ ИНДЕРЕРГӘ БУЛА. СӨНКИ УЛ КИЛӘСӘГЕ ТУРАҺЫНДА ХЫЯЛЛАНЫП ҠЫНА ҠАЛМАЙ, Ә УНЫ ЫСЫНБАРЛЫҠҠА ЯҠЫНАЙТЫУ ӨСӨН ТӘҮГЕ АҘЫМДАРЫН ЯҺАЙ.**

## БАЛА САҒЫМ – татлы сағым

“Мин студент ғаиләһендә тәүге бала булып донъяға килдем, – ти геройыбыҙ үҙе хаҡында һүҙ башлап. – Ул ваҡытта әсәйем – Башҡорт дәүләт университетының химия факультетының V курсында, ә атайым Башҡорт дәүләт медицина университетының IV курсында ғына белем алып йөрөй. Миңә, теләп алған сабыйҙарына, исемдең иң матурын ҡушырға хыялланалар. Оҙаҡ һайлағандан һуң улар Танһыҡ тигәненә туҡтала”. Ысынлап та, исеме һирәк, үҙенсәлекле уның, есеменә лә тап килә. Атаәсәһе өсөн генә түгел, олатай-өләсәй өсөн дә танһыҡ булған малайҙы һөйөү-наҙға ғына күмеп үҫтерәләр. “Баламдың балаһы балдан татлы” тиергә ярата ололар. Юҡҡа ғына әйтелмәгәндер был хаҡ һүҙҙәр.

“Сабыйҙы яман күҙҙәрҙән ҡурсалар өсөн уға ике исем ҡушырға кәрәк” тигән ырым йәшәй башҡорт халҡында. Мәһәҙиевтар ҙа был йоланан ситтә ҡалмаҫҡа тырыша. Мулланан малайҙарына тағы ла бер исем ататтыралар. Документтар буйынса Танһыҡ булып теркәлһә лә, дуҫтары өсөн ул – Марсель.

Мәһәҙиевтар ғаиләһе ҡулдарына диплом алғас, йүнәлтмә буйынса Әбйәлил районына йәшәргә күсә. Унда йәштәр гөрләтеп донъя ҡороп ебәрә, бер ул һәм бер ҡыҙ үҫтерә. Марсель Асҡар урта мәктәбендә 9 йыл белем алғас, кендеге киҫелгән ергә – Өфө ҡалаһына уҡырға барырға була. Унда Рәми Ғарипов



исемендәге 1-се һанлы республика гимназия-интернатына уҡырға инергә ниәтләй ул. Дуҫтары, туғандарынан айырылыуы еңелдән булмаһа ла, Марселде тормошта үҙ урыныңды табыу, яратҡан һөнәргә эйә булыу, яңы үрҙәр яулау теләге еңә.

## АТАҺЫНА ҠАРАП уҫ юнған...

Ғүмерен кеше һаулығын һаҡлауға арнарға һәм изгелек өләшергә хыялланған Ренат БДМУ-ның дауалау факультетын тамамлап, Асҡарҙа һөнәре буйынса эш башлай. Үҙ эшенә мөкиббән киткән атай кеше улын да киләсәктә ошо өлкә белгесе итеп күрергә теләй. Атаһының эш урынында йыш ҡунаҡ булырға яратҡан Марсель табиптарҙың үҙ-үҙен тотошон, ауырыуҙар менән мөғәмәлә итеүҙәрен ентекле күҙәтә. Бер нәмәне лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаҫҡа тырыша. "Бишенсе класта уҡып йөрөгән саҡта йәнә атайымдың эшенә эйәреп киттем. Дауаханаға килгәс тә уны ашығыс рәүештә ҙур булмаған операция яһарға саҡырҙылар. Яңғыҙ ҡалғым килмәгәнме, әллә ҡыҙыҡһыныуым еңгәнме, һиҙҙермәй генә уның артынан бүлмәгә индем. Унда атайымдың операция эшләүен күргәс, күҙ алдарым ҡараңғыланып китте, башым әйләнә башланы. Хәлемә түҙә алмай, тышҡа сығып йүгерҙем. Шул ваҡытта атайымдың: "Минең улым – буласаҡ хирург" тип әйтергә яратҡаны хәтергә төштө. Үҙемде ҡулға алырға тырышып, "Ҡандан ҡурҡҡан ниндәй табип булһын инде!" тип үҙемде әрләп тә алдым", – ти Танһыҡ тәүге һынауын иҫләп.

Буласаҡ һөнәрен һайлағанда егет бер ниндәй икеләнеүһеҙ документтарын Башҡорт дәүләт медицина университетына тапшырып ҡайта. "Атайым юлынан китеүемә ифрат шатмын. Һөнәремдең ҡыҙыҡлы, ә иң мөһиме, файҙалы булыуына ҡыуанам. Киләсәктә ярҙамыма мохтаж булған кешеләрҙең хәлен еңеләйтә, уларҙың ғүмере өсөн көрәшә алыуым менән бәхетлемен", – ти ул һөйләгәндә күҙҙәрендә осҡондар уйнатып.

Хирург – ауыр һөнәр, шуға уҡыу ҙа еңел генә бирелмәй егеткә. Төрлө күңел асыу сараларынан баш тартып, өйөм-өйөм китаптарға күмелеп, уҡырға ла уҡырға тура килә уға. Ябай уҡыусы рәтенән төшөп, оло юлға баҫыусы студентҡа белем дә, тәжрибә лә, үҙ-үҙенә ышаныс та кәрәк була. "Минең өсөн уҡыу – ул ярты эш. Теорияһыҙ практика – һуҡыр, ә практикаһыҙ теория – үлек, тиҙәр бит. Белемде практикала уңышлы файҙалана белгәндә генә уның ҡиммәте була. Операция ваҡытында һөнәремдең ни тиклем етди икәнен, бында хаталар, яңылышлыҡтар ғәфү ителмәүен аңланым. Хирург мәсьәлә сисеүсе, һыҙмалар яһаусы түгел, хирург – кеше ғүмере өсөн көрәшеүсе", – ти ул.

Әлеге ваҡытта Марсель өсөн иң төп шарт – уҡыу. Ысын белгес булыр өсөн тейешле белем туплап ҡалырға, дәрестәргә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән йөрөргә тырыша. Сөнки һәр көн һайын уның хыялы ысынбарлыҡҡа яҡынлаша, күңеле үҫә.

## ТӘҮГЕ уңыш-ҡаҙаныштары

Бер урында оҙаҡ тапаныуҙы яратмаған Марсель, үҙенең белемен, ихтыяр көсөн һынап ҡарарға була. 2007 йылда уҡытыусыһы Римма Сөләймән ҡыҙы Таһирова етәкселегендә гистология фәне буйынса үҙенең тәүге эше менән университетта үткәрелгән медицина буйынса республика фәнни-ғәмәли конференцияла ҡатнашырға батырсылыҡ итә. Ярышта уңышлы сығыш яһап, II урынға лайыҡ була.

Ике йылдан һуң Марсель дуҫы Рөстәм Зиязетдинов менән Мәскәүҙә хирургия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһы үтәсәге хаҡында ишетеп ҡала. Ул медицина университеттары командаларының ҡан тамыры, эсәк, һеңер тегеү таҫыллығы буйынса көс һынашыуҙан ғибәрәт була. Егеттәрҙә олимпиадала үҙҙәрен һынап ҡарау теләге уяна. Тик Мәскәүгә барыу күп сығымдар талап итә. Етмәһә, хирургия инструменттарын да үҙҙәренә хәстәрләргә кәрәк. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ул саҡта егеттәргә матди яҡтан ярҙам итеүсе табылмай. Шулай ҙа төшөнкөлөккә бирелмәй йәштәр. Һигеҙ студенттан торған БДМУ командаһын туплап, аҡса йыялар, бергәләп олимпиадаға әҙерләнәләр һәм Һамарға һайлап алыу турына юлланалар. Унда 8 университет командаһы араһынан II урын яулайҙар. Өфөгә ҡайтҡас, откор студенттарҙы дөйөм хирургия кафедраһы уҡытыусыһы Ғәлимов Илдар Искәндәр улы, профессор, медицина фәндәре докторы Тимербулатов Мәхмүт Вил улы үҙ ҡарамағына ала. Ныҡлы әҙерлек дәрестәре үтеп, Мәскәүҙә И.М. Сеченов исемендәге медицина академияһында уҙғарыласаҡ Бөтә Рәсәй медицина буйынса олимпиадаһына юлланалар. Йәштәр был бәйгелә лә һынатмай. Бөтә Рәсәй һәм уның сиктәренән йыйылған 21 команда араһынан БДМУ-ныҡылар, Саратов командаһынан 0,2 балға ғына артта ҡалып, II урын ала. Шәхсән Марсель боғарлаҡ (трахея) интубацияһы буйынса (ауырыуҙың тын алышын еңеләйләштереү өсөн тын алыу юлына торба урынлаштырыу медицина манипуляцияһы) Рәсәйҙә I урынға лайыҡлы тип табыла. "Был олимпиада минең өсөн ослатә уңышлы булды, тиһәм бер ҙә яңылышмам. Беренсенән, Рәсәйҙең баш ҡалаһын тәүгә күреүем булһа, икенсенән, ошондай ҙур бәйгелә университетыбыҙ иң яҡшылар рәтенә инеүен иҫбат иттек һәм, өсөнсөнән, Мәскәүҙең иң маҡтаулы университетының аспирантураһына уҡырға саҡырыу алдыҡ. Был минең өсөн ҙур мәртәбә. Сөнки медицина яҡшы үҫешкән ил белгестәрендә белемде камиллаштырыу файҙалы булыр ине, әлбиттә", – тип шатлығы менән уртаҡлаша Марсель. Әлегә улар уҡыуҙарын

артабан аспирантурала дауам итеү тураһында ныклы уйланыу өҫтөндә.

Студенттарҙың ярыштары быны менән генә сикләнмәй әле. Икенсе йылына тағы ла Өфө-Мәскәү юлын тапарға тура килә уларға. Сираттағы олимпиадала командалар хирургик тегеү техникаһы буйынса көс һынаша. Был юлы ла бәхет йылмая Башҡорт дәүләт медицина университеты командаһына. Улар тағы ла бер призлы урынға эйә булып ҡайта.

Йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша Марсель. Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткәрелгән Әбйәлил йәштәре берлеге тарафынан иҫерткес эсемлектәрҙе ҡулланыуға ҡаршы төшөрөлгән фильмдың презентацияһында студенттар алдында медицина күҙлегенән уларҙың организмға килтергән зыяны тураһында лекциялар менән сығыш яһай, шулай уҡ йыш ҡына мәктәп уҡыусыларына ла аңлатыу эштәре алып бара.

## ҠАНАТ ИТЕП хыялдарҙы

Кешене хыялдары, шул нигеҙҙә ҡоролған пландары һәм уларҙың тормошҡа ашыуына өмөт йәшәтә. Марселдең дә уйҙары, киләсәккә пландары байтаҡ. "Иң беренсе сиратта тәжрибәле абдоминаль хирург булыу теләге менән янам, йәғни ҡорһаҡ ҡыуышлығына ҡатмарлы операциялар яһау мөмкинлегенә эйә булырға теләйем. Икенсе төп хыялым – бөтә табиптар хыялланғанса, яман шешкә ҡаршы дауа уйлап табыу һәм кешеләрҙе ошо ҡурҡыныс яҙанан ҡотҡарыу. Өсөнсөнән, дуҫтарым менән шәхси клиника асып ебәреү теләге бар. Әлеге ваҡытта уны тормошҡа ашырыу буйынса яҡынса бизнес-план әҙерләп ҡуйғанбыҙ, тик аҡса мәсьәләһе әле хәл ителмәгән. Шулай ҙа киләсәктә баш ҡаланың урамдарында беҙҙең клиника эшләй башлар тип ышанам", – ти Марсель ҡәтғи рәүештә.

## БУЛЫР БАЛА – биләүҙән

Марсель бизнес өлкәһе менән ныклы ҡыҙыҡһына. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, директор вазифаһына ла эйә. Яңыраҡ ул дуҫтары менән тәүге бәләкәй генә эш асып ебәргән. "Был эшебеҙ "Fast&Shine" йәки "Беренсе мобиль автомашина йыуыу" тип атала. Уның эш принцибы шунан ғибәрәт: кешеләр машинаһын йыуырға ваҡыт тапмаған осраҡта беҙҙең хеҙмәт менән файҙалана ала. Беҙ ул заказды теркәп, клиенттың машинаһын барып алып, йыуып, урынына кире ҡайтарабыҙ", – ти Марсель эш асылына аныҡлыҡ индерә.

"Тәүге ҡоймаҡ төйөрлө була" тип әйтәләр халыҡта. Ысынлап та, быңдай хеҙмәтләндереү ҡалала бығаса булмау сәбәпле, ойоштороу мәлендә уларға байтаҡ ҡыйынлыҡтар менән күҙгә-күҙ осрашырға тура килә. "Иң ауыры – кеше ышанысын яулау. Йәш булыуыбыҙ арҡаһында беҙҙе етди ҡабул итә алмайҙар, шикләнәләр. Шул маҡсаттан дуҫтар менән бергә кешеләр ышаныс тыуҙырыу серҙәренә өйрәндек, төрлө курстар, бизнес-тренингтар үттек", – ти Марсель.

Әлеге көндә эштәре көйлө генә бара егеттәрҙең. Ҡулдарына ингән килемде бизнестарын йәйелдереү өсөн файҙаланырға тырышалар. Киләсәктә эштәре киңәйеп, халыҡҡа уңышлы хеҙмәт итер тип өмөтләнә улар.

## ЙӘШӘҮ ДӘРТЕ ташҡанда

Ҡуҙылар әүҙем, эҙләнеүсән, маҡсаттарына ынтылыусан, аралашыусан кешеләр. Алдарына яңынан-яңы проблемалар алып, уларҙы хәл итергә, үҙҙәрен төрлө өлкәлә һынарға ярата, тигән ҡылыҡһырлама бирелә йондоҙнамәлә. Ысынлап, Танһыҡта ла тап ошондай сифаттар табырға мөмкин. Ҡыҙыҡһыныуҙары бик күп уның. Мәктәп йылдарында ағастан төрлө уйынсыҡтар юнып эшләү менән шөғөлләнә. Үҙ ҡулдары менән семәрләп биҙәлгән ағас сувенирҙарын туғандарына иҫтәлеккә бүләк итә. Шул уҡ ваҡытта ҡурай, бейеү түңәрәктәренә йөрөй. Футболда ла уға етеүсе юҡ. Уҡырға ингәс тә был шөғөлөн ташламай. Төнгә ятаҡ спорт залын һорап, сәғәттәр буйына футбол уйнайҙар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ятаҡтар араһында үткәрелгән ярышта имгәнеү сәбәпле, спортты бер аҙға кисектереп торорға тура килә уға. Әммә киләсәктә тағы ла яратҡан шөғөлөмә әйләнеп ҡайтырмын тип ышана егет.

Йәштәрҙең күп ваҡытын ICQ-ҙа, "В контакте" сайтында үткәреүен өнәп бөтмәй, ул һаулыҡ өсөн зыянлы, ялҡаулыҡты үрсетә тип иҫәпләй. Шуға күрә буш ваҡытын телевизор, компьютерға әрәм итеүгә ҡарағанда, йүгереү, сноубордта шыуыу, китап уҡыу кеүек файҙалыраҡ эш менән шөғөлләнеүҙе хуп күрә.

"Мин ғүмеремдә баш етмәҫлек ике ҙур ҡылыҡ эшләнем. Быңдай эксперименттарҙың күбеһе уңышһыҙ тамамланыуын, сәләмәтлекте ҡурҡыныс аҫтына ҡуйыуын белһәм дә, үҙһүҙлегем арҡаһында бейек ҡаянан сноубордтан шыуып төштөм һәм... күперҙән һикерҙем. Әммә был аҙымыма үкенмәйем, сөнки ул ғүмерҙең ҡәҙерен аңларға ярҙам итте, – ти Марсель серле йылмайып. – Журнал уҡыусыларына ла йәшәүҙең йәмен, тәмен юғалтмауҙарын, һәр атҡан таң өсөн ҡыуанып ғүмер итеүҙәрен теләйем. Бер ваҡытта ла үҙҙәрен башҡаларҙан түбән ҡуймай, үҙ көстәренә ышанып, мөмкин тиклем үҙ ҡулдары менән онотолмаҫ тормош ҡорорға тырышһындар. Яҡшы һүҙ, изге эш ҡалдырырға ынтылһындар. Тырыштарға ғына уңыш йылмая бит".

***Филүзә СӘЛИХОВА.***

# «КӘКҮК» БУЛҒЫМ КИЛМӘЙ
## ЙӘКИ ТӘҮБӘГӘ КИЛГӘН «ҠОШСОҠТАР»



Инде килеп XXI быуаттың тәүге ун йылын тамамланыҡ. Аллаға шөкөр, тип әйтәйек, яңы быуат, алдағыларынан айырмалы, әлегә тыныс ҡына дауам итә. Әллә ни иҫ китерлек хәлваҡиғалар, тетрәндергес бәлә-казалар ҙа юк кимәлендә. Тыныс тормошта йәшәп, тыныс ҡына донъя көтәбеҙ.

Яңынан-яңы йорттар, мәғариф, мәҙәни, һаулыҡ һаклау учреждениелары, хатта завод-фабрикалар төҙөлә, тип ҡыуанабыҙ, йылдан-йыл халыҡтың йәшәү кимәле күтәрелә, тип шатланабыҙ. Егәрлеләр тырышып-тырмашып донъя ҡора, ялкауҙар иһә эшһеҙлек буйынса пособие алып тамак туйҙыра. Уларҙы ла ҡырға типмәйбеҙ, йәнәһе. Тәү ҡарауҙа күптән хыялланған йәшәү рәүешенә, матур тормошта көн итергә ирешеп киләбеҙ кеүек. Ләкин төптәнерәк уйлап ҡараһаң, йөрәк тыныслыҙлана, күңел әрней башлай, үҙенән-үҙе “тормошобоҙ ысынлап та матурмы һуң?” тигән һорау килеп тыуа. Халыкка бик белендермәй эшләнгән хилаф эштәр ҙә байтак шул был тормошта. Бөгөн сафка баҫтырылған завод-фабрикаларҙың, башкаһының иртәгә кем ҡулына эләгере лә билдәһеҙ, сөнки илде “приватизация” ялмап алған һәм ҡомһоҙҙарҙың ҡулы бик оҙон, мәкерлектәренең, оятһыҙлыктарының сиге юк. Тыуған йортобоҙҙа ла күптән инде “һыу” үтеп инә башланы. Шулай дауам итһә, артабан ныклап баҫып торорлок “ҡоро ер ҙә” ҡалмауы бик мөмкин. Күпме көс түгеп тапкан-таянғаныбыҙҙың күп өлөшө “бер урынға” китеп һоғонола. Былары ил кимәлендә.

Ныклабыраҡ, күңел күҙе менән ҡараһаң, үҙ йортобоҙҙа ла тормошобоҙҙо үтә лә йәмһеҙләгән кире күренештәр байтаҡ шул. Эскелек, наркомания, енәйәтселек һәм башкаһы бөгөнгә көндә баштан ашкан, бар булмышыбыҙҙы быуып алып бара һәм уларҙы ауыҙлыҡлап булырмы икән бер ҡасан, тип ҡуркып та ҡуяһың хатта.

Барыбыҙҙы ла бик борсоған тағы бер йәмһеҙ күренеш – ул үкһеҙ ҙә, тере лә йәтимдәр менән донъя тулыуы.

Ғәҙәттә, етемдәр башлыса ҡәһәрле һуғыш "емештәре" булырға тейеш тә бит, әммә байтаҡ йылдар (шөкөр итәйек) әллә ни ҡан ҡойғос алыш-бәрелештәр булманы, ә йәтимдәр һаны кәмергә уйлап та ҡарамай, киреһенсә, артыу өҫтөндә. Был үҙе үк йәшәү рәүешебеҙҙең камил түгеллеген, дөрөҫ тормоштан әлегә алыҫта булыуыбыҙҙы раҫлай.

Миңә Ишембай районындағы Урман-Бишҡаҙаҡ, Петровск балалар йорттарында йыш булырға тура килде һәм һәр барыуымда унда тәрбиәләнеүселәр хаҡында әллә күпме ғибрәтле хәбәрҙәр ишетеп ҡайттым. Ҡайһы берҙәре бигерәк тә күңел тетрәткес, йөрәк өшөткөс әсе яҙмышҡа дусар булған. Араларында ғүмерҙәрендә әсә һөтө татымаған, әсә наҙы toймаған "кәкүк балалары" ла байтаҡ. Улары бигерәк тә йәл. Ләкин бөгөн мин һүҙемдә "кәкүк" әсәләр хаҡында түгел, ә тәүбәгә килгән "кәкүклек"тән арына алғандар хаҡында алып барасаҡмын. Бәлки, уларҙы уҡып, кемдер ғибрәт алыр, кемдер үҙ балаһын ҡабат ҡулына алып бағыр, йәтимдәр һаны аҙ ғына булһа ла кәмер тигән өмөт менән яҙам был күргән-ишеткән хәл-ваҡиғаларҙы.

## ҠОРТЛО БУЛҒАН ЭСКӘЙЕ

Айгөл ҙур булмаған ауылда өләсәһе менән генә йәшәне. Ата-әсәһен ныҡлап хәтерләмәй ҙә ул. Ҡыҙға дүрт йәш булғанда аты менән бергә боҙ аҫтына китеп һәләк булған улар. Ауыл Салауат ҡалаһынан әллә ни алыҫ түгел. Ағиҙел аша тураға сыҡһаң, биш саҡрымдай ғына. Халыҡ йәйен урабыраҡ аҫмалы күперҙән, ҡышын йәйәү ҙә, ат менән дә боҙ аша ҡалаға йөрөй. Айгөлдөң атаәсәһе йомоштарын йомошлап ҡайтып килгәндә бәләгә юлыҡҡан да инде. Яҙғы боҙ яҫтыҡ ҡалынлыҡ булһа ла ышанма, тип белмәй әйтмәгәндәрҙер – һыу ҡалҡа башлаған мәлдә була был хәл.

Тормоштары бик етештән булмаһа ла, матур ғына йәшәне Айгөлдәр. Мәһирә инәй ҡыҙҙы бар көсөн һалып тәрбиәләргә тырышты. Ейәнсәре тыныс холоҡло, уңған, тырыш ҡыҙ булды. Һәр эштә ярҙамсы, уҡыуҙа ла һынатманы.

Һигеҙенсе класты тамамлағас Айгөл өләсәһенә медучилищеға уҡырға барырға теләге барлығын әйтте. Мәһирә инәй уның ниәтен хупланы ғына. Имтихандар тапшырыр алдынан үҙе ейәнсәре менән бергә Салауатҡа барып, унда йәшәгән әхирәтенең ҡыҙына фатирға урынлаштырып ҡайтты. Ниндәйҙер ауырыуы арҡаһында бала таба алмаған һәм шуны сәбәп итеп ире ташлап киткән ҡырҡ йәштәр тирәһендәге Нәсимә исемле был ҡатын ҡыҙҙы бик йылы ҡабул итте. Уның өсөн өлтөрәп торҙо.

Айгөл тәүге имтихандарын яҡшы билдәгә тапшырҙы. Әммә бәлә аяҡ аҫтында, тиҙәр бит, икенсеһенә китеп барғанда, трамвай юлына эләгеп тәгәрәп, һул аяғын һындырҙы. Ҡыҙҙы тиҙ ярҙам машинаһы менән алып китеп, дауаханаға һалдылар. Хыялдары тормошҡа ашмауына бик хафаланды Айгөл. Алабарманланып, бәләгә тарып ятыуына үҙен үҙе әрләне. Ләкин, ни эшләһен, яҙмыштыр инде, тип уфтаныуҙан башҡа сара юҡ. Өләсәһе менән Нәсимә апаһының килеп йыуатыуҙары ғына күңеленә бер аҙ дауа булды.

Ләкин, бер ямандың – бер яҡшыһы. Айгөл дауаханала тәүге мөхәббәтен осратты. Үҙен дауалаған табипҡа ҡапылдан үлеп ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Һомғол буйлы, ҡара бөҙрә сәсле утыҙ йәштәр самаһындағы был ир-егет ҡыҙға бигерәк тә иғтибарлы, ихтирамлы булып, янына йыш ҡына инеп-сығып йөрөнө, яғымлы ҡарашы менән иркәләп, матур һүҙҙәр һөйләп күңелен йыуатты. Айгөл Айрат янында булғанда ниндәйҙер әйтеп аңлатҡыһыҙ ләззәт кисерҙе, йөрәге дарсләп типте, күңеле ярһып ҡайҙалыр ашҡынды. Тәүҙәрәк аңғармаһа ла, һуңыраҡ үҙенең ғашиҡ булыуын төшөнөп, ҡурҡып та ҡалды ҡыҙ хатта. Шулай ҙа дауаханаға эләгеп, унда мөхәббәтен осратҡанына, һөйгән кешеһенең һәр саҡ янында булыуына ҡыуанып, үҙен бик бәхетле һананы. Тик бына дауаханадан сыҡҡас нимә эшләрен, Айратты күрмәй нисек йәшәрен уйлап бойоҡто. Ә унының: "Уҡырға киләһе йыл инерһең, быйылға бында санитарка булып урынлаш, үҙем ярҙам итермен", – тигәнен ишеткәс, ҡыуанысының иге-сиге булманы. Тимәк, улар бергә эшләп, бер-береһе менән осрашып, күрешеп торасаҡ. Айраттың ҡатыны, балаһы барын да белде Айгөл. Ләкин һөйөү утында янған ҡыҙ быға әллә ни иғтибар итмәне.



Дауаханала эшләй башлауына ике аҙна самаһы ваҡыт үткәс, Айрат Айгөлдө үҙенең тыуған көнөн икәүҙән-икәү генә үткәреү өсөн ҡала ситендәге баҡсаһына саҡырҙы. Ҡыҙ бер һүҙһеҙ риза булды. Унда Айрат мөхәббәттән дә, шарап шауҡымынан да башы әйләнгән ҡыҙҙың ҡолағына наҙлы һүҙҙәр шыбырланы. Ҡатынын яратмауын, балаһы хаҡына ғына уның менән бергә йәшәүен, нисек тә айырылышып, Айгөл менән ҡауышасағын да әйтергә онотманы. Ул көндө баҡсала ҡунып ҡалды улар. Артабан да йыш ҡына унда барып йөрөнөләр. Һыуыҡтар төшкәс, Айрат һөйәркәһен иптәшенең буш торған фатирына урынлаштырҙы. Нәсимә апаһы уны бик еләргеһе килмәһә лә, ни эшләһен, күҙ йәштәре аша оҙатып ҡалды.

Үҙенең ауырлы икәнен Айраты һөнәре буйынса Чечняға оҙайлы командировкаға киткәс кенә белде Айгөл. Башта ҡыҙ ҡаушап, был килеш бер яңғыҙым нишләрмен тип, ҡурҡыуға төштө. Аҙаҡ башынан "ярай әле Айрат белмәй китте, ҡайтыуына сюрприз булыр" тигән уй үтте. Ейәнсәрен ҡорһаҡлы килеш күреү менән йөрәген тотоп түшәккә йығылған өләсәһе шул ятыуынан торманы, гүр эйәһе булды. Был хәл Айгөлдө һеңгәҙәтә һуҡты. Үҙен үҙе ғәйепләп, әллә күпме тынысланa алмай яфаланды ул. Ауыр саҡтарында "ярай ҙа таяныр кешеләрем – Айратым һәм уның балаһы бар" тип йыуанған булды.

Балаһы тыуыу менән табиптар тураһын ғына әйтмәй: "Ҡыҙың зәғиф, һиңә уны тәрбиәләү бик ауырға төшәсәк", – тип иҫкәртеп ҡуйҙы. Палатала бергә ятҡан бер-ике ҡатын да йоҙроҡтай ғына сабыйға ҡарап: "Һин үҙең дә бала ғына бит әле, етмәһә яңғыҙһың, ҡыҙыңды бында ғына ҡалдыр ҙа ҡуй", – тип кәңәш бирҙеләр.

Әммә йәш әсәгә үҙ ҡарынынан сыҡҡан, һөйгән кешеһенән тапҡан балаһы шул тиклем яҡын, шул тиклем йәл тойолдо, хатта уны бер минутҡа ла ҡулынан ыскындырғыһы килмәне. Айгөлдө күрергә килгән Нәсимә апаһы ла: "Ҡалдырып китәһе булма, үҙем ҡарашырмын", – тип киҫәтеп ҡуйҙы һәм Айгөл сабыйын күтәреп фатирына ҡайтыу менән көн дә тип әйтерлек килеп уны тәрбиәләште.

Балаһын тәү күреүҙә үк: "Ниңә таптың уны, кемгә хәжәте бар был етлекмәгәндең!" – тип Айрат үҙен шатландырырға хыялланған йәш ҡатындың йөрәгенә бысаҡ ҡаҙағандай итте. Килгән һайын сабыйҙың илауына сыҙамай: "Ҡасан тонсоға инде үләтең!" – тип мыжыуҙан бушамай. Айгөлдө ике ут араһына һалды.

Ә бер көндө ул ҡәтғи рәүештә: "Бөгөн үк етлекмәгәнеңде детдомға илтеп тапшыр, йә ул, йә мин!" – тип Айгөлдөң йөрәген үтәнәнүтә телгеләне. Йәш ҡатын оҙаҡ ҡына һушһыҙ ятып, ҡапыл ғына аңына килгән кешеләй Айратҡа төбәлде. Шул саҡ алдында торған әҙәмдең биҙәкле йылтыр ҡоршауы ҡапылдан ҡойолоп төшөп, күҙҙәренә ир-уҙаман урынына бер бахырҙың шәүләһе генә салынғандай булды. "Хайуандың хайуанына ла балаһы ғәзиз, ә был әҙәм үҙ балаһын емтеккә һанай, унан ваз кисә, ниндәй түбәнселек" тигән уй башынан үтте. Ҡолағында ҡасандыр ауыл клубында ишеткән таҡмаҡтың, "Матур алма тип ҡыҙғайным – ҡортло булды эскәйе" тигән һүҙҙәре яңғырап киткәндәй булды.

Айрат сығып китеү менән Айгөл балаһының әйберҙәрен йыйыштырып алды ла, сабыйын ҡосағына ҡыҫып, Нәсимә апаларына йүнәлде.

Күпмелер ваҡыт үтеп, башҡа әйберҙәрен алып китергә тип килгәндә фатирға йәш кенә ҡыҙ хужа булып та алғайны инде.

## БАЛА — БАУЫР ИТЕ ШУЛ

Нәфисә көҙгө йонсоу көндәрҙең берећендә бала табыу йортона инеп ятты. Палатала унан тыш тағы ла өс буласаҡ әсә сабыйҙарының яҡты донъяға киләсәген көтә. Нәфисә урынлашыу менән ҡатындар уның кем, ҡайҙан икәнлеген төпсөнә лә башланы. Ләкин яңы бүлмәләштәренең бер генә лә уларға яуап биргеһе килмәне. Үҙенең исемен һәм яҡындағы районлан икәнен генә әйтте лә, карауатында стенаға уҡ әйләнеп ятты. Ҡатындар уға аптырабыраҡ ҡарап яурындарын ғына һикертте лә, үҙ-ара әңгәмәгә күсеп китте.

Нәфисә артабан да бүлмәләштәре менән аралашып барманы, күп ваҡыт үҙ уйҙарына сумып, шым ғына урынында борғоланды, төндәрен башҡаларға һиҙҙермәҫкә тырышып балауыҙ һыҡты.

Бер кисте уның карауатына егерме биш йәштәр самаһындағы Ғәйшә исемле ҡатын

килеп ултырҙы һәм йомшаҡ ҡына итеп: "Һеңлем, һыҙланаһың, буғай. Был тыуасаҡ балаңа ҙур зыян итәсәк. Эсеңде бушат, сабыйыңды тыныс күңел менән ҡыуанып ҡаршыла", – тине. Был ҡатындың ипле һүҙҙәре, яғымлы ҡарашы Нәфисәнең күңеленә шифалы тын бөрккәндәй итте һәм ул, бер аҙ асыла биреп, ҡатынға уйламағандан ғына ауырға ҡалыуын, тыуасаҡ балаһы бөтә уй-хыялдарын селпәрәмә килтерәсәген, иң мөһиме – һөйгән егете менән ҡауышыуға юл ябасағын әйтте. Ғәйшәнең: "Нисек, был ауырың егетеңдән түгелме ни?" – тигән һорауына ул: "Егетем армияла, ә был башҡанан", – тип яуап бирҙе лә күҙ йәштәренә мансылып йәнә шымып ҡалды. Бер аҙ тынысланғас, йәнәшәһендә йомшаҡ ҡулдары менән сәстәренән һыйпап ултырған ҡатынға түкмәй-сәсмәй тип әйтерлек барыһын да һөйләп бирҙе.

Салауат педагогия училищеһында уҡыған Нәфисә ҡышҡы каникулдарын ғәҙәттәгесә урман-тауҙар ҡуйынында ятҡан төпкөл ауылдарында үткәрҙе. Ҡышын һирәк-мирәк кенә йөрөгән автобус ул китәһе көндө килмәне. Бәхетенә, ағас тейәгән йөк машинаһы тап булды. Йылы кабинаға инеп ултырған ҡыҙ, ҡайһылай йәтеш булды, бер нисә сәғәттән барып етермен, тип шатланды. Тик буран сығып, тауға үрләгәндә бөтөнләй ҡоторона башланы һәм юлды үткеһеҙ итте лә ҡуйҙы. Машинаһының барырҙай рәте ҡалмағас, шофер: "Ултыр инде хәҙер юлды асҡандарын көтөп", – тип йомшаҡ ҡына һүгенеп алды. Оҙон буйлы, күрер күҙгә сибәр генә был егет кабинаны һыуытмаҫ өсөн тәүҙә машинаһын йыш-йыш ҡына эшләтеп алғыланы ла, һуңғараҡ: "Солярка бөтһә, бөтөнләй туңып ҡуйыуыбыҙ бар", – тип һирәк кенә ҡабыҙҙы. Ҡаласа кейенгән Нәфисә кабина һыуыныу менән ныҡлап өшөй башланы. Шофер егет, ултырғыс артынан юрған алып, ҡыҙҙы шуға төрөндөргәйне лә, файҙаһы аҙ бул-ды. Ҡараңғы төшкәндә Нәфисә тешетешкә теймәй ҡалтырана уҡ башланы. Шунда егет: "Бөтөнләй күгәрҙек, һылыу, ошоноң менән йылытмай булмаҫ һине", – тип, бер шешә араҡы сығарып, ҡыҙға ярты стакан ҡойоп бирҙе. Нәфисә сараһыҙҙан уны бөтөргәнсе эсә һалды һәм шунда уҡ тәненә йылы йүгергәнен тойҙо, бер аҙҙан ҡалтыраныуҙан да туҡтаны. Егет үҙе лә ҡойоп эсте, аҙлап-аҙлап ҡыҙға ла йотторҙо. Эсенә йылы инеп, инде йоҡоһо килеүҙән иҫнәй башлаған ҡыҙҙы ул ултырғыстар артындағы урынға яткырҙы һәм: "Бер тун аҫтында бер-беребеҙгә terәлеп ятһаҡ, өшөмәҫбеҙ", – тип эргәһенә ятты. Араҡы шауҡымы ла, егеттең сисеп ятҡан туны аҫтында уның тән йылыһын тойоу ҙа ҡыҙҙы бөтөнләй иҙрәтеп ебәрҙе. Бер-береһенә терәлеп, йоҡлап ҡына ятманы шул улар ул төндә.

Иртәгеһен уларҙы трактор тауышы уятты. Буран баҫылып, ул һалған һырынтыларҙағы ҡар бөртөктәре иртәнге ҡояш нурҙарында күҙ сағылдырып йымылдаша ине. Юл таҙартып барған трактор артынан имен-аман ғына Ишембайға килеп еттеләр. Нәфисә оялышынан юл буйы егеткә күтәрелеп тә ҡараманы тип әйтерлек. Машинаһынан төшкәндә уныһы: "Ғәфү ит, һылыу, тыйыла алмағаным өсөн. Һин миңә ныҡ оҡшаның, ҡатыным, балаларым булмаһа, бөгөндән һиңә өйләнер инем", – тине. Ҡыҙ бер ни ҙә өндәшмәне.

Юлда килгәндә әллә ни уйламаһа ла, Салауатҡа етеп, дөйөм ятағындағы карауатына һуҙылып ятҡас ҡына үҙенең ниндәй гонаһ ҡылғанын, һине көтәм, тип әрмегә оҙатып ҡалған Фәниленә нисек хыянат иткәнен бар ысынбарлығы менән төшөндө Нәфисә. Уға ни тип яуап бирермен тип байтаҡ өҙгөләнде. Ә һуңлап ҡына ауырға ҡалғанын да белгәс, хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыр сиккә лә етте.

Барыбер беленәсәк, тип бер көндө бар ҡайғы-хәсрәтен бергә йәшәгән әхирәт ҡыҙы Хәлимәгә һөйләне лә бирҙе. Уныһы тәүҙә йәлләп "ах" та "ух" килде лә, аҙаҡ: "Ярар. Булыры – булған, тик аборт эшләтеп ҡуйма. Унан һуң ҡабат бала табыу бик икеле", – тип миҫалға тәүге йөктәрен төшөртөп, аҙаҡ бөтөнләй түлһеҙ ҡалған ҡатындарҙы килтерә һалды. "Балаңды тап та, роддомда ҡалдыр ҙа кит. Хәҙер күптәр шулайта", – тине Хәлимә.

Нәфисә һиҙҙертмәй генә аборт эшләтермен, тип уйлап ҡуйғайны инде. Әммә әхирәтенең һүҙҙәре уны хафаға һалды. Ысынлап та, артабан әсә булыуҙан үҙен мәхрүм итеп ҡуйһа? Ә уның бар хыялы Фәниленә кейәүгә сығып, итәк тултырып бала табыу ине бит. Уйҙарынан башы ҡатҡан ҡыҙ әхирәтенең һуңғы кәңәшенә ҡолаҡ һалырға булды.

Фәнил менән Нәфисә бер ауылда тыуып үҫте. Бергә мәктәп тамамлап, ҡыҙ – Салауатҡа, егет Стәрлетамаҡҡа китеп уҡырға инде. Фәнил ял һайын тип әйтерлек ҡыҙ янына килеп йөрөнө, йәйһә ауылдарында осраштылар. Барыһы ла уларҙы матур парға һанап, матур ғаилә ҡорорҙарына ышанып бөткәйне. Нәфисәнең ниндәй хәлдә тороп ҡалғанын белһәләр, аптырауҙарынан һуштары китәсәк. Ә Фәнил – бигерәк тә ғорур егет. Уны бер ҡасан да ғәфү итмәйәсәк.

Нәфисә үҙенең ауырлы икәнен белендермәҫ өсөн барыһын да эшләргә тырышты. Хәлимәнең кәңәшенә ҡолаҡ һалып, ауылына ла ҡайтып йөрөмәне, эсен һәр саҡ ҡыҫып бәйләне, ваҡытын күберәк бүлмәһендә үткәрҙе. Һәм, ваҡыты еткәс, бала табыу йортона инеп ятты. Уйында хәҙер тиҙерәк бәпесләй һалыу ҙа, тиҙерәк унан ҡотолоу.

Ғәйшә уның һөйләгәндәрен бүлдермәйенсә генә тыңланы ла: "Улай икән", – тип кенә үҙ карауатына барып ултырҙы.

Шул кисте уларҙың икеһен дә тулғаҡ тота башлап, бер-бер артлы бәпестәре лә тыуҙы.

Үҙенә имеҙергә килтергән малайын Нәфисә тәүҙә сирканыбыраҡ ҡулына алһа ла, күңеле менән уның үҙенә бик яҡын, ҡәҙерле икәнен тойҙо. Сабыйына үтә лә эҫенеп китһә, унан айырылыуы ауыр буласағын һиҙеп, тиҙерәк бала табыу йортонан сығып тайыу хәстәрен дә күрә башланы.

Ҡыҙҙың ниәтен белгән Ғәйшә бер Нәфисәгә, бер уның ҡулындағы сабыйға ҡарап торҙо ла: "Врачтар менән һөйләшеп малайыңды үҙемә алып ҡалырмын, башҡаларға игеҙәктәрем тыуҙы тип әйтермен. Үҙҙәре бер-береһенә окшап та торалар бит", – тине. Аҙағыраҡ ҡыҙға сәйерерәк ҡарап ҡуйып: "Атаһының исеме кем ине?" – тип һорап ҡуйҙы. Нәфисә үҙе лә аптырай биреп, шофер егеттең исемен дә һорамауын әйтте. Үҙ балаһынан айырылыу нисек ауыр икәнен әсә булғандар ғына бар ысынбарлығында аңлайҙыр. Нәфисә бала табыу йортонан сыҡҡас, үҙен ярты йөрәген ҡырҡып унда ҡалдырып киткәндәй тойҙо. Нисек кенә тырышмаһын, күҙ алдынан уймаҡтай ғына ирендәрен ҡыбырлатып ятҡан сабыйының йөҙ-һынын ҡыуа алманы. Хәсрәткә батырып, күңелен балаһы хаҡындағы уйҙар биләп тик торҙо. Фәнилдән йыш ҡына килеп торған хаттар бер аҙ йыуаныс бирҙе биреүен. Ләкин әрменән ҡайтыр алдынан яҙған һуңғы хаты Нәфисәне һеңгәҙәтә һуҡты. "Һин миңә хыянат итеп, бала табып ятҡанһың, оятһыҙ!" тип кенә яҙылғайны унда. "Кемдән, нисек белгән?" тигән һорау телгеләне күҙ йәштәре аша хатҡа төбәлгән ҡыҙҙың мейеһен ул саҡ.

Фәнил әрменән ҡайтҡас, килде ул йәшәгән бүлмәгә. Ләкин уның янына түгел, ә эс серҙәрен уртаҡлашып, яҡын күреп йөрөгән әхирәте Хәлимә янына. Ә уныһы Нәфисәгә оятһыҙ күҙҙәрен төбәп: "Мөхәббәтең өсөн көрәшеүҙә бөтә юлдар ҙа яҡшы. Мин Фәнилгә тәү күреүҙән үк ғашиҡ булғайным", – тип кенә ебәрҙе.

Көс-хәл менән имтихандарын тапшырып, ҡулына диплом алып, Нәфисә тыуған ауылына эшкә ҡайтты. Ваҡыт барыһын да дауалай тиһәләр ҙә, Нәфисәнең күңел ғазабы киреһенсә көсәйә генә барҙы. Мәктәптә сакта бер аҙ онотолһа ла, өйөнә ҡайтҡас, бигерәк тә йоҡларға ятҡас, сабыйы хаҡында уйҙар мейеһен бырауланы.

Түҙемлеге бөткәс, малайына бер йәш булған көндә уны күреп булһа ла ҡайтайым тип, күстәнәс-бүләк тейәп юлға сыҡты. Ғәйшә теге ваҡыт адресын әйтеп ҡалдырғайны, ашҡынып килеп етһә лә, сабыйы йәшәгән күп ҡатлы йорт алдына еткәс, ҡапыл инергә ҡыймай туҡтап ҡалды ҡыҙ һәм ишек алдындағы эскәмйәгә килеп ултырҙы. Бер аҙ ваҡыт үткәс, йәнәшәһендәге оло йәштәрҙәге апай: "Кемгә килгәйнең, ниңә инмәйһең?" – тип һорап ҡуйҙы. Нәфисә Ғәйшәнең исемен әйткәс, апай уға боролоп уҡ ултырып: "Уны кисә генә күмеп ҡайттылар бит. Яман шеше булған, ике-өс ай эсендә һурылып, юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы, бахыркай. Дүрт бала менән нишләр инде Сәғитйәне", – тине. Быны ишеткәс, Нәфисә ни әйтергә лә белмәй аптырап ҡалды ла, бәләгә тарыған балаһын ҡотҡарырға ташланған ҡошсоҡтай, ҡапыл ишеккә ынтылды. Фатир ишеген уға ике ҡулына ике бала күтәргән... шофер егет асты.

Уйламағанда дүрт балаға әсә булып ҡуйған Нәфисә менән ауыр сағында ҡапылдан таяныс тапҡан Сәғитйән, матур ғына пар булып, донъя көтәләр, инде бишенсегә атай-әсәй булырға әҙерләнәләр, тинеләр миңә.

*Мөҙәрис БАГАЕВ.*

# ҺАУАЛАҒЫ ТОРНА

Күңелең аҙмаһын да, урыныңдан куптарылма икән ул. Йәш сакта үҙеңдең яртың итеп һайлап алғас, шунан башкаға күҙ атмай ғына, йөрәгеңдәге һөйөү-наҙҙы ситкә һипмәй үҙ хәләлеңә генә арнап, якшы яктарын хуплап, уның һинең өсөн иң кәрәкле кеше икәнен һәр сак аңғартып, окшамаған яктарын дөрөҫ юлға бороп, һөйөп-йылмайып, уның йөрәгендә үҙеңә карата тик якшы хистәр уятып кына йәшәргә кәрәк икән. Сөнки өлкәнәйә килә, кырк йәштәрҙе үтә башлаһаң, һайларлык, өйрәнеп китерлек иш табыуы кыйын. Ир-аттың был йәштәрҙә кайһыһы эскегә бирелгән, кайһыһы ауыр эштән йәмһеҙләнгән, кайһыһы дөрөҫ тормош алып бармауҙан ауырыуға әйләнгән, өйләнмәй йөрөгәндәре тағы ла кыйыуһыҙланған була. Төҫ ташламаған матур киәфәтле, эшлекле ирҙәр иһә ғаиләле.

Фәриҙәнең ире эсмәй-тартмай, эшкә лә дәртле генә ине. Кура тултырып мал көттө, техниканы биш бармағы кеүек белде, аҙып-туҙып йөрөмәне. Йорт-кураны яңыртты. Ауылда беренсе булып бик тәрән итеп һыу скважинаһы каҙҙырып, һыулы булдылар. Әлбиттә, бөтәһе лә шыма ғына барманы. Тәүге осоро, колхоз бар сакта, көн-төн баҫыу эшендә техникала йөрөнө ир кеше. Өйҙәрендә булған техниканы кусты-кейәүҙәре һоранып йөрөгән өсөн, йыш кына ыҙғыш-талаш сыға башланы. «Балаларҙың ауыҙынан өҙөп алып йыйған аксаға алынған мотоциклды, машинаны бирмәйем» тигән бисәһенең күпме илатты. Шул аркала «Беларусь» тракторы ала алмай калдылар. «Һин йүнәтеүсе булырһың, туғандарың алып боҙоп торорҙар, бирмәһәң, барыһына ла дошманға әйләнәһең», – тине катыны. Аҙак балалар ҙурайҙы, уларҙы укытып, күҙле-башлы итеүҙәр башланды, трактор ала алманылар. Хәҙер бесән эшләүе кыйын. Трактор булһа, ире әҙ-мәҙ «калым» да табыр ине.

Шулай ғүмер үтә бирҙе, донъяның һәр кытыршылығы өсөн ireш-талаш була торҙо. Аралар һыуынды. Ире эшкә яраkһыҙлык кенәгәһе алып, өйҙә ята башланы. Кышкыһын рәхәт тә ул. Фәриҙә мәктәптән кайтыуға мал караулы, аш бешкән була. Бына йәй көнө, Фәриҙә отпускыла сакта, бик кыйын. Көнө-төнө ире өйҙә, быҙауҙарҙы карап алып кайтыу, тиҙәк түгеү кеүек вак-төйәк эште үҙе эшләй. Малайына эш юк, уныһы төнө буйы урам кыҙы-



ра, көнө буйы йоклай. Торғас, ҡыбырлай алмай бер килке ултыра әле. Эш ҡушып, тыңлата алмай асыуланыңҡыраһаң, тағы урамға сығып китә. Баҡсаға һыу ҡойоу, картуф утау, ишек алдын һепереү, башҡа мәшәҡәттәр – бөтәһе лә Фәриҙәнең елкәһендә.

«Атанан күргән – уҡ юнған». Атаһының бер нәмәгә дәрте, бер ниндәй маҡсаты, шөғөлө ҡалманы, шулай булғас, балаһы нисек эшкә сос булһын» тигән Фәриҙәгә икәүләп ҡарышалар. Бөтөнләй бер эш ҡыйратмайҙар. «Балсыҡ алып килегеҙ, өйҙөң тышы емерелеп тора, кәртәне һыларға ла кәрәк. Ағас алып, мунса бурағыҙ, мунса иҫкергән», – тип нықышып ҡараһа ла, рәт сыҡманы. Яҡшылап утамағас, һуңғы дүрт-биш йылда картуф ашағандары юҡ тиерлек. Фәриҙә йәй башында иренә: «Фәнил уҡырға инергә имтихан бирергә барһа, көҙ уҡырға китһә, ун биш меңләп аҡса кәрәк була, мунса бурап һат», – тип ҡараны. Бураманы ире. «Машинаның йүнәтә торған нәмәһе күбәйеп китте, уға ла байтаҡ аҡса кәрәк буласаҡ, рам эшләп ҡара», – тип ағас эшкәртеү станогы алып бирҙе. Эшләмәне. Кисә малайҙарын Сибайға алып барып, төнгә сәғәт берҙә ҡайттылар. Китеп барғанда тәгәрмәс тишелгәйне. Ире ҡалала шуны йәбештереп йә камера һатып алһасы һуң! Юҡ бит! Ҡайтып барғанда юлда икенсеһе тишелде. Ире уны ямағансы Фәриҙә: «Машинала ятып торайым, ҡайтҡас һыйыр һауаһы бар», – тип уйлағайны. Ире ишектәрҙе шартлатып асыпябып, һөйләнеп: «Аҡса бирмәйһең, шуға машинаны йүнәтеп булмай», – тип бисәһенә коһорон төшөрҙө. «Дискыһы бөтһә бөтһөн, шул көйө ҡайтам», – тип үҙегенә үтте. Район үҙәгендә йәшәгән ағайына шылтыратып тәгәрмәс алдырҙы. Шулай итеп һоранып йөрөүе эт ботонан да ҡырын бит инде. Шуны аңлата алмай иренә. Ҡайтыуҙарына – һыйырҙары юҡ. Ишек алдында иренең ике кейәүе, һеңлеләренең ирҙәре, араҡы эсергә көтөп торалар. «Еңгәй, сәй эсер», – тиҙәр. «Юҡ, юл буйы ниндәй генә һүҙ ишетмәнем, һеҙҙе өйгә индереп лауылдатып ултыртып ҡуйырға хәлем юҡ, иртәгә эшкә», – тине Фәриҙә. Улары аптырап торманы, хәмерҙәрен ишек алдында ғына төплəп ҡуйҙы. Фәриҙә иренә:

- Ҡалала минең артымдан ҡалмай, юғалтып ҡуймайым тип эҙләп йөрөгәнсе, өйҙә дөрөҫ йәшә. Аҡса эшләмәй, машина йүнәтмәй шулайтып эсеп йөрөһәң, мин ҡалаға эшкә китәм. Биш йыл буйы балаң ҡалала яңғыҙ йөрөгәнсе, янында булырмын, юлға, машинаға аҡса түкмәҫбеҙ, исмаһам, – тине лә, инеп йоҡларға ятты.

Ятҡас, донъяларының үҙгәреп китеү сәбәптәрен уйланы.

...Балаларға, тәҙөнөргә аҡса етһен тип, мәктәптә өҫтәп-өҫтәп дәрестәр ала ине Фәриҙә. Ике смена эшләгән саҡтары ла күп булды. Эштән ҡайтһа, тамаҡ бешермәйһең, тип ире шелтәләй. План яҙырға ултырһа, тик ултыраһың тип бәйләнә, өйҙән ҡыуып сығара. Тышта күпме торорға була, өшөткәс, берәйһенә барып ултырайым тип китә башлаһа, баҫтырып кире индерә. Фәриҙә, үҙе өлгөрә алмай, эш ҡушһа, эшләмәй. Ҡаршы һүҙ әйтһә, төнө буйы йоҡо бирмәй, телевизорҙың тауышын аҡыртып ҡуя.

Шулай ныҡ үҙәктәренә үткән ваҡытта Фәриҙә күршеләренә сыға ине. Унда ҡатынын айырған, Фәриҙәнән бер йәшкә өлкән ир әсәһе менән йәшәй. Һепертке, миндек, утын, бызауға бесән булмаған саҡтарҙа, йәйгә тиклем кәртә таҙаланмай ятҡанда ла йомшай ине күрше ирҙе. Ҡәйнеш тейеш кешенең күрше еңгәйгә тыныс ҡарамауын һиҙмәй түгел, һиҙҙе Фәриҙә. «Ирем рәнйеткәс, өйҙән ҡыуып сығарғылағас, аҙналар буйы тиҫкәре тунын яҙып киймәгәс, ҡәйнеш йыуатһа, йыуаттырам, үсемде алам» тигән ҡарарға килгәйне ҡатын. Шулай килеп сыҡты ла. Бер сыҡҡанында күрше апай өйҙә юҡ ине. «Еңгәй, илама, әйҙә сәй эсәйек», – тип йыуатты күрше ир. Бер-ике йыллап ваҡыт уҙғас, был хаҡта Фәриҙәнең ире лә белде. Билдәле, ҙур янъял ҡупты. Күрше ир ситкә сығып китте.

Ыҙғышлы тормош дауам итте. Фәриҙә эш ҡушҡан һайын талаш сыҡты.

«Һинең менән тормайым, «за выслугу» ала башлаһам, китәм» ти торғас, Фәриҙәнең күңеле тамам башҡаланды. Ире элек-электән бер үсекһә аҙналап яҙылмай ине. Ауылда кис етһә эш күбәйә бит. Сәғәт ун тулып үтеүгә көтөү ҡайта. Һыйырҙарҙы һауып, һөтөн үткәреп, бызауҙарын ҡарап, биҙрә-маҙарҙы йыйыштырып ятҡансы сәғәт бер-ике була. Шул ваҡытта иренә берәй йомош ҡушһа, ыҙғыш китә. «Мин арыным», – ти уныһы. «Таш ҡутарып эшләп ҡайтҡанмы ни, көндөҙ ял итеп алырға ине. Ниндәй эш ҡыйраттың бөгөн?» – тип ҡатыны

үпкәләй. Айырым яталар. Ҡатындың әҙерәк ирен инәлткеһе килә. Ә ире инәлмәй, эргәһенә лә килеп ятмай. Ҡатындың наҙланғыһы килһә лә, мин-минлеген еңә алмай. Иртән торғас, икеһенең дә эшкә дәрте булмай.

Шулай йәшәп ятҡанда гәзиттә өй һатылыу тураһында иғлан баҫылды. «Кейәү менән ҡыҙыма кәрәкмәҫме?» тигән уй менән шылтыратты Фәриҙә. Өй хужаһы йәшлектә яратышып йөрөгән егет булып сыҡты...

Училище тамамлағас, Фәриҙәне бер ауылға эшкә ебәргәйнеләр. Әбей менән бабайҙа фатирҙа торҙо. Йыш ҡына әбей менән күрше апайға кис ултыра сыға инеләр. Уның һигеҙҙе бөткән малайы бар ине. Йәш кеше һаман өлкәндәр менән ултырмай бит инде. Шул малай менән һөйләшкеләп йөрөнөләр, ҡапҡа тышына эскәмйәгә лә сығып ултыра торғайнылар. Эҫенешеп киттеләр. Малай: «Армиянан ҡайтҡас, мин һине кәләш итеп алам, һин көтөрһөң», – тине. Фәриҙә: «Мин һинән дүрт йәшкә өлкән, армиянан ҡайтҡас, бында ниндәй әбей ултыра тип әйтерһең шул», – тип көлдө.

Ауылда өйләнмәгән егеттәр күп ине. Уҡытыусы ҡыҙға күптәр күҙ атты. Һәр кем кәләш итеп алғыһы килде. Урамдан үтергә ирек бирмәй башланылар. Фәриҙәнең бәләкәй ауылда ҡалғыһы килмәне. Бер түйҙа күрше ауыл егете менән танышты ла, ике-өс ай ҙа йөрөмәне, уға кейәүгә сыҡты ла китте. Мөхәббәтһеҙ тормош алға барманы. Кәләш итеп ала алмаған егеттәр ҙә үсләшеп һүҙ йөрөткәндер. Ире баш ауырыуы менән сирләп китте. Дүртбиш йыл торғас, ике балаһы менән иренән әсәләренә ҡайтып китте. Әсәләрендә йыл ярым ултырғас, ҡарт егеткә кейәүгә сыҡты. Аталы-әсәле булғас, эш рәтен беләләр тип, тағы мөхәббәтһеҙ тормошто һайланы. Әсәһе лә: «Ике бала менән һайланып ултыра алмайһың инде», – тигәйне. Иренә эҫенергә тырышты. Уныһы эшкә арыу ғына булһа ла, «врожденный неряха» булып сыҡты. Үҙен ҡараманы, теш йыуыуҙы белмәне. Шулай егерме йыллап бергә тороп ташланылар. Ыҙалай торғас, Фәриҙә иренә эҫенгәйне инде, тик уныһының теше генә түгел, теле лә бик бысраҡ булып сыҡты.

Әле бына шулай йәшәп ятҡанда егерме ете йыл элекке йәшлек дуҫын осратты. Ул бик иркә кинйә бала була торғайны. Шул тиклем теле лә, үҙе лә йомшаҡ, күңелгә ятып ҡына тора. Уның менән күрешеү ҙә ире арҡаһында килеп сыҡты. Ул былай булды. Кесе ҡыҙы кейәүе һәм биш айлыҡ балалары менән ҡунаҡҡа килгәйне. Ҡунаҡ килгәс, бәләкәй бала ла булғас, кейәүе өй төҙөү менән дә булышҡас, мәшәҡәт артты. Эш өсөн тағы ире менән үпкәләштеләр. Ҡунаҡтар барҙа ире дүрт көн буйы тиҫкәреләнеп йөрөнө. Шуға үпкәләп, Сибайға улының документтарын алып барған Фәриҙә дүрт-биш көн ҡайтмай ятты. Унан алда йәшлек дуҫы менән телефондан ғына һөйләшә ине, шунда күрештеләр. Йөҙө тәүҙә ят һымаҡ булды. Ә үҙе... кисә генә айырылышҡандармы ни, йөрәгенә шул тиклем яҡын.

Бер-ике аҙна үткәс, алыҫ районда икенсе ҡыҙы кейәүе менән ҡунаҡҡа килде. Күмәкләшеп өләсәләренә барып килделәр. Фәриҙәнең үҙенең физик эшкә бик барымы юҡмы, шул тиклем арый ине. Ауылда бөтмәҫ-төкәнмәҫ эш бит инде. Фәриҙә алдан уҡ:

- Әгәр Диләләр килгәндә лә тиҫкәре туныңды кейеп йөрөһәң, тағы Сибайға китәм. Улым әҙерлек курсына йөрөр, имтихан бирер, мин ял итермен, – тигәйне.

Ире барыбер үҙен еңә алманы. Өй тулы ҡунаҡ булғанда тумһайып, кәйеф төшөрөп йөрөгәнсе, эш менән булһын ине лә бит. Юҡ шул.

Иренең шул ҡыланыштарына йәне көйөп, улы менән йәнә Сибайға барып һигеҙ көн ятып ҡайтты. Ҡайтҡан көндө үк ире:

«Уйнаш» итеп ҡайттыңмы?» – тип теңкәһен ҡоротто. Элек был һүҙҙәр нахаҡ булғанда бик зитына тейә торғайны Фәриҙәнең. «Һин нимә әйтәһең, инде шуны дөрөҫләккә сығарып йөрөйәсәкмен. Телең менән үҙеңдән биҙҙереп, өйҙән һыуындырып, аҙналар буйы яҙылмай күңелемде башҡаландырып, үҙең генә харап иттең» тип уйланы ҡатын эстән генә.

Хәҙер Фәриҙә һайлау алдында тора. Көн дә үсегеп, айырым йоҡлап, ҡатынына көн-төн һүҙ ташлап, ләкин мал тотоп, һаулығы буйынса пособие алған, әммә аҡса табам тип артыҡ көсәнмәгән ир менән ҡалырғамы (тик был ваҡытта Сибай юлын тапар өсөн аҡса кәрәк буласаҡ), әллә ҡалала эш табып, балалары янында булып, төндәрен һөйәре менән күңел асырғамы? (Был юлы улы янында буласаҡ, көнөнә бер мәртәбә булһа ла уға аш бешереп ашатасаҡ, ләкин фатирға түләргә, унда-бында күсеп йөрөргә, йә ипотекаға өй алырға – барыбер шул аҡсаһыҙлыҡтан интегергә тура

киләсәк). Ире ҡалаға күсеп барырға риза түгел. Һөйәргә ышаныс юк. Ул ваҡытта тик үҙеңә генә ышанырға ҡала. Ә төндәрен? Һауалағы торнаға ышанып, ҡулдағы сәпсекте ысҡындырыу булмаҫмы?

Шулай, йәштән яратышып өйләнешергә һәм ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе һаҡларға кәрәк икән. Ҡайһы бер кешеләр тыуғанда уҡ ниндәйҙер аҡыл менән тыуа, ҡайһыларына ғаиләлә ниндәйҙер тәрбиә һалына, ә ҡайһы берәүҙәр, Фәриҙә һымаҡтар, ғүмер буйы төрлө яҡҡа бәргеләнеп, көстәрен юҡҡа сарыф итә.

Ғүмер аҙағында ышаныслы ла, күңелеңә май булып яғылған, һинең һәр һүҙеңде, теләгеңде аңлаған, балаларыңа ярҙам итергә әҙер торған тормош иптәшең булһын өсөн, йәштән үк шуға ынтылырға, көндән-көн шул йүнәлештә эш алып барырға, көсөңдө юҡ-бар талаш-ыҙғышҡа әрәм итмәҫкә кәрәк булған да бит. Уның өсөн бик ҙур түҙемлек, рух көсө, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ кәрәктер. Хәҙер уларҙың күбеһе юғалтылған. Ике арала наҙ ҙа юҡ, ирҙең теле тағы ла нығыраҡ боҙолдо, холҡо тиҫкәреләнде, ҡатындың түҙемлеге ҡалманы.

Егерме ете йыл элек күрше егеттең: «Армиянан ҡайтҡас, мин һине кәләш итеп алам», – тигәнендә, «Минең принцибым: һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сәпсекте ысҡындырма», – тип яуап биргән ине лә, әле: «Әллә торнаға ынтылып ҡарарғамы?» – тип йөрәк һыҙылып-һыҙылып ҡуя...

*В. ҠЫРЫМҒУЖИНА.*



## ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ ҮСЕ НИМӘҺЕ МЕНӘН ҠУРҠЫНЫС?

**Бер нисә мең йәш парҙың тәртибен, ҡыланышын, ҡылығын тикшергәндән һуң, Гарвард университеты психологтары шундай һығымтаға килгән: ҡатындар асыуҙан ярһып, контроль юғалтҡан мәлдәрендә ирҙәренә ҡул күтәрә тигән фекер – хата.**

**Киреһенсә, улар һалҡын ҡанлы һәм иҫәпсел, иренә һуға йә ташлай торған предметты алдан уйлап һайлай һәм бер ваҡытта ла үҙе ҡәҙерләп тотҡан вазаһы йә һауыт-һабаһы менән киҙәнмәй.**

**Ҡатындар нығыраҡ үс алыу өсөн тән йә бит өлөшөн дә алдан уҡ уйлап ҡуя икән. Ҡайһылыр осраҡта уға иренең йөҙөндә "фонарь" күренеүе мөһим, ҡайһы берендә тән йәрәхәте... һәм, "Тиҙ ярҙам" хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, йәрәхәтләнгән ирен дауаханаға ҡатыны үҙе үк алып бара...**

**Бөтә ғилләкатындарҙың асыуын оҙаҡ һаҡлауында. Беренсенән, уның иренең әлеге хыянаты өсөн йәне көйә, икенсенән, шуның менән ул элекке ҡылыҡтарын да ҡатынының иҫенә төшөрә. Был инде асыуҙы көсәйтә генә...**

# КАЛЕНДАРЫ. 2011



| ИЮНЬ | ИЮЛЬ | АВГУСТ | СЕНТЯБРЬ | ОКТЯБРЬ |
|---|---|---|---|---|
| (6, 9, 15) (22-24) 28, 30 | 5 (8, 9) (21) | (1-4, 16, 17) 20, 22, 23 | | |
| (6, 8, 9) 20-23 (28-30) | **1-3 (13-15) 21-23** | 4-6 (15-17) 25, 26 | 5-7, 9, 10(15-17) 22, 23, 30 | (2, 9, 15) 22-24 |
| (4-6) 21-24 (28-30) | 5, 7, 8 (14-17) 22-26 | (2, 4-6) (16-18) 23, 25, 27 | 6-11, 15-17, 19 (23, 29) | 1, 2, 4, 28, 29 |
| 6, 9, 10 (16, 22) 29, 30 | (5, 8) 14, 15, 17 (22-25) | 4, 5, 6 (12, 14) (17) 25-27 | (15-19) 29, 30 | 2, 9, 15, 22 (16-19) |
| (4, 5) 14-17 (23, 24, 28, 29) | 6, 8, 18 (14-17) 22, 23 | 3-6, 11, 14, 15 (26, 27) | 1, 2, 6, 7 (21, 29, 30) | |
| (8-11) 22-24 (29, 30) | 5-8 (9) 14-17 | 4, 5(12, 13, 16) 21, 22, 27 | (2, 3, 23, 24) 29, 30 | |
| (5, 6) (14-15) 28, 30 | 3, 14, 15 (18) 21-25 | (4-6) (17, 18) 23, 25 | 2, 5-7 (18, 29, 30) | 2, 16, 20 (28-30) |
| (4) 23, 24, 29, 30 | 8, 9, 16 (22-24) 27, 28 | 4, 6, 16, 17 21-23 (26, 27) | 3, 6, 16, 30 (21) | 9, 10, 16 (29, 30) |
| 5, 10, 11 (28-30) | 3, 15-18, 22, 23 (28-30) | (1, 2, 5, 14) 20-22 (23, 26) | 1, 2, 23, 24 (29, 30) | |
| 4, 6, 16, 24 (28, 29) | (1-3) 14-17 (22, 23) | 3-6 (10-13, 17) 22, 27 | (1-4, 30) 29, 30 | 2-5, 9, 21 (29, 30) |
| 4, 6 (14, 15) (22, 24) 28-30 | (8, 9, 14) 17, 18 (22, 23) | 16, 17 (25, 26) | (1-3) 29, 30 | 2-4, 9, 10 (16-19) |
| (4-6) 9, 10 (22-24) (29, 30) | (1, 2) (8, 9) 24, 26-30 | 3-6, (10-12) 21, 22, 24, 27 | 5, 7, 9 (18, 19) 24, 30 | |
| (13-17) 22-24 (28, 29) | (5, 8, 9) (22-24) 27-29 | 1-3, 16, 17 (21, 22) 26, 27 | 5-7, 9, 10 (16-18) 29, 30 | |
| 5, 6, 10, 11 (22-24) | (2, 3) 8, 9 (25-29) | 1-4, 6, 11, 12, 15 (21, 22, 24) | 1-4, 6, 15, 28 (20-23) (24, 29) | |
| 6, 8, 14, 15 (29) | (8, 9) 14-17 | (2-6) (16, 17) 21, 26 | (3, 5, 7) (15, 22) 24, 29 | |
| 5, 6, 16, 23 (29, 30) | 1, 2 (8, 9) (29, 30) | 1-5, 16-18 (23, 27) | 1-3, 8 (23, 24) (29, 30) | |
| 4-6, 22-24 (28-30) | (6-8) (13-16) | (5, 16, 17) 20, 26, 27 | (5-7, 10, 11) 22, 29, 30 | 2, 9, 16-18 (28-30) |
| (5, 9) (23) 29, 30 | (7, 8) (16, 17) 22, 23 | 4, 5, 17, 18 (22, 25, 27) | 1, 3-5, 9, 29, 30 (23, 24) | |
| (9-11) (21-23) 28-30 | 5, 6, 8 (9, 13) 21-23, 28 | (5, 11, 14) 12, 13, 22, 23 | 5, 6, 11, 17 (10, 29) | 1-5, 9, 20 (23, 29, 30) |
| 5, 6, 15 (22-24) 30 | 5, 9, 15-18 (23-25) | 1-6, 12-17 (23, 24) | 1, 2, 17, 30 (23, 24) | 2, 16, 21-23 (25, 28) |
| (5, 22 (23) 28-30) | 3, 8, 14 (22-23) 27, 82 | 12, 14, 23 (22, 27) | (5-7, 10) (20, 21) 29, 30 | 3-5, 7, 8 (29, 30) |
| (6) 22-24 (29, 30) | 1, 2 (16, 17) 23, 25, 30 | 2, 5, 14, 21 (22-24) | 5-7, 21-24 (17, 18, 30) | |

*Йәйәләр эсендә – уңышлы көндәр.*

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 1, 2, 7, 12, 18, 26, 27 | 4, 10-12, 19-20 | 7, 8, 19, 28, 29 | 12-14, 25-27 | 11-13, 26, 27 |

Төп кәңәш: тәү сиратта агротехник эштәргә иғтибар итегеҙ. Ерегеҙ насар эшкәртелһә, орлоғоғоҙ сифатһыҙ булһа, һауа һәм климат шарттары иҫәпкә алынмаһа, бер ниндәй ҙә астрология ярҙам итмәҫ.

2011 йылда һеҙгә мул уңыш теләйбеҙ!







Рәсүл Сәғитовты йәмәғәтселек ошоғаса журналист, яҙыусы тип белә ине, бөгөн уның фото сәнғәте яклап та ижади кеше икәнлеген иғлан итергә булдыҡ. Фото төшөрөү уның өсөн яңы шөғөл түгел, бик күптән, үҫмер саҡтан килгән мауығыу икән. Алтынсыла уҡығанында үҙе утын ярып эшләгән аҡсаға «Смена-8М» «уйынсығын» “Посылторг” аша яҙҙырып ала.

“Күңелемә ике күренеш яҡын – ҡаялар һәм юлдар. Ҡаялар мәсьәләһенең сәбәбе ябай – Бөрйәндә, шул иҫәптән мәғрур ҡаялар илендә тыуып үҫеүем. Ә юлдар минең өсөн – тормош, хәрәкәт, алға барыу”, – ти Рәсүл.



## Рәсүл СӘҒИТОВ

















шоңҡар

# БАҠСАСЫНЫҢ АЙ



| КУЛЬТУРА | ФЕВРАЛЬ | МАРТ | АПРЕЛЬ | МАЙ |
|---|---|---|---|---|
| Ҡарбуз | 6-9 (11-14) (27-29) | 1, 6-10 (11,12) (22,23) | 1, 2 (5-7) (28-29) | 6, 12-14 (15) 26, 27, 29 |
| Баклажан, ташкабак, патиссон | (5-7) 20, 22-25, 27 | 6, 9, 10 (11, 12) (20-22) | (1, 2) 5, 7 (20, 21) | 2, 4-6 (15, 18, 19) 26, 27 |
| Шалкан | | (6-10) 11, 12, 14 (20) | 5-7 (10-15) | 5, 6, 18-20 (26, 27-30) |
| Борсаҡ, фасоль | | (5, 6) 7-12 20, 23 | 1, 6, 7 (15-17) | 6, 8, 12-14 (26-30) |
| Кәбеҫтә, төҫлө кәбеҫтә | (6, 9, 12-15) 24-27 | (1-3) 6-9 (21-23) | 1, 2 (5-7) 11-15 | (5, 6, 8, 13, 15) 23, 26, 27, 29 |
| Картуф, топинамбур | | 7-9, 12, 15 (20, 22) | 1, 2, 6, 7 (12-14, 16, 17) | (5-8, 13) 14, 15 (26, 27, 30) |
| Бакса еләге | (5, 8, 9) (11, 15) 23, 24 | | (1, 2) (6, 7) 12-15 | (12-15, 20) 25-30 |
| Кресс-салат | | 1, 2, 5, 6 (9, 11) 21, 22 | 1, 2 (6, 7) (11, 12, 14, 16) | (5-7) 13-15 26, 27, 29 |
| Йәшел һуған | | (7, 8, 9) 10, 11, 20-23 | (2) 6, 7 (12-14) | (2) 13-15 25, 26, (27-30) |
| Һуған | | 5-9, 11, 12 (20-22) | 1, 5, 7 (11-16) (29) | 5, 12-15 (25-29) |
| Кишер, ҡуянтубыҡ | | (1-3) 5, 6, 9, 10 (20-23) | (1, 2, 5-7) 10, 20, 21, 30 | 2, 5, 6, 8, 26 (12, 13, 25, 29) |
| Ҡыяр | 6, 9, 10 (22, 24, 27) | 5-8 (9-11) 21, 22 | 1, 6, 11, 13, 14 (5, 12) (15-17) | (2, 8, 15) 12, 13 26-29 |
| Татлы борос | (8-10) (21, 23, 24) 28 | 1, 2 (5, 6) (11, 12) 27 | (1, 5-7) 10-14 (20, 21) | (5-7) 13-15, 25-29 |
| Помидор | 6, 7 (12, 13) 22-26 | 1, 2, 5, 6 (11, 12) 13, 14 | 1, 10-13, 16 (6, 7) (20, 21) | 2, 5 (14, 15, 24) 26, 27 |
| Редис | | 2, 6, 7 (9, 10, 11) 20-22 | (2, 5-7) 11-17 | (5-6) (18, 19) 24-28 |
| Торма | | (5-8) 10, 11, 20 (26, 27) | 1, 2, 6, 12-15 (16, 17) (29, 30) | (5-7) (20, 24, 25) 28-30 |
| Һарымһаҡ | | 7, 8, 9, 10 (12-14) | (1) 5-7, 12-17 | 5, 6 (12-15) 23-27 |
| Әсе борос | 7, 8, 12 22, 23, 26 | (6-8) 12-14 | 5, 6, 7, 11, 12 (15-17) 30 | 2, 6, 7 (13-15) 27-29 |
| Петрушка | | 1, 2, 8, 9, 11 (5, 6) 20, 22 | (1, 2, 10-12) 16, 17, 28-30 | (5, 6) 23, 25, 26, 30 |
| Укроп, фенхель | | 6-12 (20, 21) | 5-7, 14-16 (20, 21) | 6, 7 (19, 20) 25-29 |
| Һуғанлы сәскәләр | (6, 7, 10) 11-14 | (5, 6) 10, 12, 20 | (1, 5, 7) 16, 17, 29, 30 | 5, 6, 14 (13-15, 20) |
| Орлоҡло сәскәләр | 6, 7 (12, 13, 21) 27,28 | 5, 6 (8-10) (20-22) | 1, 2, 7-12, 15, 17 (20, 21) | (8) 28-30 |
| *Йәйәләрҙәге – үҫентеләрҙе ултыртырға һәм күсереп ултыртырға кәңәш ителгән иң уңышлы көндәр.* | | | | |
| Сәсеү, ултыртыу һәм күсереп ултыртыу өсөн тыйылған көндәр | 1-4, 17, 18, 19 | 4, 16, 17, 19, 24, 25, 28-30 | 3, 4, 8, 9, 18, 19, 22, 23, 25, 27 | 1, 3, 9-11, 16, 17, 21, 22 |

# ӨР-ЯҢЫНАН ТЫУҒАС ДОНЪЯҒА...



**Әҙәм балаһы ике тапҡыр тыуа, тиҙәр: әсә йөрәге аҫтында яралып донъяға аүаз һалғас һәм асылына, тәғәйенләнешенә төшөнгәс. "Икенсе һулыш"тың йылдар үткәс, ә ҡайһы бер осраҡта сәстәргә сал төшкәс кенә үҙе хаҡында белгертеүе, хатта бөтөнләй асылмауы ла ихтимал. Күгәрсен районы Үрге Бикҡужа ауылында ғүмер кисереүсе Риф БИКБАЕВ та ҡырҡты үтеп, йөрәк түренән урғылып сыҡҡан көй-моңдарын күңелен һалып, әрнеү-һағыштарын, эске кисерештәрен ҡушып яңғырата башлағандан һуң ер йөҙөнә өр-яңынан яралыуын аңлаған.**

2008 йыл... Ярайһы ғына тормош тәжрибәһе туплап, донъя гиҙеп, үҙен тәрлә өлкәлә һынап ҡараған ир-уҙамандың күңелендә ҡапыл бушлыҡ хасил була. Тәүге ҡатыны менән ҡорған ояһының селпәрәмә килеүе, ауылдаштарының әкренләп эскелек һаҙына батыуы, ете күршеһенең төрлө сәбәптәр арҡаһында бер-бер артлы якты донъя менән хушлашыуы, ауыл тирәләй шаулап ағып ятҡан Ағиҙелдең быуылыуы кескәй сағынан уҡ моңға тартылған Рифте бөтмәҫ-төкәнмәҫ һағышҡа һала. Һәм бер кисте ниндәйҙер сәйер көс уны урамға әйҙәй. Ышаныргамы быға, юкмы, әммә, Риф үҙе һөйләүенсә, ҡапыл тирә-яҡтағы тауҙар геүләргә тотона, тәне земберләп китә һәм күңелендә бер-бер артлы уйҙар ярала. Улар, әйтерһең дә, ниндәйҙер юғары бер көс тарафынан яуҙырыла: "Әруахтар зыяратты кәртәләүҙе һорай", "Быйылдан да ҡалмай мәсет төҙөү фарыз", "Халыҡтың йөрәгенә үтеп инерлек йырҙар ижад итергә"... Ошо мөғжизәле кистән һуң уның тормошо яйға һалына башлай. Шул төндә үк күңелендә "Булмаһын юғалтыуҙар" йырының көйө тыуа. "Һүҙҙәре лә ҡолаҡ төбөндә яңғырағандай ине", – ти ул. Әммә тулы ҡанлы шиғыр килтереп сығара алмауын аңлағас, Йомағужа ауылында йәшәүсе сәсән телле якташы Зилә Янбулатованан шиғыр яҙып биреүен үтенә. Һәм бер нисә көндән йыр әҙер була. Зыярат хаҡындағы уй ҙа күңеленә тынғы бирмәй Рифтең. Оҙаҡҡа һуҙмай ғына ауыл муллаһын күреп һөйләшә. Бергәләшеп өйҙән-өйгә йөрөп хәлде аңлатып бирәләр. Һәм, күп тә үтмәҫтән, ауылдаштары менән берлектә зыяратты кәртәләп тә ҡуялар. Ә бер ни тиклем ваҡыттан һуң Марс Юлбарыҫов исемле хәлле генә якташтары ауылға мәсет һалдырырға ниәтләүе хаҡында хәбәр итә. "Өс кеше нигеҙен ҡаҙыныҡ, алтаулашып бураһын күтәрҙек", – ти ул. Ошо хәлдәрҙән һуң ауылдаштары Риф Бикбаевты бер тауыштан депутатлыҡҡа һайлап ҡуя. Ҡапыл тормошона йән инеп, бер-бер артлы йырҙар ижад итеп, уларҙы үҙе үк башҡарыр-




ға тотона ул. “Шулай ҙа баштараҡ үҙебеҙҙең ауылда йырларға ояла инем. Йомағужала сығыш яһаным”, – ти Риф. 2008 йылдың аҙағында ул – “Күгәрсен һандуғасы” конкурсында, 2010 йылда “Юлдаш йыры” үҙешмәкәр йырсылар бәйгеһендә лауреат исемен яулай. Бөгөн Рифтең “Сорғояҙ моңдары” тип исемләнгән төркөмө бар. Улар башлыса Күгәрсен һәм Мәләүез райондарында концерттар менән йөрөй, туйҙарҙа, юбилейҙарҙа, корпоратив кисәләрҙә һәм башҡа мәжлестәрҙә сығыш яһай.

* * *

Күптәрҙе Рифтең элекке тормошо, уның ниндәй һөнәр эйәһе булыуы ҡыҙыҡһындыра торғандыр. Әйткәс-әйтәйек: ул – оҫта тегенсе. Ҡасандыр баш ҡаланың унынсы һөнәрселек училищеһын тамамлаған, Өфөләге “Мир” фабрикаһында, Мораҡтағы тегеү цехында эшләп тәжрибә туплаған. Заманында ауылдаштарына кейем-һалым тегеп һатҡан, кул эштәрен аҙыҡ-түлеккә, башҡа кәрәк-яраҡҡа алмаштырған. Ошо һөнәре уға матди хәлен бер ни тиклем яҡшыртырға, йорт-ҡураһын тергеҙергә ярҙам иткән. Йәштән үк йырсы булыу хаҡында хыялланған егетте һөнәрселек училищеһына, ҡасан да булһа сәхнәгә сығырға тура килә ҡалһа, костюмдарҙы үҙем тегермен, тигән маҡсат алып килгән. Хәл былайыраҡ булған: тыуған ауылында бишенсе класты тамамлағандан һуң, ата-әсәһе йыр-моңға маһир Рифте Өфөләге Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге интернат-мәктәпкә биргән. Унда уҡыу дәүерендә малай ҡурайҙа, гармунда, пианинола, тынлы инструменттарҙа уйнарға өйрәнгән. Бала сағында моңло итеп йырлауына ҡарамаҫтан, егет ҡорона ингәс ҡапыл ғына тауышын юғалта. Унынсыны тамамлағандан һуң Санкт-Петербург хәрби училищеһы оркестрында хеҙмәт итә. Әрменән ҡайтҡас, үрҙә әйтеп үтеүемсә, тегенсе һөнәрен үҙләштереп, ошо өлкәлә бер йыл самаһы эшләй. Артабан Өфө дәүләт сәнғәт институтының әҙерлек курстарында вокал буйынса дәрестәр ала. Әммә, нисек кенә тырышмаһын, тауышы асылмағас, яҙмышына буйһоноп тыуған яғына ҡайтырға мәжбүр була егет кеше. Был юлы ла, әкиәттәге Әминбәк һымаҡ, ауылға һөнәрһеҙ ҡайтыуҙы хуп күрмәй. Сөнки эш юҡлығын яҡшы аңлай. Хәҙер инде бәйләү курстарына яҙыла, универсаль бәйләү машинаһы һатып ала. Йәнә массаж серҙәрен үҙләштерә. Шунда ла ғәжәп хәлгә тарый Риф: ауылға ҡайтһа, әсәһе быуындары һыҙлап атлай алмай түшәктә ятҡан, имеш. “Көнөнә өс тапҡыр массаж яһап, бер аҙна эсендә әсәйемде аяҡҡа баҫтырҙым”, – ти ул. Әйткәндәй, өлкән йәштәге әсәһен бөгөн дә массаждар менән дауалай икән.

Шулай итеп, Риф ауылға ҡайтып һәүетемсә генә йәшәп китә. Әммә тора-бара төрлө кейемдәр тегеп, свитерҙар, ойоҡ-бейәләйҙәр бәйләп һатып ҡына ҙур килемгә өлгәшеп булмағанлығын аңлай. Һәм бер дуҫы уға селек һепертке бәйләп тапшырырға тәҡдим итә. Өфөлә, Санкт-Петербургта йәшәп ярайһы ғына тел сарларға өлгөргән Риф Салауат ҡалаһына барып бер нисә завод менән һөйләшә лә уларға селек алып килеп тапшыра башлай. Был эш кейем тегеүгә ҡарағанда еңелерәк тә, килеме лә күберәк сыға. Һуңынан Салауат һәм Мәләүез ҡалаларындағы мунса хужалары менән дә килешеү төҙөп, уларҙы миндек менән тәьмин итеүгә тотона. Һалабаш батырып, бумала яһап һата. Ғөмүмән, хәрби хеҙмәттән һуңғы йылдар ваҡиғаларға бай була. Риф өйләнә, ҡыҙҙары донъяға килә. Эйе, тормошта төрлө хәлдәр осрай. Ғаиләләре тарҡалыуға ҡарамаҫтан, тәүге ҡатыны менән туғандарса мөнәсәбәттә ғүмер кисерә улар.

* * *

Геройыбыҙҙың үткән тормошо хаҡында бына ошоларҙы телгә алырға булыр ине. Ә хәҙер бөгөнгөгә, йәғни теге мөғжизәле кистән һуңғы ваҡиғаларға әйләнеп ҡайтайыҡ. Шулай итеп, Риф үҙ төркөмөн ойоштора. Байтаҡ йырҙар ижад итеп ташлай. Уларҙы яҙҙырырға уға билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев ярҙам итә. “Роберт менән таныш та түгел инек, дуҫтарымдың береһе уның ауылда йәшәп ижад итеүселәргә ярҙам ҡулы һуҙырға тырышыуын әйтте һәм ҡурайсының телефон номерын бирҙе. Шылтыраттым. Изгелекле егет икән. Үтенесемде кире ҡаҡманы. Йырҙарымды яҙҙырырға ярҙам итте. Шулай уҡ Юлай Үҙәнбаев менән Азамат Йәғәфәровҡа ла рәхмәтемде еткерәм”, – ти йырсы. “Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә” тиҙәр. Күгәрсен һандуғасының йыш ҡына Өфөгә юлы төшөп тора. Бер көндө “Булмаһын юғалтыуҙар” йырын “Юлдаш” радиоһына тапшырып баш ҡаланан ҡайтыуына яҙмыш уға йәнә бер бүләк әҙерләп ҡуя. “Өйҙә йәш кенә бер ҡыҙ ултыра ине. Әсәйем уны беҙҙең ҡунаҡ, исеме Таңсулпан булыр, тип таныштырҙы. Баҡһаң, ул ваҡытлыса беҙҙә фатирҙа тороусы бейеүсе ҡыҙыбыҙҙың һеңлеһе икән. “Бирәм тигән колона, сығарып ҡуйыр юлына”. Был тормошта осраҡлыҡтар булмай. Әлеге ҡыҙ минең тормош иптәшем булып китте. Йәш араһы 21 йыл булыуға ҡарамаҫтан, татыу ғүмер кисерәбеҙ. Тәүге никахымдан тыуған ҡыҙымды ла яҡын күрә”, – тип бәйән ҡылды йырсы.

* * *

Риф Бикбаев үҙенсәлекле тауышлы башҡарыусы ғына түгел, тәрән аҡыллы философ та. Тыуған халҡының фольклоры, тарихы менән ҡыҙыҡһына. Бөгөнгө йәшәйешебеҙҙең сетерекле мәсьәләләре, башҡорт халҡының демографик хәле, йәш быуындың ата-бабаларыбыҙҙың тормош принциптарынан алыҫлашыуы, милләттәштәребеҙҙе нисек тә булһа үҙ асылына яҡынлаштырыу хаҡындағы уйҙар тынғы бирмәй уға.

- Халҡыбыҙҙың милли йолаларын һағынам. Ата-бабаларыбыҙҙың фәлсәфәһе етмәй бөгөн. Ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙландың башҡорттар йәшәгән төйәккә аяҡ баҫҡас, бындағы икһеҙ-сикһеҙ туғайҙарҙы, мул һыулы йылғаларҙы, көтөү-көтөү йылҡы малын, кешеләр араһындағы күркәм мөнәсәбәтте, матур-матур йолаларҙы күреп, ошондай тормошто беҙҙә ожмах тип һөйләйҙәр бит, тип ғәжәпләнеүендә тәрән мәғәнә бар. Ысынлап та, борон халыҡ йола менән йәшәгән. Тол ҡатындар, йәтимдәр булмаған. Эскелек һәм аҙғынлыҡ тураһында был осраҡта һүҙ йөрөтөү ҙә урынһыҙ. Ә ниндәй белемле аҡыл эйәләребеҙ, әүлиәләребеҙ, имселәребеҙ булған беҙҙең? Ҡайҙа улар бөгөн? Ни өсөн шундай көс юғалды? Сөнки күңелдәр бикләнде. Тәбиғәт менән гармония юҡҡа сыҡты. Әлбиттә, боронғоса йәшәргә кәрәк, тип әйтергә теләмәйем. Әммә шул принциптарға хыянат итмәҫкә тырышһаҡ ине. Әкиәттәрҙәге "көн үҫәһен ай үҫкән" тигән һүҙҙәрҙе хәтерләйһегеҙме? Бөгөн шундай тиҙлек менән йәшәйһе заманға аяҡ баҫтыҡ. Нимәгәлер өлгәшеү өсөн иң тәүге сиратта рух сәләмәтлеге талап ителә. Халыҡҡа ыңғай миҫалдар килтереү кәрәк. Телевидениела үҙебеҙҙең кәсептәрҙе тергеҙеү буйынса тапшырыуҙар күрһәтелһен, матбуғат саралары аша уңышлы кешеләр тәжрибәләрен уртаҡлашһын ине. Һәм, әлбиттә, йәш быуында телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләргә, лидерҙар үҫтерергә кәрәк. Мин башҡорт халҡының алдынғы ҡарашлы, көслө һәм берҙәм милләт булып ҡалырына ышанам. Быны өсөн беҙгә иң тәүге сиратта асылыбыҙға ҡайтыу фарыз. Ҡабатлап әйтәм, был һүҙҙәрҙе туранан-тура мәғәнәлә аңларға ярамай. Иң мөһиме, үҫеш булырға тейеш, бөтә өлкәлә лә. Әйтәйек, минең милли орнаменттар менән биҙәлгән көндәлек тормош өсөн тәғәйенләнгән кейемдәрҙең эскиздарын эшләп сығарырға һәм теген ҡарарға тигән уйым бар. Кемдер башҡа төрлө идеялар менән яна. Хыялдарҙы тормошҡа ашырырға ҡуркмаһаҡ ине. Үҙ мәҙәниәтебеҙҙе, үҙ зауыҡтарыбыҙҙы үҙебеҙ үҫтермәһәк, беҙҙең өсөн быны кем эшләр? Һәм, әлбиттә, башҡорттар аҡсалы милләт булырға тейеш. Сөнки аҡса – ул энергия, – тигән фекерҙәрҙе еткерҙе.

Ә йыр уға ни өсөн кәрәк? Иң тәүге сиратта – дуҫтары күберәк булһын өсөн. Дан ҡаҙаныуҙы маҡсат итеп ҡуймаған Риф. Уртаҡ фекерле кешеләрҙе бер тирәгә туплау һәм халыҡ менән бәйләнеш тотоу өсөн ошо юлды һайлаған. Үҙ төркөмөнә матди йәһәттән насар тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән йәштәрҙе туплаған һәүәҫкәр йырсы. Уларға сәхнә кейемдәре тектергән. Хатта бәғзеләрҙе үҙендә йәшәткән осраҡтары ла булған. "Төркөмдәштәремде йырсы итеү маҡсаты менән тупламаным, күңелдәре, һәләттәре асылып, тормошта үҙҙәренә файҙа килтерерҙәй һөнәр һайлауға булышлыҡ итергә теләнем. Сөнки йыр илаһи бер көскә эйә, ижад менән шөғөлләнгән кешенең быға тиклем үҙе хаҡында һиҙҙермәгән һәләте асылыуы ла ихтимал. Мин уларға тормошҡа асыҡ күңел менән баҡырға, кешеләр менән аралашырға ярҙам итергә тырышам. Төркөмдә төрлө һөнәр эйәләре бар. Ғөмүмән, йырлай башлағандан алып аралашыу даирәм бермә-бер артты. Үҙ алдыма кешеләргә асылырға ярҙам итеү, шағир менән композиторҙы, йырсыны осраштырып, уларҙың ижад емешен халыҡҡа сығарыу маҡсатын ҡуйғанмын", – ти Риф. Был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк юҡ түгел. Әйтәйек, уның шәхси предприятие асып, биш-алты тапҡырға осһоҙ хаҡҡа аранжировкалар эшләргә йыйыныуы ла йәштәргә күтәрелергә булышлыҡ итеүе хаҡында һөйләй. Үҙҙәре хәбәр итеүенсә, улар ойошторған концерттар ҙа башҡаларҙыҡына оҡшамаған. "Халыҡты транска индерәбеҙ. Зал менән эшләргә тырышабыҙ", – ти улар.

Бөгөнгө геройыбыҙҙың тормош юлы менән танышҡас, ғәжәпләнеүселәр, уның йәшәйеш принциптарына, тормошондағы хәл-ваҡиғаларға сәйерһенеп ҡараусылар ҙа табылыр. Әммә былар уйҙырма түгел. Һәр хәлдә, геройыбыҙҙың үҙе тарафынан һөйләнгән төшөнсәләр. Әлбиттә, Риф һымаҡ кешеләр тормошта күп түгел. Әммә ундайҙар бар. Уларҙан бөркөлгән яҡтылыҡ беҙҙең күңелдәргә лә йоҡһон. Аҙға булһа ла көҙимге тормошобоҙҙан арынып, тирә-йүнгә күҙ һалайыҡ. Иң мөһиме, шуны хәтерҙән сығармайыҡ: был тормошта мөғжизәгә урын бар. Һәм һәр кем уны үҙе тыуҙырырға һәләтле.

***Г. БАТЫРШИНА.***



# ЛЕОНИД ЛЕОНОВ:

# «КҮҘҘӘР — БАРИН, ҠУЛ — ХЕҘМӘТСЕ...»

Уҙған быуаттың алтмышынсы-етмешенсе йылдары... Комсомолдың һәм Яҙыусылар союзының әҙәби алмаш үҫтереү мәсьәләләренә йөҙ менән боролған сағы. Баҡһаң, шул осорҙа “Йәш гвардия” нәшриәтенең баш мөхәррире вазифаһын башҡарған Валентин Осипов (хәҙер ул Рәсәй Яҙыусылар союзының Юғары ижад советы ағзаһы) Бөтә Рәсәй Шолохов премияһы лауреаты — мәшһүр яҙыусы **ЛЕОНИД ЛЕОНОВ** менән төрлө йылдарҙа булған әңгәмәләрен өлгөргән тиклем блокнотына теркәп барған икән. Ана шул әңгәмәләр “Литературная газета”ның 2007 йылғы 19-25 сентябрь һандарында баҫылып сыҡты һәм ул битте һаҡлағанмын. Түбәндә әлеге яҙмаларҙан иң фәһемле өҙөктәрен тәржемәләп, “Шоңҡар” уҡыусыларына тәҡдим итмәксемен.

... Әйткәндәй, нәҡ шул осорҙа СССР яҙыусыларының оло бер форумында рус совет әҙәбиәте аҡһаҡалы Л. Леонов юғары граждандылыҡ пафосы менән түбәндәгеләрҙе еткергәйне: “Яҙғандарым былай ҙа күп сыҡты. Туҡһан йәшлек юбилейыма биш томлыҡ әҫәрҙәрем йыйынтығын сығарырға ниәтләйҙәр. Рәхмәт. Ләкин мин баш тартам. Сөнки биш томым урынына биш йәш авторҙың китаптары сығыуын теләйем”. Заманында ошо уҡ гәзиттә баҫыла әлеге белдереү. (Һәм күңелдә сәйер генә һорау тыуа: башҡорт әҙиптәренең берәйһе ауыҙынан ишетелгәне булдымы, булырмы былай фекерҙең?)



ҠЫҪҠАСА БЕЛЕШМӘ:

Л.М. Леонов (1899 – 1994). Академик, Социалистик Хеҙмәт Геройы. СССР Дәүләт һәм Ленин премиялары лауреаты. Повестары, романдары, драмалары, фәлсәфәүи мәҡәләләре күп телдәргә тәржемә ителгән. Иң күренекле романы, әлбиттә, “Рус урманы”.

# ӘҘӘБИ ТЕХНОЛОГИЯ СЕРҘӘРЕ

Мин үтә ваҡ хәрефтәр менән яҙам. “Микроб почергы” өсөн хатта мине Горький битәрләй торғайны. Ваҡ хәрефтәр менән... яҙғандарымдың апаруҡ өлөшө күҙ алдында булһын өсөн яҙам. Шул саҡта эпизодтың тотош логикаһын өҙлөкһөҙ фекерҙә тотам һәм деталдәрҙең дөрөҫ бирелеү-бирелмәүен күҙаллайым.

Күсереп яҙырға, күп тапҡырҙар күсереп яҙырға! Әҫәрҙе күсереп яҙырға өйрәнер кәрәк. Был әйтер уй-ниәтеңде (замысел) логик баҙыҡлыҡҡа һәм бөтөнлөккә еткереүгә булышлыҡ итә.

Тимерҙәй ҡаты режим! Эшкә һәләтлек, һаулыҡ... Спортсы өсөн былар мөһим икән, беҙҙең өсөн – икеләтә.

Гелән ҡул менән яҙам. Күҙҙәр – һәр саҡ барин, ә ҡул – хеҙмәтсе. Перо менән хәрефтәрҙе теҙәһең дә бер нисә ҡат күсереп яҙаһың икән, артыҡ “йөк”тө тегенән бында күсереп йөрөтөргә йыбандыра башлай.

Мин күптән инде француз Жюль Ренарҙың кәңәшен ятлап алғанмын: “Әҙәбиәтте эш үгеҙҙәре генә барлыҡҡа килтерә ала. Иң көслө үгеҙҙәр – генийҙар, улар ҡул ҡаушырмай ун һигеҙ сәғәт буйы эшләй”.

Яҙыусы шөғөлө, миңә ҡалһа, тәфтишсе һөнәренә бик яҡын тора. Үҙең һайлаған тормош ҡатламын бөтә донъяуи процестар бәрелешендә тикшергәндән һуң ғына публикаға тәҡдим итеү зарур. Материал еңел үҙләштерелһен, ышандырһын, һығымтаға уҡыусы үҙе килһен. Уны һөйләмдәр арҡаны менән дөрөҫ һығымтаға һөйрәкләргә ярамай, уҡыусы нәк шуны яратмай ҙа инде.

Яҙған саҡта үҙ халҡың хаҡында уйламай яҙыу, ай-һай, ҡурҡыныс. Яҙғанда үҙ иленең тарихы өсөн яуаплылыҡ хаҡында уйламауҙары ла шулай уҡ хәүефле. Һөнәре беҙҙең төп принцибы булған шәхсән булмышыңды асыуҙа атай-олатайҙар тәжрибәһен мираҫҡа алмай, замандаштарҙың уй-фиғеленән ситләштерергә маташыу ҡурҡыныс.

Ысын кешенән генә ысын яҙыусы сыға, ә ысын кеше – ул йөрәк, аҡыл һәм гражданлыҡ выждан емеше. Ул – ғәзиз халҡыңа мөхәббәт. Был инде әҙәбиәттән алырға түгел, ә уға бирергә кәрәк тигәндә аңлата. Йәш әҙәбиәтселәрҙең бәләһе – донъяны танып-белеүҙә һай йөҙөүҙәре. Шуны аңларға кәрәк: уҡыусыларығыҙ араһында һеҙҙән күберәк белгән, тормошто үҙегеҙҙән яҡшыраҡ аңлаған кешеләр һәр ваҡыт табыла.

Йәш саҡта тотош кешелектең яҙыусыһы булып етешке килә. Мәгәр үҙ халҡы өсөн яҙһа ғына дөйөм кешелек генийы булып китәсәген йәш әҙип аңлап етмәй.

Патриотизм! Үҙебеҙҙең халыҡ хаҡына йәшәйбеҙ. Илебеҙ хаҡына яҙабыҙ.

Хәҙер шәхес менән йәмғиәттең, шәхестең йәмғиәттәге һәм йәмғиәттең шәхестәге уҙаңы ҡатмарлаша бара. Ни өсөн йәшәйбеҙ? Нимә хаҡына йәшәйбеҙ? Йәш яҙыусының әҫәре бына ошо донъя ҡоласындағы идеяларҙы төшөнөүенә үҙе бер һынау һымаҡ булырға тейеш. Ләкин күптәрҙе уҡыйым да ошондай идеяларҙың шаңдауын тоҫморламайым.

Хәҙерге йәш әҙип мөхәббәт тураһында яҙһа, тәү көрәшеү менән ҡауышыу араүығын мөмкин тиклем тиҙерәк еңеп сығырға ынтыла. Гений иһә был арауыҡты йән-тән дерелдәрлек тойғолар юлы рәүешендә тасуирлай. Данте. Петрарка... “Космик” быуатта йәшәйбеҙ бит, тип аҙғынлыҡты аҡларға маташыу – бөтөнләй урынһыҙ.

*“Шоңҡар” өсөн яҙыусы Сабир ШӘРИПОВ махсус әҙерләне.*





**УҘҒАН ЙЫЛДЫҢ 5-СЕ ҺАНЫНДА 2020 ТИП ИСЕМЛӘНГӘН ӨР-ЯҢЫ ПРОЕКТ ИҒЛАН ИТКӘЙНЕК. УНДА БЕР НИСӘ АВТОРҘЫҢ 2020 ЙЫЛДЫ НИСЕК КҮҘАЛЛАУҘАРЫ ХАҠЫНДА ФАРАЗДАРЫ ДОНЪЯ КҮРҘЕ. ИҒТИБАРЫҒЫҘҒА ЙӘНӘ ИКЕ ХИКӘЙӘ ТӘҠДИМ ИТӘБЕҘ. ҺӘМ БЫЛ РУБРИКА КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ ДАУАМ ИТЕР, ТИГӘН ӨМӨТ БАР. ШУЛАЙ ИТЕП, 2020 ЙЫЛДА БЕҘҘЕ НИМӘЛӘР КӨТӘ? ТҮБӘНДӘГЕ ФАРАЗДАР ОШО ХАҠТА...**






Ҡасан һеҙ һуңғы тапҡыр хат яҙҙығыҙ? Юҡ, SMS-хәбәр ҙә, электрон хат та түгел, ә ысын – ҡағыҙға яҙылған, дүрткә бөкләнгән, бармаҡ, ә бәлки, ирен эҙҙәре ҡалған хат... Бик күп кешеләрҙең исемдәрен атап, уларға сәләм күндергән, йәнәһе, хатты уҡыусы яҡындарын онотмаһын... Бөтә ғаилә менән йәки яңғыҙың ғына ҡараңғы төндәрҙә яҙған хаттар... Бик-бик борон заманда яҙғанһығыҙҙыр, моғайын. Минең прогреска һис бер ҡаршылығым юҡ, шулай ҙа... Элек беҙ телеграмма, хаттарҙы түҙемһеҙләнеп көтә инек. Әгәр ҙә уларҙа туғаныңдың ҡайтасағы тураһында хәбәр булһа, хат беҙҙең өсөн ҙур байрамға әйләнә ине. Әйтерһең дә, яҡын кешең ишектән килеп ингән һәм һин ҡосағыңды йәйеп уға атылаһың. Бына шулай. Бөгөн... ICQ-ҙағы йәнһеҙ аралашыу, ниндәйҙер «контактик»тар хат рухын үлтерҙе. Хәҙер алыҫтан ҡайтҡан дуҫыңды ла һин аптырамай, ҡыуанмай ғына ҡаршы алаһың – шулай инде, һеҙ бит кисә генә Skype-тан аралаштығыҙ.

2020 йылда ҡағыҙ гәзиттәр хаҡында ла оноттолар. Бөтәһе лә интернеттан килә һәм интернетҡа китә. Интернет һәр ваҡыт һәм бөтә ерҙә. Нимәлер һатып алыу, сит илгә сығыу, театрға барыу – ҡыҫҡаһы, һин бер нисек тә унһыҙ йәшәй алмайһың. Хатта уның аша «фиктив бала» «атаһы» йәки «әсәһе» лә була алаһың. Ер йөҙөндә тыуым ҡапыл төштө, сөнки һәр кемгә виртуаль ғаиләһендә йәшәү бик уңайлы бит.

Нанотехнологиялар, тибеҙ. Бәлки, кешелек, был һүҙҙе урынлы йәки урынһыҙ, «алға киткәнлектә» күрһәтеү өсөн ҡулланыуҙан арынып, уның нин-

дәй технологиялар икәнен аңлар. Һәм, ниһайәт, бөгөнгө фәндең глобаль темаһы – суперкылдар теорияһы. Кешелек был бөйөк асышты яҡын киләсәктә эшләр, тип ышанам мин. Уның менән кеше бөтә ишектәргә асҡыс табыр. Сөнки был бит бөтә йәнле һәм йәнһеҙ өсөн берҙәм теория. Кеше Алла булырға дәғүә итә тиһегеҙме? Көтеп тороғоҙ! Юҡ, әлбиттә. Тик был асыштарҙы аңлай, ҡиммәттәрҙе дөрөҫ баһалай алғандарҙың ғына мөмкинлектәре сикләнмәйәсәк. Улар йоғонтоһонда транскорпорациялар барлыкка киләсәк, улар, үҙ сиратында, дәүләттәрҙең борон-борондан килгән ҡеүәтен кәметәсәк. Бөтә донъя корпорацияларға бәйле буласаҡ. Һандар, һандар, яуыз һандар, ә тәүсығанаҡ онотолған. Кеше – ҡеүәт бирәмеге, капитал сығанағы. Ҡағыҙ аҡсалар юҡ, шуға ла кеше хәҙер үҙ иҫәбенә күберәк кредит, очко-балдар, аҡса берәмектәрен һалыу хаҡында хыяллана. Кемдә бергә йыйылышыу, кешесә аралашыу ҡайғыһы булһын? Һәм... ниңә кәрәк ул?! Һин бит тиҙ генә видеоконференция ойоштороп ебәрә алаһың. Етмәһә, былай күпкә осһоҙораҡ. Виртуаль 3D артистар, йырсылар, рәхим ит! Теләһәң, үҙең дә йырлап, бейеп ебәр, теләгән киноңда теләгән роленде уйна! Юҡ, бөтөнләй үк улай өмөтһөҙ түгел әле. Ҡалған әле, ҡалған ныҡышмал «арҡырылар». Улар ҡайҙандыр ҡағыҙ китаптар, журналдар табып ҡат-ҡат уҡый, тере артистарҙың тере тауышы менән төрлө тамашалар, фильмдар ҡарай, концерттар тыңлай.

Робот-бесәйҙәр, робот-ҡомактар йәшәгән «аҡыллы» йорттар тураһында әйтеп тә тормайым инде. Тирә-як тимер-томор, техника менән тулған, ә кем иген сәсә, ит, һөт етештерә?! Яһалма аҙыҡ... Яһалма тыуым... Яһалма юл менән инкубаторҙа яралған, тыуған балалар һаны геометрик прогрессияла үҫәсәк. Был үҙе үк кеше ғүмеренең ҡиммәте төшөүе, хатта бөтөнләй юғалыуы тигән һүҙ. Ә теге ныҡышмал «арҡырылар» һаман да донъя ҡиммәттәренең һаҡланыуына ышанып һәм бөтә был күренештәргә аптырап ҡарар. Мин дә булырмын улар рәтендә. Моғайын.

Ҡурҡынысмы? Кешелектең яғаһынан тотоп, һелкетергә! «Ни эшләйһең һин?» – тип ҡысҡырырға. Ә ул үҙе һиңә мәғәнәһеҙ ҡарашын төбәп: «Ни эшләргә?» – тип һораясаҡ. Мәңгелек ҡиммәттәргә ҡайтырға! Был системаның котолғоһоҙ ағышын туҡтатырға! Мин тыныслыҡ яҡлы! Дәүер ҡаршылыҡтарын үтә алғандар кешенең, ғүмерҙең ҡиммәтен баһалаһын. Иң мөһиме, ул кеше ғүмеренә хаҡ ҡуймаһын, сөнки ул – иң ҡиммәте. Һәм үткәндәрҙең хаталарын ҡабатламайынса яңы тормош төҙөһөн. Ҡоралһыҙ. Сиктәрһеҙ. Һәр кем үҙен Шәхес итеп таныған донъяны.

...Утопиямы? Хыялдың зыяны юҡ. Был ваҡиғалар йыраҡ 2020 йылдың артында тиһегеҙме? Юҡ, улар тиҙҙән башланасаҡ, әле үк башланған.

**P.S.** Юҡ, 2020 йылға тиклем бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Ә... шулай ҙа үҙгәрер... береһе – тормош, икенсеһе – календарҙағы һандар. Шаяртам.

***Әхнәф ИҪӘНБАЕВ.***





# 2020





Күк йөҙө болоттар артына йәшенгән. Көнө буйы туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Моңһоуланып, ошо күренеште күҙәтәм. Эх, ябалаҡлап ап-аҡ ҡар яуһа ине... Юҡ, минең хыялым – хәҙерге заман өсөн әкиәт. Ерҙә хәҙер ҡыш тигән миҙгел юҡ, йыл әйләнәһенә – йәй, ямғырлы, йәшенле йәй, ә бына ҡар – юҡ. Тәҙрә өлгәһө буйлап ҡыҙғылт тамсылар йүрмәләй. Тимәк, тағы ямғырҙа көкөрт кимәле күтәрелгән.

Булғанды емереп, булмағанды төҙөп, Заман алға елә. Әйтерһең, кешелек аңы балалыҡ дәүерен һаман үтмәгән. Сабый, әгәр ҡулына матур тәтәй эләкһә, иң тәүҙә уны боҙоп ҡарай, һуңынан ҡабат ҡороп маташа бит... Хәҙер, ана, нисек кенә «Тәбиғәтте һаҡлайыҡ!» тип ҡысҡырмаһындар – һуң: тәбиғәт кешелеккә ҡаршы «үҙ-үҙен яҡлау» һөжүмен башланы.

– Зөлфиә Наил ҡыҙы! Мин бөттөм.

Уйланып китеп, «синыфымды» бөтөнләй онотканмын. Бер ҡараһаң, уҡыусыларыма мин ул тиклем кәрәк тә түгел. Бәләкәй генә бүлмәмдә экранға текәлеп ултырам. Әйтерһең, мин – диктор. Ә балалар – компьютерға текәлеп бирем үтәүсе. Ә бит ҡасандыр академияла беҙҙе, балалар менән йәнле аралашырға, уларҙы ҡыҙыҡһындырырға кәрәк, тип өйрәтәләр ине.

Хатта тәүге педагогик практикала, ғүмеремдә беренсе тапҡыр үткәргән дәресемдә, өҫтәл артында күп ултырған өсөн әрләндем. Ә хәҙер бына ошо бәләкәй бүлмәлә көн үткәрәм. Элек уҡытыусы бурыстары йырып сыҡҡыһыҙ күп ине, ә хәҙер нимә – балалар дәрес менән шөғөлләнәләрме, йәки үҙ аллы эштәрҙе башҡарғанда компьютерҙа техник хата ебәрмәгәндәрме – шуны тикшер ҙә ултыр. Ә, иң мөһимен оноттом: тағы ла уҡыусының пластик жетонына баһа ҡуй ҙа мисәт һуҡ. Бына минең төп бурыстарым. Тик улар барыһы ла ысын түгел һымаҡ. Әйтерһең, завод конвейерын күҙәтәһең, береһен дә белмәйең, береһен дә танымайһың – ә баһалайһың.

– Яҡшы! Компьютер эштәрегеҙҙе ҡарар, – тип яуаплайым уҡыусыма. – Үҙ аллы эш өсөн билдәләр табелгә китә.

– Утыҙ икенсе дәрес тамам! Тағы ла алты дәрес ҡалды, – тине ағымлы тауыш микрофон аша.

Тәнәфес.

«Клас»ҡа икенсе синыф уҡыусылары «тула». Әлбиттә, ҡулда ручка, дәфтәр-китап юҡ. Нимәгә? Компьютер барыһын да үҙенә һыйҙырған.

Хәтеремдә, беренсе синыфҡа тип алынған портфелем, дәфтәр-китабым... Шул тиклем бәхетле инем, хатта уларҙы ҡосаҡлап йоҡлағаным иҫтә.

Иң матур дәфтәр, иң яҡшы ручка... Улар хәҙер музей экспонаттарына әйләнде инде.



Сигнал бирелде, тағы мониторға ҡарайым. Минең бурыс – күҙәтеү.

– Егерме туғыҙынсы дәрес башланды, – тип иҫкәртте микрофон.

– Йома көндө эшләгән тестар менән таныштығыҙ. Кемдең һорауҙары бар? Шоу башланды!

Үҙемдә ныҒыраҡ көйләйем: уҡыусы менән минең диалог хәҙер компьютерға яҙыла башлаясаҡ. Кемдәрҙеңдер фекеренсә, был – уҡытыу процесын контролдә тотоуҙың иң камил юлы. Асыҡ дәрестәр күптән модаһан сыҡты. Яңы быуын. Яңы хоҡуҡтар. Юҡ, күберәк бурыстарҙыр.

– Тыңлайым.

– «Салауат Юлаев кем менән һуғышҡан?» тигән һорауға һеҙ миңә ноль балл ҡуйғанһығыҙ.

– Тәк, тәк, һинең яуабың – «Батый менән»?

"Класс" көләргә тотонды.

– Ричард!?

Ул тарихты айырыуса нык яратҡан уҡыусым (Эйе, исеме сәйер шул, әммә 40 йыл элек былай исемдәр ғәҙәти күренеш түгел ине. Ә хәҙер... ғәжәп: Илназ, Азат, Зәлиә исемдәре бик һирәк. Башҡорт исемле балалар Оливер, Джеймстар араһында баштарын ғорур күтәреп йөрөй. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та).

Үҙемде бөгөн сәйәхәтсе итеп хис итәм. «Тарихҡа» «сумып-сумып» алам.

– Батыйҙың Русҡа ябырылыуы ҡасан булған?

– 1233-1240 йылдарҙа.

– Ә Салауат Юлаев ниндәй һуғышта ҡатнашҡан?

– Крәҫтиәндәр һуғышы, 1773-1775 йылдар.

– Шунан, Ричард, аңлашылдымы?

– Батый менән Салауат бер-береһенә ҡаршы һуғышҡан, – тине 4-се һанлы малай.

– Һуң Ричард, уҡып килһәң ни була?

– Мин... Унда шулай яҙылған.

- Ҡайҙа?

– Бына, – тип ул минең компьютерыма электрон китап вариантын ебәрҙе. «Салауат Юлаев һәм Батый. Яу яланында ике дуҫтың мөнәсәбәттәре». – Мин бит тарихты ошо авторҙар хеҙмәтенә таянып өйрәндем. Ошо «тарихсылар» ҡулынан сыҡҡан «Екатерина II, Наполеондың өсөнсө ҡатынының йәшәү тарихы», «Революционер Николай II» һ.б.

– Ричард, теләһә ниндәй китапты уҡығансы, мин биргән исемлектән дәреслектәрҙе өйрән...

– О'К дог! ( «О'кей договорились» тигәнде аңлата инде).

Элек уҡытыусы ошондай һүҙҙәр өсөн уҡыусыһын шелтәләп тә алыр ине. Ә хәҙер был – ғәҙәти күренеш. «Һүҙ ирке»н ошолай аңлайҙар.

- Бөйөк Ватан һуғышы?

- 1941-1942.

- 1941-1945. «Рембо-15», «Терминатор-10» китаптарында һүрәтләнгән ваҡиғалар менән беҙҙең бөгөнгө тема бер ҙә оҡшаш түгел. Башҡа синыфтар кеүек Сталин менән Гитлер ағалы-ҡустылы тип башымды ҡатырмағыҙ.

Элек фән кешеләре өсөн тарихты өйрәнеү – хәҡиҡәткә юл, тип ҡабул ителә ине. Бөгөн һәр береһе «үҙ тарихын» һайлай.

- Ә һеҙ ысын ветеранды күрҙегеҙме? Уларҙың миҙалдары күп инеме? 9 майҙа ысын салют аттылармы? – Бөтә яҡтан ҡулдар күтәрелә. Әйтерһең, мин ысын динозаврҙар заманында йәшәгәнмен. Ә был – икенсе донъя. Иҫ киткес, бөйөк, ҡурҡыныс, һалҡын виртуаль донъя.

– Һаҡлаусы ҡулсатыр әҙерләргә! Ҡабатлайым: һаҡлаусы ҡулсатыр әҙерләргә! Ямғырҙа көкөрт – 25%, – тип иғлан итте мәктәп радиоһы мин ҡайтырға сыҡҡанда.

Урам буш. Әгәр өйҙән сығырға мәжбүр иткән ҙур сәбәп кенә булмаһа, береһе лә тышҡа ашыҡмай. Ниңә сығырға? Заман күҙлегенән ярлы тип иҫәпләнгән өйҙә лә компьютер, интернет бар. Мөхәббәт, дуҫлыҡ, байлыҡ – барыһын да шунда табырға мөмкин тип һанала. Тормоштоң, гүйә, тәме юғалған. Барыһы ла ғәҙәттәгесә: тыуҙың, уҡының, кейәүгә сыҡтың... Шулай бара ла бара.

Өйҙә мине бесәйем ҡаршы алды. Ҡыҙыҡ, әммә аң кимәле буйынса кешенән түбәнерәк торған тип иҫәпләнгән йән эйәләре ысын ҡиммәттәрҙе юғалтманы. Уларға һаман да күңел йылыһы кәрәк.

– Һаумы, апай, – тип минең аяҡҡа һырынды мыяубикә – Флешка. Муйынындағы ҡайыштағы тауыш: «Мин асыҡтым», – тип белгертте.

Электрон үҫеш. Хәҙер хайуандар менән аралашып була. Әлбиттә, иң ябайы – «Мине ярат». Аңһат. Уңайлы.

Тәҙрә кеүек тонок телевизор алдына килеп ултырҙым. Кино ҡарағым килеп китте. БашТВ, УралТВ, Өҙәк көйТВ каналдарында оҡшағанын тапмағас, телефонға үрелдем:

- Һаумыһығыҙ, был телеүҙәкме? Минең номерым: 4685. С. Юлаев урамы. Нәфис фильм ҡарарға теләр инем. Эйе, БашТВ-ла.

Бына булды. Хәҙер ниндәй кино тәкдим итәләр, шуларҙан береһен һайлап алырға ғына кәрәк.

“З. Биишева әҫәре мотивы буйынса фәнтәзи – «Тылсымлы ҡурай». Биш халыҡ-ара награда”.

Исемә төштө: былтыр көҙ ҙур премьераһы уҙғайны.

Мин ары киттем.

“Ул әсәһен ун өс йыл көтә. Һәр бер көнөн өмөт менән ҡаршылай. Башҡалар өмөтөн өҙһә лә, ул һаман ышана.

- Әсәй!

- Айгөл!”

Хәҙер үк ҡарағыҙ: «Айгөл иле».

Ҡасандыр был әҫәрҙе яратып уҡыным. Ләкин уның буйынса кино төшөрөүселәр юҡ ине әле. Ә хәҙер күп әҫәрҙәр экранға сыҡты. Хатта уҡыусы балалар ошо киноларҙы ғына ҡарап, дәрестә һөйләп, билдә алмаҡсылар. Уларға әҫәрҙе уҡыуҙың мөһимлеген аңлатырға тура килә.

“Донъя һинең күҙҙәр менән” тигән таныш булмаған кинола туҡталдым.

“Быға тиклем мин яңғыҙ инем. Ҡараңғы төндәрем бер-береһенә оҡшаш үтте. Ә һин килдең дә тормошома ғәм бирҙең.

Әгәр иртән уянһам, тимәк, мин донъяға кәрәк”, – тип башлана ине кино.

Тәҙрә аша ҡалаға бағам. Юҡ, ҡасандыр мин уҡыған ҡала түгел ул, бөтөнләй икенсе, БӨГӨНГӨ. Ниңәлер башыма шундай уйҙар килде. Насарғамы был, яҡшығамы?! Һис шикһеҙ, тормош алға бара. Иҫке ҡалғәләрҙе емереп, үҙенә тура юл яра, тайпыла, аҙаша, алға ынтыла.

Ә мин... үҙемә бирелгән ваҡытҡа тотоноп, аптырап ҡалмай алға еләм. Тайпылһам, әхирәттәрем тотоп ҡалыр. Өмөт, Мөхәббәт, Түҙемлек. Улар мине күп нәмәгә өйрәтте, өйрәтә, өйрәтәсәк.

Бер уй тынғылыҡ бирмәй. Бирелгән ваҡыт арауығында күргән донъям бик бәләкәй кеүек. Бәлки, минең икенсе цивилизацияның тыуыуын, икенсе планеталар асылыуын күргем киләлер. Әммә мин бөгөн, мотлаҡ бөгөн кәрәк. Ә бит оҙаҡ та үтмәҫ, мине иҫләгән, ошо ҡалала йәшәгәнемде белгерткән бер эҙ ҙә ҡалмаҫ. Ә әле...

*Зөлфиә СӘЛИХОВА.*



Риф МИФТАХОВ

# ШАЯН ҺҮҘҘЕ АҢЛАМАҒАН КЕШЕ КҮҘ АҠАЙТЫП БАҠҠАН БАҠА ИШЕ



## САТИРА ҺӘМ ЮМОР

Ҡатын менән ир –
Сатира менән юмор:
Ҡатын ҡысҡыра,
Хатта аҡыра.
Шулай булмайса,
Ул бит – сатира!

Ир бөтәһен дә
Көлкөгә бора:
Ҡай саҡ һүҙ менән
Ҡай саҡ шым ғына,
Сөнки йортонда
Ул юмор ғына.

Һәр ғаилә менән
Яңыра барыр:
Ҡатын менән ир –
Ялҡытмаҫ жанр!

## ҺӨЙЛӘШМӘЙЕНСӘ ГЕНӘ

Ҡыҙға ҡарап, эргәһендә
Егет ултырҙы түҙеп.
Йөрәге янғас, түҙмәне,
Битенән алды үбеп.

Ҡыҙҙың ҡылығы был мәлдә
Бер нәмә аңлатманы.
Егет, аптырап, һөнәрен
Яңынан ҡабатланы.

Ҡыҙ шул килеш, әйтерһең дә,
Гүйә, уны үпмәйһең.
Һорап ҡуйҙы егет кеше:
– Ниңә бер һүҙ әйтмәйһең?

Әйтте һылыу (ә бит тағы
Был хәлгә һис бошманы):
– Әсәйем ят егет менән
Һөйләшергә ҡушманы...
Башҡа һөйләшмәнеләр,
Улар тик үбештеләр.



## ЯҢЫ БУТҠА

– Уян, йәнем, уңған ҡатынҡайың
Ике ҡулын биш итте:
Һин торғансы, “һә” тигәнсә
Тәмле бутҡа бешерҙе.

– Торам, торам... был хәлде бит
Мин, иркәм, төштә күрҙем.
Әйт әле, тәмле бутҡаңды
Һин нимәнән бешерҙең?

– Утҡа ҡуйғас, торҙом оҙаҡ
Китә алмай эргәңдән.
Ә бутҡа ни... булған ҡуйған
Һатып алған билмәндән.

## ЙҮНҺЕҘ ҺӨЙӘРКӘ

– Нимә булды, эй, дуҫ кеше?
Тораһың янып-көйөп...
– Ҡатын ҡыуалап сығарҙы,
Салбарҙы тышҡа сөйөп...
– Һуң өйләнһәң шулай була,
Рәхәттә оҙаҡ йөрөп...
– Ә мин һиңә әйттемме әле,
Ул – минең ҡатын, тиеп...

## МИЛИЦИЯ БҮЛЕГЕНДӘ

– Өс көн инде ҡайтҡаны юҡ
Минең ир – Миңлеғәле.
Шуны һеҙ миңә тиҙ генә
Эҙләп табығыҙ әле!

– Ниндәй билдәләре бар һуң,
Айырыла ни менән!?
– Әлегә юҡ, әммә булыр
Ишектән инеү менән!

## АПТЫРАШЫУ

– Ҡатын кисә әйтә ҡуйҙы,
Театрға барғанбыҙ,
Ике сәғәт буйына беҙ

Нимәлер карағанбыҙ.
– Нисек, нисек?.. Театрға
Беҙ барғанбыҙ, тиһеңме?
Шуны үҙең белмәйһеңме?
Әллә эскән инеңме?
– Ниңә уға аптырайһың,
Бер катлыһың бигерәк:
Айнык баштан театрға
Нисек йөрөмәк кәрәк?!

## КОТКАРЫУ

Якын дуҫтар осрашты.
Береһе күҙен күгәрткән.
– Нимә булды? – тип һорай Нур, –
Һиңә бик нык эләккән.

– Катын эше, – ти Хөсәйен, –
Һыуға баткан сибәрҙе
Сығарыуға бисә бер мәл
Йоҙрок менән ебәрҙе.

– Кешене коткарған өсөн?!
Вәт, катының эт, наҙан!
– Йәш сибәрҙе коткарҙым шул,
Йылға түгел... ваннанан!

## БАШ БУЛА АЛҒАН ИР КӘРӘК!

Дәғүәләшеүсе катындан
Һорай судья: – Һәр көнө
Түҙеп торғоһоҙ, тиһегеҙ...
Ир хыянат итәме?

– Юк, – ти катын, – эше бөтһә,
Максат – өйгә кайтыуҙа.
Хыянат иткәне булманы
Тик бер генә тапкыр ҙа!

– Улайһа, кулын күтәреп,
Йәберләгәндер һеҙҙе?
– Кул түгел, хатта бер генә
Юк уның каршы һүҙе.

Судья нықыш: – Үтәмәйме
Әллә ир-ат бурысын?
– Теләгемде белеп тора,
Был яктан да тынысмын.

– Характеры кот оскостор,
Була ундай бәндәләр.
– Юк! – ти катын, – холко менән
Торғаны бер бәйғәмбәр!

Судья кыҙа: – Нимә етмәй?!
Былдай кол ир бик һирәк!..
Әйтте катын: – Кол кәрәкмәй,
Баш була алған ир кәрәк!

## БОРҺАН БОРСОЛМАЙ



Нык сирләгәс Сәйҙә әбей бер көн:
– Кил әле, кил янға, бабайым! –
Сакырҙы ла, – бер серем бар, – тине,
Исән сакта әйтеп калайым.
Ғазапландым мин ғүмерем буйы
Шул гонаһым һиңә әйтмәүҙән.
Ғәфү итсе, картым: Фәйрүзәнде
Мин бит таптым башка берәүҙән.

Кулын ғына һелтәп куйҙы Борһан:
– Ял йортонда, – тине, – булманың.
Шулай икән, башка ир-ат менән
Һис кенә лә зина кылманың.

– Эй, Борһаным, минең Борһаным,
Булдың инде мәңге бер катлы:
Катын-кыҙҙар, әгәр теләһәләр,
Ир янында кыла гонаһты.
Исеңдәме, райүҙәккә килде
Оҙон буйлы сибәр бер табип.
– Беләм-беләм, бөтә катын-кыҙҙар
Карай ине хатта туктaлып.
– Күрҙем – үлдем: мин дә ошо ирҙе
Арбамаксы булдым юл табып.
Өндәремдә, төштәремдә күрҙем,
Көндөҙҙәрен – күрҙем сараһын.
– Көҙгөң юкмы – ниңә бер бакманың,
Ул ир һиңә нисек караһын?!

– Улай тимә, Борһан, юлын тапһаң,
Шайтан үҙе хатта баш каға.
Бер көн әйттем: минең менән кунһаң,
Байығырһың байтак аксаға!
Ә аксам бар, уны һинән йыйҙым –
Мин хужаһы булдым кеҫәңдең:
Исерек кайттың, яттың, хырылданың...
Күңелен күреү кайҙа бисәңдең!
Урынында ырғып куйҙы Борһан
Уйға батып торғас бер килке:
– Аксалар бит – минең кеҫәләрҙән,
Был бала ла, тимәк, минеке!



## ЕГЕТ БӘХЕТЕ

– Мөхәббәттән уңдым, тиһең, ә бит
Өйләнмәгәнһең дә, егетем...
– Бына ошо өйләнмәүҙә инде
Минең ысын, бөтмәҫ бәхетем.

# 100% АЙЫҠЛЫҠҠА АТА-ӘСӘЛӘР ҠАРШЫ



ДОНЪЯЛА ӨС КЕШЕНЕҢ ИКЕҺЕ СПИРТЛЫ ЭСЕМЛЕК ҠУЛЛАНМАЙ. ЯҠЫНСА 600 МИЛЛӘТ АЙЫҠ ТОРМОШ АЛЫП БАРА, 41 ДӘҮЛӘТТӘ "ҠОРО ЗАКОН" ИНДЕРЕЛГӘН ҺӘМ ТАҒЫ 40 ИЛДӘ АЙЫҠЛЫҠ ЗАКОНДАРЫ ЭШЛӘЙ. ЕР ЙӨҘӨНДӘГЕ 6 МЛРД. ЯРЫМ ХАЛЫҠТЫҢ ЯҠЫНСА 4 МЛРД. 200 МЛН. САМАҺЫ ЭСМӘЙ. ҮҘ ТӘБИҒӘТЕНӘ ҠАРШЫ БАРЫУСЫЛАРҘЫҢ КҮБЕҺЕ БЕҘҘӘ, РӘСӘЙҘӘ. 2009 ЙЫЛДЫҢ АВГУСЫНДА ПРЕЗИДЕНТ ДМИТРИЙ МЕДВЕДЕВ РӘСӘЙЛЕЛӘРҘЕҢ ЕР ЙӨҘӨНДӘ ХӘМЕРҘЕ ИҢ КҮП ҠУЛЛАНЫУСЫ ХАЛЫҠ БУЛЫУЫН, ИЛЕБЕҘҘӘ ЙЫЛЫНА КЕШЕ БАШЫНА 18 ЛИТР АЛКОГОЛЬ ТУРА КИЛЕҮЕН ҺӘМ ХӘМЕР МЕНӘН БӘЙЛЕ СӘБӘПТӘР АРҠАҺЫНДА ЙЫЛ ҺАЙЫН 700 МЕҢ ВАТАНДАШЫБЫҘҘЫҢ ЯҠТЫ ДОНЪЯ МЕНӘН ХУШЛАШЫУЫН БИЛДӘЛӘНЕ. ИЛ ПРЕЗИДЕНТЫ ШУЛАЙ УҠ ҺУҢҒЫ ЕГЕРМЕ ЙЫЛ ЭСЕНДӘ ДӘҮЛӘТ ТАРАФЫНАН ХӘМЕРГӘ ҠАРШЫ ОЙОШТОРОЛҒАН САРАЛАРҘЫҢ ТУЛЫҺЫНСА ҺӨҘӨМТӘҺЕҘ БУЛЫУЫН ТЕЛГӘ АЛДЫ. ЯҠЫН АРАЛА ХӨКҮМӘТ, ДӘҮЛӘТ ДУМАҺЫ ТАРАФЫНАН ҠӘТҒИ ЗАКОНДАР, ПРОГРАММАЛАР ҠАБУЛ ИТЕЛӘСӘГЕН БИЛДӘЛӘНЕ. МЕДВЕДЕВТЫҢ БЫЛ СЫҒЫШЫНАН ҺУҢ ЙЫЛ ЯРЫМ ВАҠЫТ УҘҘЫ, ЛӘКИН ХӘЛДӘР ЯҠШЫРМАНЫ.

ХАЛЫҠТЫ НИСЕК ИТЕП ЭСКЕЛЕК ҺАҘЫНАН ҠОТҠАРЫРҒА? БӨТӘ РӘСӘЙ "ЙӘШТӘР АЙЫҠ РӘСӘЙ ӨСӨН!" ОЙОШМАҺЫ ҺӘМ "АЙЫҠ БАШҠОРТОСТАН" РЕСПУБЛИКА ХӘРӘКӘТЕ РӘЙЕСТӘШЕ **МАРАТ ТАҺИР УЛЫ АБДУЛЛИН** МЕНӘН ОШО ҺӘМ БАШҠА ҺОРАУҘАРҒА ЯУАП ЭҘЛӘЙБЕҘ.



**– Марат, айыҡлыҡ өсөн көрәшең ҡасан башланды?**

– Туғыҙынсы синыфта класташтар менән Яңы йылды ҡаршылағанда беренсе һәм һуңғы тапҡыр, унышында ла «ала ҡарға» булмаҫ өсөн, ике рюмка хәмер йотоп ҡараным. Организм ҡабул итмәгәс, башҡаса эсмәнем. Университетта уҡығанда ҡулыма профессор Владимир Ждановтың видеоколлекцияһы килеп эләкте, һуңынан академик Федор Угловтың китаптары аша халҡыбыҙҙы хәмер ярҙамында махсус рәүештә юҡҡа сығарыуҙарын аңланым. Бар факттарҙы уртаға һалып анализлағандан һуң, бер ваҡытта ла эсмәҫкә тигән һығымтаға килдем. Ни өсөн? Был һорауға яуап бер: халыҡтың рухи ҡиммәттәре юҡҡа сыға. Айыҡ тормош алып барыу өсөн был төп мотивация булырға тейеш. Сөнки хәмерҙең ҡыйратыу көсө хатта Бөйөк Ватан һуғышы һөҙөмтәләренә ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ. Яуҙан халҡыбыҙ рухи яҡтан сынығып сыҡты. Ә был алышта кем булып ҡалырбыҙ?..

Аҙнаһына бер шешә булһа ла һыра түңкәргән таныштар, үҙҙәрен «алкоголик» тип иҫәпләмәгәнгә күрә, беҙҙе сәйәсәткә, власҡа ынтылыуҙа ғәйепләй. Ә мин уларға: “1942 йылды күҙ алдына килтерегеҙ. Волгоград алышы окобында ултырам. Взводта биш яралы һалдат ҡалған. Уларҙы ҡотҡарыу – минең бурыс”, – тим.

**– Марат, нисек уйлайһың, алкоголизмдан дауалап буламы?**

– Әйтә алмайым. Әммә наркологтар: «Алкоголизм – ул сир, ә сирҙе дауаларға кәрәк», – ти. Эскесене һәм ауырыған кешене берәй утрауға алып барып ташлап ҡарайыҡ әле. Эскән кеше тере ҡаласаҡ, ә билдәле бер сир менән яфаланыусы, дарыу ҡабул итмәһә, үләсәк.

**– Улай булғас, ни өсөн алкоголизмды сир тиҙәр? Ни сәбәпле социаль сирҙәр эпидемияһы киңәйә генә?**

– Халыҡты инандырыр өсөн: эсегеҙ, ә инде сирләп китә күрһәгеҙ – һеҙҙе дауалаясаҡтар. Наркологтар, экстрасенстар, шулерҙар менән донъя тулды. «Алкоголизмдан дауалайым» тигән иғландар аҙым һайын. Уларҙы кеше ҡайғыһында акса эшләүселәр тип атау дөрөҫөрәк булыр ине, минеңсә. Ә инде эсеүҙең ике генә сәбәбе бар. Беренсеһе – һис ниндәй ҡаршылыҡһыҙ һатып алыу мөмкинлеге. Әйтәйек, Норвегия менән Швецияла 30 мең кешегә бер генә магазин тура килә. Һәм улар ауыл йә ҡала эсендә түгел, ә бер нисә саҡрым алыҫта урынлашҡан. Спиртлы эсемлектәр паспорт буйынса һәм көнөнә ике-өс сәғәт дауамында ғына һатыла, байрамдар осоронда уларҙы кәштәләрҙән бөтөнләй алып ҡуялар. Хаҡтары ла иҫ китмәле юғары. Иң арзаны – 450 һум. Ә беҙҙә 270 кешегә бер хәмер һатыусы кибет тура килә. Йөҙ йорттан торған ауылда ғына әллә нисәмә магазин-киоск бар. Һәм хатта икенсе класс уҡыусыһы ла, өйҙән иртәнге ашҡа тип алып сыҡҡан аҡсаһына, тәнәфес мәлендә мәктәп янындағы киоскыға йүгереп барып тәмәке, йә һыра һатып алыу мөмкинлегенә эйә.

Совет осоронда иң осһоҙло араҡы 3 һум 62 тин торҙо, уртаса эш хаҡы 120 һум ине. Йәғни бер айлыҡ эш хаҡына 33 шешә һатып алырға мөмкин ине. Бөгөн уның иң осһоҙлоһо – 80 һум. Тимәк, 15 мең һум эш хаҡына 200 шешә араҡы алып була. Емеш һуты менән ябай һыу 40-50 һум тора, ә һыраның хаҡы – 25-30 тәңкә.

XX быуаттың 50-се йылдарына тиклем Рәсәй халҡы эсеү менән самаһыҙ мауыҡмаған. 50-се йылдарға тиклем йән башына йылына 2-3 литр саф спирт тура килгән. 50-се йылдарҙан 70-се йылдарға тиклем арауыҡта ул күрһәткес ҡапыл 11 литрға артып киткән. Брежнев хакимлыҡ иткән осорҙан Горбачев дәүеренә саҡлы 16 литрға еткән, бөгөн иһә 18 литр тәшкил итә.

Ни өсөн 50-се йылдарҙан һуң эскеселәр һаны артҡан? 50-се йылдарҙа алкоголь баҙары монополистары бер төркөм ғалимдарға аҡса түләп, халыҡты, тәү сиратта, балаларҙы эскелеккә ылыҡтырыу буйынса махсус теория уйлап сығарттыра. Сөнки балалар – алкоголь заводтарының, олигархтарҙың төп дошманы. 60-сы йылдарҙа СССР-ҙа хәмерҙән йылына 3 млн. кеше үлгән, шул уҡ ваҡытта 5 млн. бала тыуып торған. Ун йыл эсендә яҡынса 30 млн. кеше эскелек арҡаһында яҡты донъя менән хушлашһа, 50 млн. бала тыуған. Ә инде алкоголь мафияһы ниндәйҙер махсус сара уйлап тапмаһа, 10-20 йыл эсендә уларҙың килеме юҡҡа сығыр ине. Шуға улар балаларҙы нисек тә булһа эсергә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Йәшертен теорияларҙың тәүге иҫеме – эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш. Икен-



сеһе – байрамдарҙа культуралы эсеү теорияһы. Ғалимдар был теорияның файҙаһын иҫәпләп ҡараған. Ул барлыҡҡа килгәнсе СССР-ҙа алкоголиктарҙың һаны 500 мең булған, теория ғәмәлгә индерелеп, 10 йыл үткәс, был күрһәткес 5 млн.-ға еткән. Йәғни теория алкоголизмға ҡаршы булдырылған, ә алкоголиктар һаны ун тапҡырға артҡан. Ә бөгөнгә көндә был күрһәткес бер нисә тиҫтә миллион тәшкил итә.

Кеше эскесе булып тыумай. Беренсе синыфҡа барғанда бала ауыҙына тамсы ла хәмер алмай, ә мәктәпте тамамлағанда уларҙың 99 проценты алкоголле эсемлек тәмләп ҡараған була. Шуларҙың 70 процентына рюмканы ата-әсәһе үҙе һона. Ни өсөн? Сөнки йәмғиәттең өлкән вәкилдәренә, шул иҫәптән уҡытыусыларға, табиптарға, зыялыларға әлеге теория һеңдергән: байрамдарҙа аҙ ғына спиртлы эсемлек ҡабул итеү хилаф түгел, әйҙә тәмләп ҡараһын, урамда аҙып-туҙып йөрөгәнсе, өйҙә эсһен һ.б. Ә 100 процент айыҡ тормош алып барыуҙы ата-әсәләр хупламай.

Йәнә бер миҫал. Әйтәйек, балалар баҡсаһындағы 25 баланан торған төркөмдө тәрбиәсе урамға алып сыға. Юлда балалар сүп урналарында ҡаҙынған, йәки алам-һоламға төрөнөп йоклап ятҡан асарбаҡты, уның эргәһендәге араҡы шешәһен күрә. Тәрбиәсе, ул яҡҡа ҡарамағыҙ, унда бармағыҙ, тип иҫкәртмәһә лә, асарбаҡтың ҡиәфәте аша балалар эскелектең ни тиклем ытырғаныс күренеш икәнен аңына һеңдерә. Шул уҡ ваҡытта улар байрам мәлендә тәрбиәселәр, уҡытыусыларҙың мул табын артында эсеп, күңел асыуына ла шаһит була. Өйҙә лә шул уҡ хәл ҡабатлана. Бала аңында ҡапма-ҡаршылыҡ көрәшә. Ҡыҫҡаһы, эскеселәр алкоголгә антиреклама эшләһә, ата-әсәләр, уҡытыусылар, тәрбиәселәр, киреһенсә, уға реклама яһай.

**– Алкоголь – ул ағыу, наркотик тип тә һүҙ йөрөтәһең...**

– Быны Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы 1975 йылда уҡ билдәләне. СССР-ҙың 26.12.1972 №2329 ГОСТы ла шулай ти: «Этил спирты – тиҙ тоҡаныусан, үҙенә хас еҫле төҫһөҙ шыйыҡса, тәүҙә нервылар системаһын ҡуҙғытыусы, аҙаҡтан паралич булдырыусы көслө тәьҫирле наркотик».

Ер шарында 44 дәүләт алкоголде наркотик тип ҡабул иткән, уларҙа хәмер героин, марихуана һәм гашиш менән йәнәшә тора. 85 дәү-

ләт хәмерҙе таратыуға ҡәтғи кәртәләр ҡуйған. Беҙҙең илдә генә тыйыуҙар юҡ. Беҙҙә хәмер ул – «эсемлек», «үҙенсәлекле аҙыҡ-түлек». Халыҡ спиртлы эсемлекте наркотик тип ҡабул итмәһен өсөн, уны магазинда һөт, икмәк менән йәнәшә һаталар.

**– 1985 йылдың 1 июленән "ҡоро закон" үҙ көсөнә ингәйне. Тик ни өсөндөр халыҡ уның файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.**

– Әлеге фекер менән 20 процентка ғына килешәм. Был осраҡта шуны аңлау зарур: 1985 йылда "ҡоро закон" ҡабул ителмәне, ни бары хәмер ҡулланыуҙы күпмелер дәрәжәлә сикләнеләр. "Ҡоро закон" ҡабул ителгән икән, тимәк, хәмер бөтөнләй һатылмаҫҡа тейеш ине. Ул осорҙа халыҡты махсус рәүештә ҡуҙғыттылар. Йәғни, халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып бармай тороп, Горбачев тарафынан ҡапыл ғәмәлгә индерелгән был закон йәнәһе "кире" һөҙөмтәләр бирҙе. Ә бит ул осорҙа партияның йоғонтоһо көслө булған, киң мәғлүмәт саралары аша халыҡты алдан әҙерләп, бер нисә йыл дауамында пропаганда алып барылһа, ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшерҙәр ине.

Әле "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәтен төҙөнөк. Алдыбыҙға тәү сиратта йәштәрҙе һәм балаларҙы тәрбиәләргә тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Әлбиттә, бер-ике йыл эсендә генә ниндәйҙер һөҙөмтәләргә өлгәшеп булыр тип өмөтләнмәйбеҙ. Төп маҡсат киләсәккә йүнәлтелгән. Рәсәйҙең патриот ғалимдары 1985 йылда ҡабул ителгән алкоголгә ҡаршы указдың зыянына ҡарағанда файҙаһы күберәк булыуын раҫлай. Мәҫәлән, үлем осраҡтары күпкә кәмене, кинәт күтәрелгән тыуым демографияны яҡшыртты. 1 миллион 200 мең кеше үлер урынға тере ҡалды. Йәғни үлем осраҡтары йылына дүрт йөҙ меңгә кәмене. Тап 1985-1988 йылдарҙа тыуған балалар ғаилә ҡороп, нәҫелдәрен дауам итеү арҡаһында әле Рәсәйҙә бер аҙға демографик тоторoҡлоҡ барлыҡҡа килде.

Икенсенән, ул йылдарҙа суицид – 40 процентка, кеше үлтереүҙәр – 55, көсләүҙәр 70 процентка кәмегән. Шулай уҡ юл фажиғәләренең дә кәмеүе күҙәтелгән. Иҡтисади яҡтан ҡарағанда файҙа күберәк булған. Әммә федераль мәғлүмәт саралары был һандарҙы еткереүҙе кәрәкле тип тапмай. Ул мәғлүмәтте ябай халыҡтың күпселеге файҙалана алмаған



Интернет сайттарҙан эҙләргә, рәсми булмаған радио, телевидение тапшырыуҙарында ғына ишетергә була.

**– "Һыра алкоголизмы" тигән төшөнсә бар. Бөгөн һыра эскән йәштәр киләсәктә араҡыға ябырыласаҡ. Һыра организмға яйлап инә, кеше уға әкренләп өйрәнә. Тора-бара кеше араҡыға күсә һәм уны ҡулланыуҙан арына алмай. Бөгөнгө йәштәрҙе һыра эсеүҙән нисек туҡтатырға?**

- Йәштәр уйланһын өсөн ошоға ҡағылышлы ике генә миҫал килтерә алам: рәсәйлеләр эсергә әүәҫләнгән "Шихан", "Балтика" һ.б. һыраларҙың 94 процентына сит ил компаниялары хужа. Йәғни беҙҙең йәштәр Өфө, Стәрлетамаҡ һыраһын эсә, ә аҡсаһы сит илгә китә. Тимәк, һыра ла Рәсәйгә ҡаршы ҡулланылған геноцид ҡоралы.

Икенсенән, 1995 йылда алкоголь әйләнешен көйләү буйынса Федераль законға ярашлы, һыраны иҫерткес эсемлектәр исемлегенә индерәләр. Законды беренсе уҡыуҙа был статья шул килеш үтеп китә. Артабан һыра заводтары хужалары сумаҙан-сумаҙан долларҙар менән Дәүләт Думаһындағы бер нисә кабинетты урап сыға һәм икенсе уҡыуҙа законға "һыранан тыш" тигән ике генә һүҙ өҫтәлә. Ошо ике һүҙ арҡаһында ғына Рәсәйҙә һуңғы 15 йылда ҡот оскос ваҡиғалар күҙәтелә. Бынан ун йыл элек бер кеше башына 20 литр һыра тура килһә, бөгөн был күрһәткес 80 литрға етә.

***– "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһы һәм уның вәкилдәре тарафынан ойошторолған саралар хаҡында тулыраҡ мәғлүмәт бирһәң ине...***

– "Берҙәмлектә – көс" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр. "Айыҡ Башҡортостан" ойошмаһының иң төүгө бурысы: хәмерҙең зыянын аңлаған кешеләрҙе берләштереү. Ошо йүнәлештә бер нисә йыл дауамында эшләп килеп, ниһайәт, республика кимәлендә берләшеүгә өлгәштек. Эшебеҙҙең һөҙөмтәләре лә күренә башланы. Былтыр декабрь айында республикаға Рәсәй айыҡлыҡ хәрәкәте лидерҙары Виктор Кривоноговты, быйыл февраль башында Владимир Ждановты бушлай лекциялар уҡырға саҡырҙыҡ.

"Иң айыҡ ауыл" конкурсы беҙ ойошторған сараларҙың береһе буласаҡ. Был акцияның маҡсаты ҡайһы магазинда араҡы әҙерәк һатылыуын асыҡлау түгел. Уның төп бурысы – халыҡҡа эш урындары булдырыу. Шулай уҡ мәктәптәрҙә хәмергә ҡаршы саралар ойоштороу ҙа, көмөшкә һатыусыларға ҡаршы эш алып барыу көҙ уңында тотола. Бынан тыш, туйҙарҙы эскеһеҙ үткәреүҙе лә ғәҙәткә әйләндерергә кәрәктер.

***– Дәүләт башлығы булһаң, эскелеккә ҡаршы ниндәй саралар ҡабул итер инең?***

– Халыҡты айыҡтырыуҙың төп механизмы – закон ҡулланыу. Уны мин ҡыҫым законы тип ҡабул итәм. Ҡыҫым аҫтан да, өҫтән дә булдырылырға тейеш. Йәғни ябай халыҡ, йәмәғәтселек, төрлө ижтимағи хәрәкәттәр етәкселәрҙе, закон сығарыусыларҙы айыҡлыҡ яҡлы булырға өндәргә бурыслы. Мәктәп, балалар баҡсаһы, мәҙәниәт йорто, дауахана, мәсеткә яҡын 500 метрлыҡ радиуста хәмер, тәмәке һатҡан магазин булмаҫҡа тейеш. Скандинавия илдәрендә шулай итәләр ҙә. Хәмергә ҡаршы көслө закондар ҡабул итер алдынан халыҡты алкоголдең ағыу икәненә инандырыу кәрәк.

Һүҙемде йомғаҡлап, 1978 йылда Украинала төшөрөлгән фәнни фильмдағы бер миҫалды килтерәм: унда төрлө инәнән тыуған берәр айлыҡ 10 суска бәрәсен алалар. Тиҙҙән бәрәстәрҙең береһе лидер булып өлгөрә һәм башҡалар ул нимә эшләһә, шуны ҡабатлай. Бер көндө суска бәрәстәренең аҙығына ос литр һыра ҡушалар. Уны башта лидер ауыҙ итә. Һәм ҡалғандары ла унан ҡалышмаҫҡа тырыша. Һөҙөмтәлә суска бәрәстәре иҫерешеп, һуғыша башлай. Икенсе көндө аҙыҡҡа йәнә һыра өҫтәйҙәр. Лидер бәрәс килеп аҙыҡты еҫкәп ҡарай ҙа, һауытты түңкәрә. Суска бәрәстәренең алдына йәнә һыралы ризыҡ килеп ҡунаҡлай. Суска бәрәсе был юлы ла уны түңкәреп кенә ҡуя. Бер нисә тапҡыр шулай ҡабатлана. Хатта бер айлыҡ суска бәрәсе лә хәмерҙең ағыу икәнен аңлай! Был кешеләр араһындағы лидерҙарға ла өлгө. Әгәр ҙә районҡала һәм республика етәкселеге хәмер һауытын түңкәрһә, ябай халыҡ та улар артынан эйәрәсәк. Ауылдарҙа ла айыҡ кешеләр башҡаларҙы үҙе артынан эйәртергә тейеш. Етәкселәр, депутаттар, журналистар, табиптар, уҡытыусылар барыһы ла ябай халыҡ өсөн өлгө күрһәтергә бурыслы.

Әйткәндәй, «Айыҡ Башҡортостан» ижтимағи хәрәкәтенең интернеттағы сайты: TREZVO-RB.ru.

*Илшат ЗАРИПОВ әңгәмәләште.*

# КЕМДЕР 8 МАРТТЫ ӨҪТӘЛМӘ ЭШ КӨНӨ ТИП ИҪӘПЛӘЙ



**ПАРАДОКС, ӘММӘ 1918 ЙЫЛҒА, ЭЛЕККЕ РӘСӘЙ ИМПЕРИЯҺЫ БИЛӘМӘЛӘРЕНӘ ГРИГОРИАН КАЛЕНДАРЫН ИНДЕРГӘНГӘ ТИКЛЕМ, ҠАТЫН ХОҠУҠТАРЫ ӨСӨН КӨРӘШ КӨНӨ 23 ФЕВРАЛДӘ БИЛДӘЛӘНГӘН.**

**БӨГӨН ИҺӘ 23 ФЕВРАЛЬ КАЛЕНДАРҘА ҠЫҘЫЛ ТӨҪ МЕНӘН ВАТАНДЫ ҺАҠЛАУСЫЛАР КӨНӨ ТИП КҮРҺӘТЕЛӘ. БАЙРАМДЫҢ ИСЕМЕН ҺҮҘМӘ-ҺҮҘ ҠАБУЛ ИТЕПМЕ, УЛ ӘРМЕЛӘ ХЕҘМӘТ ИТЕҮСЕ, ЙӘКИ ӘРМЕ БУРЫСЫН ҮТӘГӘН ЫСЫН ИР-АТТАР КӨНӨ ТИП ҺАНАЛҺА ЛА, БЫЛ КӨНДӘ БАР КӨСЛӨ ЗАТ ҮҘ БАЙРАМЫ ТИП ҠАБУЛ ИТӘ.**

**УНЫҢ ТАРИХЫ НИСЕГЕРӘК ҺУҢ? БОЛЬШЕВИКТАРҘЫҢ ПАРТИЯ ИДЕОЛОГТАРЫ РИУӘЙӘТЕ БУЙЫНСА, ЯҢЫ СОЦИАЛИСТИК АРМИЯ 1918 ЙЫЛДЫҢ 23 ФЕВРАЛЕНДӘ, ПСКОВ МЕНӘН НАРВА ЭРГӘҺЕНДӘ ЭШСЕ-КРӘҪТИӘН ҠЫҘЫЛ АРМИЯҺЫ ОТРЯДТАРЫ ҠАЙТАНАН ОЙОШОП, ГЕРМАНИЯНЫҢ КАЙЗЕР ҒӘСКӘРҘӘРЕН КИРЕ ҠАҒЫУҘАН БАШЛАНҒЫС АЛА. БЫЛ ТАРИХИ ФАКТМЫ, ӘЛЛӘ УЙҘЫРМАМЫ – УНЫҺЫН ТАРИХСЫЛАР АСЫҠЛАҺЫН.**

## НЕМЕЦТАРҒА – ТАҢҒАСА, Ә ИСЛАНД ИРҘӘРЕНӘ ИКЕ КӨН БАЙРАМ ИТЕРГӘ РӨХСӘТ

Һәр илдә тиерлек Ир-аттар көнө билдәләнә. Ҡайҙалыр хәрби, ҡайҙалыр дини, ә башка бер илдә – Ғаилә йәки Атайҙар көнө буларак үтә ул. Июлдең өсөнсө йәкшәмбеһе Атайҙар көнөн АҠШ-та, Канада, Англия, Мексика, Төркиә, Ҡытай, Греция, Франция һәм башка илдәрҙә байрам итәләр. Әммә атайҙарҙан тыш, олатайҙар, ағайҙар, малайҙар ҙа уны үҙ байрамы тип кабул кыла. Был көндә балалары аталарына алһыу раузалар бүләк итергә ашыға, туған-тыумасаларҙы саҡырып табын коралар. Әгәр ҙә атай кеше мәрхүм икән, раузаларҙы уның кәберенә илтеп һалалар, тик был осракта сәскә ак төҫтә булырға тейеш.

Германияла Ир-аттар көнө тип 17 май иҫәпләнә. Ул "Vatertag" тип атала. Ҡатындарҙың бында ҡыҫылышы юҡ, уларҙан хатта бүләк тә талап ителмәй. Ирҙәр генә үҙ-ара йыйылышып тәбиғәт ҡосағына йә булмаһа барҙарға ашыға. Ашау-эсеү йәғни байрам үткәреү сығымдарын әле атай булмағандар үҙ өҫтөнә ала.

Немецтарға өйгә таңғы биштә лә ҡайтырға рөхсәт ителә икән. Ғаилә башлығын иҫерек килеш дуҫтары йөкмәп алып ҡайтҡан осраҡта ла ҡатынының һытыҡ йөҙ менән ҡаршы алыуы килешмәгән эш һанала.

Германияла беҙҙекеләр ҙә күпләп йәшәй. Улар унда 23 февралдә лә, "Vatertag"ты, йәғни Атайҙар көнөн дә байрам итә икән. Һәм, әлбиттә, улар икеһендә лә хәләл ефеттәренән бүләк ала, йәнәһе лә: "Бына һиңә бүләк, шым ғына өйҙә ултыр!"

Иң бәхетле ирҙәр Исландияла йәшәйҙер ул. Бында Ғаилә башлығы һәм Хәрбиҙәр менән крәҫтиәндәр байрамы үтә. Етмәһә, улар бер-бер артлы килә. 19 ғинуар көнө ҡатындар – тормош иптәштәрен, ә ҡыҙҙар егеттәрен тәбрик итә, бүләктәр, сәскәләр бирә, иғтибарға солғай. Нәҡ Ғаилә башлығы көнө никах теркәү өсөн уңышлы һанала.

19 ғинуарҙан һуң килгән йома көн – Торри йәки Торраблоут байрамы. Ул башта хәрбиҙәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең боронғо мәжүси байрамы тип ҡабул ителә һәм тора-бара барлыҡ Ирҙәр көнөнә әйләнә. Торри хөрмәтенә ҡул һуғыштары, сыҙамлылыҡҡа һәм етеҙлеккә конкурстар үткәрәләр. Аҙаҡтан ҙур табын артына йыйылалар.

Немецтарға таңғаса байрам итергә рөхсәт, ә исланд ирҙәре ике көн ҡунаҡ була, тип ҡайғырырға урын юҡтыр Рәсәй ир-аттарына: 23 февралдә лә, 8 мартта ла ҡатын-ҡыҙ аш-һыу бүлмәһендә урала, ә ир-ат өҫтәл артында һыйлана лаһа! Уйынлы-көлкөлө – кемдер 8 мартты өҫтәлмә эш көнө тип иҫәпләй...

## ФРАНЦУЗДАР ӘБЕЙҘӘРҘЕ ТӘБРИК ИТҺӘ, БЕҘ – БАРЫҺЫН ДА...

Әле Боронғо Римдә үк ҡатындар үҙ байрамдарын билдәләгән. Ирекле гүзәл заттар хәләл ефеттәренән бүләк алған, ә ҡол ҡатындарға был көндә ял итергә рөхсәт ителгән.

Донъяла иң ҙур хөрмәт гүзәл заттарыбыҙға күрһәтеләләр. Ҡыҙҙар, әсәйҙәр һәм әбейҙәр көндәрен дә билдәләйҙәр. Әйтәйек, Японияла 3 март – Ҡыҙҙар байрамы һанала. Уларға бағышланған берҙән-бер көн түгел әле был. Йыл һайын 15 ноябрҙә өс һәм ете йәшлек ҡыҙҙар байрамын үткәрәләр. Был көндө уларҙы ҡурсаҡ кеүек кейендерәләр, сәйер прическалар яһайҙар һәм Хоҙайҙан сәләмәтлек, муллыҡ һорарға ғибәҙәтханаларға алып баралар. Әлеге байрамдың үҙ тарихы бар: самурай ғаиләләрендә ҡыҙҙарға өс йәштән - сәс үҫтерергә, ә ете йәштән кимоно кейергә рөхсәт ителгән.

Ер йөҙөндә Әсәйҙәр көнө лә бар. Һуңғы йылдарҙа уны беҙҙең илдә лә билдәләй башланылар. Был байрамды Австралия, Бельгия, Дания, Италия, Төркиә, Финляндия, АҠШ һәм Японияла – майҙың икенсе йәкшәмбеһендә, Һиндостанда – октябрь башында, Испания һәм Португалияла – 8 декабрҙә, Франция һәм Швецияла майҙың һуңғы йәкшәмбеһендә байрам итәләр. Марттың беренсе йәкшәмбеһендә французлар өлкән йәштәге, йәғни 55-тән уҙған барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡотлай.

Ә хәҙер инде 8 март хаҡында. Ул элекке СССР республикаларында, шулай уҡ Гвинея-Бисауҙа, Камбоджала, Монголияла, Непалда, Төньяҡ Кореяла ял көнө тип иғлан ителгән. Сүриәлә 8 мартта – Революция көнөн, ә Либерияла һәләк булғандарҙы иҫкә алыу көнөн билдәләйҙәр.

Францияла 8 мартты, нигеҙҙә, коммунистар байрам итә. Бүләктәр биреү, табын әҙерләү кеүек нәмә юҡ. Уның урынына ҡатын-ҡыҙ хоҡуҡтарына бағышланған конференциялар, семинарҙар уҙа. Германияла ла ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары вәкилдәре шундайыраҡ саралар үткәреү менән генә сикләнә.

Ә бына Италия ҡатындары беҙҙекеләргә көнләшмәй тиерлек. Был көндө ир-аттар һөйөклөләренә мимозалар бүләк итә. Әммә ирҙәр менән берлектә байрам итеү ҡаралмаған: итальян ҡатындары әхирәттәре, ҡыҙ туғандары менән генә кафе-ресторандарға юллана. Ә кисен Римдә ирҙәр стриптизы күрһәтә торған барҙар асыла һәм был көндө ҡатын-ҡыҙҙар унда бушлай инә.

8 мартты Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө тип БМО иғлан иткән. 1857 йылдың 8 мартында Нью-Йорк туҡыусылары, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыуҙы талап итеп, урамға сыға. Илле өс йыл үткәс, 1910 йылда, Копенгагенда уҙған Ҡатын-ҡыҙҙарҙың халыҡ-ара конференцияһында Клара Цеткин Нью-Йорктағы шул ваҡиғалар хөрмәтенә 8 мартты Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө буларак билдәләргә тәҡдим итә. Уны тәүге тапҡыр 1911 йылда Американың һәм Европаның бер нисә дәүләтендә билдәләйҙәр, ә 1913 йылда Рәсәй ирҙәре лә гүзәл заттарҙы байрамдары менән ҡотлай. Л.И. Брежнев фарманы нигеҙендә, 1966 йылдан башлап бөгөнгәсә 8 март СССР-ҙа ла ял көнө иҫәпләнә.

Шулай ҙа, Рәсәйҙә лә гүзәл заттар байрамы биреү генә түгел. Беҙҙә ҡатындарҙы 8 марттан тыш Әсәйҙәр (ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһе) һәм Балалар көнө (1 июнь) менән дә тәбриклəйҙәр, бүләктәр һәм сәскә гөлләмәләренә күмәләр.



# ҺИНЕКЕ ҠАЙҺЫНЫҺЫ?

**СИБӘР АХМАҠ.** Көслө зат быңдай ҡатын-ҡыҙға битараф түгел. Ул, ысынында, бер аҙ еңел-елпе күңелле, сөнки уны кейем-һалым, күңел асыуҙан ҡала бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмай. Ирҙәр быңдай ҡатын алдында үҙҙәренең аҡылы менән маҡтанырға ярата, үҙен ауыҙын асып тыңлауҙарынан ләззәт кисерә. Өҫтәүенә сибәр ҡатын менән урамдан уҙыу ҙа ир өсөн ҙур мәғәнәгә эйә. Ләкин быңдай ҡатын-ҡыҙ тормош күтәргә яраҡһыҙ: улар үҙҙәрен ҡайҙа нисек тоторға белмәй, йорт эштәрен алып барырға ла һәләтһеҙ.

**ӨЙ БЕСӘЙЕ.** Быңдай ҡатын-ҡыҙ барлыҡ ир-атҡа ла оҡшай. "Бесәй" өйҙә таҙа тота, ашарға тәмле бешерә, уның ҡарауы, тормошта үҙ-үҙен аҡса менән тәьмин итерлек түгел. "Һулға" йөрөүе лә икеле.

**ТИМЕР ҠАТЫН.** Ул, әкиәттәге кеүек, сабып барған атты ла туҡтатырға һәләтле, көсҡеүәте ташып тора, бик сыҙам. Быңдай ҡатын үҙенән көсһөҙөрәк тормош иптәшен бик тиҙ таба. Ул күп эшләй һәм һәр ваҡыт үҙен иренән өҫтөн тота.

**ЙЫРТҠЫСҠАЙ.** Иң насар төр – ундайҙар менән ирҙәр оҙаҡ йәшәй алмай. Ул үҙен "миңә табынһындар өсөн донъяға килгәнмен, шуға күрә барыһы ла минең алда баш эйергә тейеш" тип һанай. Фарман бирергә ярата, башы яҡшы эшләй, әрһеҙ. Аҡса, бүләк йәлләмәгән ир-атҡа ғына наҙ күрһәтә.

**ТЫЙНАҠ.** Ир кеше бәләгә тарыһа, ҡайғыһын уртаҡлаша, уны тынысландыра. Тоғро һәм ҡайғыртыусан ҡатын тураһында хыялланыусыларға бына тигән тормош иптәше. Ул иренең эсеүен дә, башҡа ҡатындар менән сыуалыуын да кисерә.

**ЭШЛЕКЛЕ.** Быңдай гүзәл зат аҡса эшләй белә, белемле һәм үҙен ирекле һанай. Шуға ла улар саманан тыш тәкәббер. Ашарға бешерә белмәүен ваҡыт юклыҡҡа һылтай. Ләкин торабара бәхетте аҡсаға һатып алып булмауына төшөнә.

**ИҪЕ КИТМӘҪ ҠАТЫН.** Бер нәмәнән дә ҡурҡмай, тәмәке тарта, араҡы эсә, еңел холоҡло, ир-аттар менән йыш сыуала, үҙ сәләмәтлеге, шулай уҡ яратҡан кешеһе тураһында ла ҡайғыртмай. Кисәләрҙә иғтибар үҙәгендә була, уға серҙәреңде ышанып тапшырырға мөмкин. Һәм, әлбиттә, ундайҙарҙан рәтле ҡатын да, әсә лә сыҡмай.

# ҠӨРЪӘНДӘ ҠАТЫН-ҠЫҘ

РАББЫБЫҘ АЛЛАҺ ҠӨРЪӘН КӘРИМДӘ: "ҠАТЫНДАРЫҒЫҘҒА ЯҠШЫЛЫҠ МЕНӘН МӨҒӘМӘЛӘЛӘ БУЛЫҒЫҘ, УЛАР МЕНӘН ГҮЗӘЛ ТОРМОШ КИСЕРЕГЕҘ", – ТИП БОЙОРҘО.

"Ән-Ниса" (Ҡатындар) сүрәһе, 19-сы аят.



* * *

Пәйғәмбәребеҙ ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһенә ҡағылыбыраҡ былай белдерә:

Берегеҙ ҙә ҡатындарығыҙға нәфрәт итмәһен;

Шуны якшы белегеҙ: ҡатындар ҡаршыһында һеҙҙең хактарығыҙ булған кеүек, ҡатындарҙың да һеҙҙең ҡаршығыҙҙа хактары бар;

Мөьминдәрҙең иманда иң өҫтөн булғаны - әхлағының иң якшы булғанылыр, хәйерле булғандарығыҙ ҙа ҡатындарығыҙға ҡарата хәйерле булғандарығыҙҙыр;

Йәннәт әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтындалыр;

Ҡытайҙа булһа ла ғилем алығыҙ, сөнки ғилем ҡатындарға ла, ирҙәргә лә фарыздыр.

Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға лайыҡлы хөрмәт күрһәтеү, уларға якшылыҡ менән мөғәмәлә итеү, уларҙың хактарын таныу, киләсәктә әсәй буласаҡ ҡыҙҙарыбыҙҙың уҡымышлы һәм тәрбиәле булыуҙары – мөкәддәс бурысыбыҙҙыр.

* * *

Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ҡыҙ балалар айырыуса әһәмиәткә эйә. Юғиһә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм былай тип әйтмәҫ ине: "Мин Аллаһы Тәғәләгә ялбарҙым: "Йә, Раббым! Һинең алдыңда ниндәй бала ҡәҙерле, файҙалы, шундай бала бир миңә!" Аллаһ миңә ҡыҙ балалар насип итте. Шунан мин аңланым – Аллаһ ҡаршыһында бигерәк тә ҡыҙ балалар файҙалы".

Мөхәммәд ғәләйһис-сәләмдең хәҙисендә былай тиелә: "Бала – был донъяның байлығы, биҙәге һәм теге донъяның нуры. Баланың хуш еҫе йәннәт еҫе кеүек. Донъяға ҡыҙ бала килгәс, һин шулай уҡ шатлан, динһеҙҙәргә оҡшама".

"Әгәр ҡатын-ҡыҙ беренсе бала табыуҙа уҡ ҡыҙ тапһа, был бәхеткә булыр".

“Әгәр бер өйҙә ике ҡыҙ бала булһа, был йортҡа көн һайын ике мәртәбә бәрәкәт-именлек килер. Шулай уҡ был йортҡа фәрештәләр төшмәгән бер генә лә миҙгел булмаҫ. Әлеге ҡыҙҙарҙың ихлас доғала булған ата-әсәһенә һәр иртә һәм кисен именлек насип итер”.

## ХӘҘИС ШӘРИФТӘР:

**Аллаһы Тәғәлә һеҙҙең һүрәтегеҙгә һәм малығыҙға түгел, ә күңелегеҙгә һәм ғәмәлдәрегеҙгә иғтибар итә.**

* * *

**Ватанды һаҡлау — имандандыр.**

* * *

**Өс кешенең: атаһының балаһына ҡылған доғаһы, мосафирҙар һәм рәнйетелгән кешеләрҙең доғаһы, һис шикһеҙ, ҡабул ителер.**

* * *

**Бәхетһеҙлек өс төрлө: яҡшылыҡ эшләһәң, рәхмәт әйтмәгән, насарлыҡ эшләһәң, ғәфү итмәгән — имам (башлыҡ), изгелек күрһә, шуны ергә күмгән, яманлыҡ күрһә, шуны тирә-йүнгә сәскән — күршең, бергә торғанда һине рәнйеткән, һин ситтә саҡта һиңә хыянат иткән — ҡатының.**

* * *

**Ҡатын-ҡыҙ кәкре ҡабырғанан яралтылған, төҙәйтмәксе булһаң, һындырырһың уны. Әлек нисек булһаң, уның менән шулай йәшәүеңде бел.**

*Дини календарҙан алынды.*

## КӨН ДӘ УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

## АШ-ҺЫУ ДОҒАҺЫ

الْحَمْدُ لِلّٰهِ الَّذِى اَطْعَمَنَا وَسَقَانَا وَجَعَلَنَا مُسْلِمِينَ اَللّٰهُمَّ
بَارِكْ لَنَا فِيهِ وَاَطْعِمْنَا خَيْرًا مِنْهُ اَللّٰهُمَّ اَعْطِنَا رِزْقًا حَلَالًا
وَاَنْتَ خَيْرُ الرَّازِقِينَ اَللّٰهُمَّ نَوِّرْ قُلُوبَنَا وَارْحَمْنَا وَارْضَ
عَنَّا وَاَعْطِنَا تَمَامَ نِعْمَتِكَ وَدَوَامَ نِعْمَتِكَ وَتَمَامَ تَوْفِيقِكَ
بِحُرْمَةِ نَبِيِّكَ وَالْحَمْدُ لِلّٰهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ رِضَاءً لِلّٰهِ
الْفَاتِحَة

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.

Әлхәмду лилләһил-ләҙи әтғәмәнә үә сәҡанә үә жәғәләнә муслимин. Аллаһүммә бәрик ләнә фиһи үә әтғимнә хайран минһү. Аллаһүммә әғтинә ризҡан хәләлән үә әнтә хайрур-разиҡин. Аллаһүммә нәүүир ҡулүбәнә үәрхәмнә үәрҙа ғәннә. Үә әғтинә тәмәмә ниғмәтикә үә дәүәмә ниғмәтикә үә тәмәмә тәүфиҡикә бихүрмәти нәбиййикә. Үәл-хәмду лилләһи раббил-ғәләмин. Риҙаән лилләһил-фәтихә.

Мәғәнәһе: “Беҙҙе ашатҡан, эсергән һәм мосолман ҡылған Аллаһы Тәғәләгә маҡтау булһын. Эй, Аллам! Аштарыбыҙға бәрәкәт бир, бынан да хәйерлерәк аштарҙы ашарға насип ит. Беҙгә хәләл ризыҡ бир, сөнки һин ризыҡ биреүселәрҙең иң хәйерлеһе. Күңелдәребеҙҙе нурландыр, беҙгә шәфҡәт, мәрхәмәт ҡыл һәм беҙҙән риза бул”.



# АҠСА – ИҪӘПТЕ, АҠЫЛ ҮЛСӘҮҘЕ ЯРАТА

**"УФ, ҠАЙҺЫЛАЙТЫП АҠСА ЕТКЕРЕРГӘ?!", "БЫЛ ҒЫНА АҠСАҒА НИСЕК КӨН КҮРЕРГӘ?", ЙӘ БУЛМАҺА "АҠСА ҒҮМЕРҘӘ ЛӘ ЕТМӘҪ ИНДЕ" һ.б. ОШОҒА ОҠШАШ ЗАРЛАНЫУҘАРҘЫ ЙЫШ ҠАБАТЛАЙБЫҘ. ҠЫҘҒАНЫСҠА ҠАРШЫ, КҮПТӘРЕБЕҘ ОШОНДАЙ НЕГАТИВ УЙҘАР УЙЛАП, ПРОБЛЕМАЛАР ӨСӨН БОРСОЛОП, ҮҘЕ ЛӘ ҺИҘМӘҪТӘН АҠСАНЫ ҮҘЕНӘН ЭТӘРӘ.**



Тәбиғәт кешелеккә аҡыл тупларға, көс йыйырға, һау-сәләмәт булырға мөмкинселектәрен биреп тә, бөтә кеше лә уларға өлгәшә алмаған кеүек, аҡса ла был тормошта бөтәбеҙгә лә тигеҙ бирелмәй. Йәмғиәтебеҙҙә аҡса кешелек донъяһы өсөн йәшәү һәм энергия сығанағы булып әйләнештә йөрөй. Бөгөнгө көндә аҡсаһыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай. Күп кенә ғаиләләрҙә ыреш-талаштар шул аҡса мәсьәләһенән килеп сыға ла инде. Көшөлөгө тулы булғанда кешенең кәйефе лә көр, күңеле лә күтәренке. Берәй уңышлы ғына бизнесмен менән ябай кешенең психологияһын сағыштырып ҡараһаҡ, уларҙың аҡсаға булған мөнәсәбәттәренең, ҡылыҡ-ғәҙәттәренең ҡырҡа айырылып тороуына шаһит булырбыҙ. Сөнки бизнесмендар, ябай кешенән айырмалы рәүештә, үҙҙәренә күпме аҡса кәрәклеген, уны нимәгә сарыф итәсәген аныҡ беләләр. Улар менән дөрөҫ эш итә. Капиталын арттырыу өсөн күп тотоноу түгел уның маҡсаты, ә дөрөҫ тотоноу. Шуға күрә лә, аҡсаға мохтажлыҡ кисермәҫ өсөн, "аҡса – иҫәпте, ә аҡыл үлсәп эшләүҙе ярата" принцибы менән йәшәп өйрәнергә кәрәк. Иң башта үҙеңдең уйҙарыңды, ҡылыҡтарыңды, ғәҙәттәреңде үҙгәртеүҙән башлау зарур. Аңлы рәүештә үҙеңде үҙгәртеү кешене профессиональ кимәлдән дә, материаль йәһәттән дә үҫтерә, камиллаштыра.

Аҡса беҙҙән үҙенә ҡарата иғтибар һәм ихтирам талап итә. Уға ҡарата һәр ваҡыт позитив мөнәсәбәт булдырырға кәрәк, хатта етмәгән осраҡта ла мәрхәмәтле булып, һәр тиндең һеҙҙең көнкүрешегеҙгә килеп инеүенә рәхмәт әйтегеҙ.

Аҡсаны беҙ күпселек ҡайҙа һаҡлайбыҙ? Кемдер – кейем шкафында, кемдер – матрац аҫтында. Белгегеҙ килһә, иң уңайлы һәм иң дөрөҫ урын аш-һыу бүлмәһендә, һыуыткыста икән. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки һыуыткыс беҙҙең аҙыктүлекте һаҡлай, шуға ла аҡса һаҡлау өсөн ҡулай энергия тап бында, баҡһаң.

Өйөгөҙҙә унда-бында тәгәрәп йөрөгән бер, биш, ун, илле тинлектәрҙе йыйып бер урынға һалып барырға була. Йәки алғы бүлмәгә тәрилкә ултыртып ҡуйып, көн дә кеҫәгеҙҙәге тинлектәрҙе өҫтәп торорға мөмкин. Был ябай ғына күренештәр өйөгөҙгә көн дә аҡса килеп тороуына булышлыҡ итер. Тинлектәр ҡубәйгән һайын, ғаилә бюджетында хәл яҡшырыр. Фэншуй белгестәре өйгә аҡса, байлыҡ йәлеп итер өсөн төрлө бетеүҙәр (талисмандар) алырға кәңәш итә. Мәҫәлән, иң популяр бетеү булып ауыҙына тәңкә ҡапҡан өс аяҡлы тәлмәрйен һанала. Уны күпселек эш өҫтәленә ултыртып ҡуялар.

Хәҙер янсығыбыҙҙың эсенә байҡау яһайыҡ. Ҡағыҙ аҡсалар таушалып, бөкләнеп, тәртипһеҙ рәүештә тинлектәр менән бер рәттә яталармы? Был дөрөҫ түгел! Аҡса бөхтәлекте ярата. Ҡағыҙ менән тимер аҡсаларҙың бергә ятыуы уларҙы хурлай. Ҙурыраҡ купюраларҙы дәрәжәләренә ҡарап, тәҫләп айырып һалыуҙы ғәҙәткә индерегеҙ. Шулай уҡ бүтән илдәрҙең аҡсаларына (евро, доллар һ.б.) айырым урын әҙерләгеҙ. Аҡсаның йөҙө һеҙгә ҡарап ятһын. Һәм, әлбиттә, көшөлөктәрегеҙҙе бер ваҡытта ла буш ҡалдырмағыҙ. Унда һәр ваҡыт берәй "бәхетле тәңкә" көшөлөккә аҡса йәлеп итеп, "мая төбө" рәүешендә муллыҡ һәм етешлек билдәһе булып ҡалһын. Уны бик кәрәк булғанда ла тотонмағыҙ.

Магазинда әйбер һатып алғанда ҡағыҙ аҡсаны асып бирмәгеҙ, үҙегеҙҙән энергияны ҡасырыһығыҙ. Аҡсаны бөкләп, бөкләнгән яғын алға ҡаратып бирергә кәрәк. Ә инде һатыусы ҡайтарған сдачаны уның ҡулынан түгел, мотлаҡ махсус ултыртылған тәрилкәнән алыу һәйбәт. Шул рәүешле һеҙ үҙегеҙгә кешеләрҙең кире энергияһын эләктереүҙән һәм улар менән тура бәйләнештән ҡасаһығыҙ. Әгәр ҙә аҡсалар ергә һибелеп китә икән, уны уң ҡул менән йыйып алырға кәңәш ителә.

Шулай уҡ бурысҡа биреүҙең дә үҙ ҡағиҙәләре бар: кешегә аҡса биргәндә уң ҡул менән биреп, ул кире ҡайтарғанда һулы менән

алырға кәрәк, йәғни сәғәт телдәре буйлап аҡса һеҙҙә әйләнеп йөрөһөн. Шулай уҡ яңы ай тыуған ваҡытта үтескә алып, тулған сағында бурысты ҡайтарыу ҙа кешенең матди йәһәттән байығыуына булышлыҡ итер. Һәм биргән саҡта эстән генә "мин баймын, һинең дә бай булыуыңды теләйем", тип әйтеп бирегеҙ.

Шишәмбе көн кешенән бурысҡа аҡса алмағыҙ, дүшәмбе үҙегеҙ бирмәгеҙ. Эш хаҡын алған көндө бер тинегеҙҙе лә тотонмаҫҡа кәңәш ителә. Килгән аҡсалар бер төн һеҙҙә йоҡлаһын. Шунан ғына кәрәкле ерҙәргә тотона башларға мөмкин.

Халыҡта ла бит элек-электән уларға бәйле күп юрамыштар йәшәп килә. Мәҫәлән, кискеһен кешегә аҡса бирергә ярамай, биргән осраҡта иҙәнгә һалып, тапап бирәләр. Өйҙә һыҙғырырға ярамай: аҡса булмай һ.б.

## ЯНСЫҠТЫ НИСЕК ДӨРӨҪ ҺАЙЛАРҒА?

Аҡса янсыҡтарының төрләһе була: күн, замш, яһалма. Әммә бөтәһенең дә функцияһы бер – аҡса һаҡлау. Арзанлы, ҡулдан һатылған янсыҡтарҙы алырға кәңәш ителмәй. Сөнки арзанлы кошөлөк ярлылыҡ энергияһын йәлеп итә. Эре купюраларҙың унда килеп инеү ышанысы бөтөнләй юҡ. Артыҡ ныҡ ҡиммәт булмаһа ла, яҡшы ғына, әммә эре һәм ваҡ купюраларҙы, тинлектәрҙе айырым һаҡларлыҡ кеҫәләре булған янсыҡтар һатып алыу отошло. Әгәр ҙә кошөлөк һатып алыр өсөн ҙур ғына сумма сығарҙығыҙ икән, был аҡсалар барыбер һеҙгә кире әйләнеп ҡайтасаҡ. Әйтте, тиерһегеҙ!

Күптәр яҡын кешеһенең – иренең, балаһының һ.б. – фотоһын янсығына һалып йөрөтөүсән. Ә был күренеш фотолағы кешегә кире йоғонто яһауы бар, шул уҡ ваҡытта кешенең материаль хәле һеҙҙең кошөлөк арҡаһында (ул буш саҡта!) хөртәйеп китеүе лә ихтимал. Шулай уҡ иҫке талондар, чектар, билеттар, телефон номеры яҙылған ҡағыҙ остоҡтары ятҡан янсыҡҡа аҡса килеп инергә тырышмай. Иң һәйбәте – кошөлөктө үҙегеҙгә һатып алыу түгел, ә берәйһенең һеҙгә бүләк итеүе. Бүләк иткән саҡта уны буш бирмәй, эсенә ҙур булмаған күләмдәге аҡса һалып биреү был кешегә материаль уңыштар килтерер.

Ә кошөлөктөң төҫтәренә килгәндә, һыуҙы хәтерләткән күк, зәңгәр, йәшел төҫлө янсыҡтарҙан аҡса ағып сығып китәсәк. Ә инде асыҡ ҡыҙыл төҫлө күн янсыҡтар аҡса өҫтәлеүенә булышлыҡ итә. Лакланған ҡыҙыл күн янсыҡ һатып алыу бигерәк тә отошло булыр.

Хәҙер магазиндарҙа кошөлөк һатып алғанда һайлау мөмкинлеге ҙур. Кешенең тыуған көндәренең датаһына ҡарап, кемгә ниндәй төҫтәгеһе тап килеүен белергә була. Әгәр һеҙ тыуған көнөгөҙ 1-9 һандары арауығына тап килә икән, түбәндәге төҫтәр һайлау отошло.

**1.** һары, ҡыҙғылт һары, алтын, бронза төҫтәрендәге;
**2.** аҡ, йәшел;
**3.** зәңгәр, зәңгәр күк;
**4.** һоро, буҙ, аҡһыл күк;
**5.** аҡ, һоро, һары;
**6.** зәңгәр, күк, йәшел, алһыу;
**7.** сирень төҫө, күк, йәшел, алһыу;
**8.** ҡара, күк, ҡара йәшел;
**9.** ҡыҙыл.

Әгәр тыуған көнөгөҙ 10-нан алып 31-нә тиклем тура килһә, ҙурыраҡ һандан бәләкәйерәген алабыҙ, мәҫәлән, 28 февраль икән 8-2=6 (зәңгәр, күк, йәшел, алһыу). Айҙың 11-се һәм 22-се көндәрендә тыуыусылар йәндәре теләгән аҡса йәлеп итерлек төҫтәге кошөлөктәр һайлай ала. Ә иң һәйбәте – барлыҡ йылығыҙҙы, энергияғыҙҙы биреп үҙегеҙ теккән аҡса янсыҡтары. Уларҙы бәрхәттән, барсанан, велюр туҡымаларынан эшләп, алтын, көмөш төҫөндәгеептәр менән теғеп, ялтыр стразалар менән биҙәү һеҙгә байлыҡ һәм муллыҡ йәлеп итәсәк. Шулай уҡ тағы ла бер ябай ғына сер асам: өйҙә йөрөгәндә иҫке халаттар, тубығы йыртылған джинсылар, һуҙылған футболкалар кейеп йөрөү ярлылыҡты саҡырып торор. Шуға күрә эстән дә, тыштан да үҙең өҫтөңдә эшләү зарур. Затлы әйберҙәр, ҡыйбатлы машиналар тураһында хыял итеп, күҙ алдыңа килтереп, үҙегеҙҙе миллионер итеп тойоғоҙ! Йыһан да шул ваҡыт һеҙгә яраҡлашып, теләктәрегеҙҙе тормошҡа ашырыр. Әлбиттә, был теория бер кем тарафынан да иҫбатланмаған. Әммә үҙ яҙмышына битараф булмаусылар бик теләгәндә һәм тырышҡанда тормошон үҙгәртә алалыр.

*Милә БИЛАЛОВА.*



# КҮҢЕЛДЕ ӨЙКӘГӘН ҺОРАУҘАР

**Ҡайһы берҙә шундай мәлдәр була – күңелеңдә сер ярала, яңғыҙың ғына хәл итә алмаçлыҡ мәсьәләләр килеп тыуа, башыңда тынғылыҡыңды юғалттырған һорауҙар ҡайнаша. Уларҙы һин бер кемгә лә: иң яҡын әхирәтеңә лә, туғандарыңа, хатта атай-әсәйеңә лә сисә алмайһың, әммә өлкәндәрҙең, тәжрибәле кешеләрҙең кәңәше кәрәклеген йөрәгең менән тояһың. Ошондай хәлдә ҡалдың икән, рәхим ит, редакцияға үҙеңде борсоған һорауҙарҙы ҡыйыу рәүештә яҙып ебәрә алаһың. Клиник психолог, арт-терапевт Әлфиә БАЙРАМҒОЛОВА һеҙҙе аңларға, дөрөç йүнәлеш биреп ебәрергә һәр ваҡыт әҙер.**



## ӘХИРӘТЕМДЕҢ ИРЕНӘ ҒАШИҠ БУЛДЫМ

*Мин әхирәтемдең иренә ғашиҡ булдым! Быны түйҙары мәлендә генә аңланым. Алдан ниңә иғтибар итмәгәнмендер... Пар килмәгәндәр улар. Көн дә талашалар ҙа ыҙғышалар. Шундай мәлдә әллә ирҙе йәлләгән, уны яҡлаған булып, араларын тамам өҙөп ҡуйырға “ярҙам” итәйемме икән тип уйлап та ҡуям. Миңә эçенеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалыр ине...*

***Гүзәлиә.***

Был арала һеҙгә үҙегеҙҙең ниндәй маҡсаттар, ниндәй хыялдар менән йәшәп ятыуығыҙҙы анализларға кәрәк. Кешенең – әлеге мәлдә иң яҡын әхирәтегеҙҙең – ире һеҙҙең өсөн иң ҡулай ир, эргәгеҙҙә күрер өсөн иң-иң кәрәкле кешеме икән? Ул һеҙҙең өсөн электән хыялланған шәхесме, әллә бала саҡтағы иптәш ҡыҙығыҙҙың, әхирәтегеҙҙең уйынсығына ҡыҙығыу ғынамы? Ғөмүмән, бала саҡтағы төпкөл аң кимәлендәге стереотиптар, әгәр уларҙы анализлап, тикшереп, аң кимәленә күтәреп аңламаһаң, тормошто үҙ яйына бороп тик торасаҡ. Ошонан килеп сыға ла инде үҙ-үҙеңде, ата-әсәгә булған ҡарашыңды аңлай, үҙеңде ҡатын-ҡыҙ булараҡ ҡабул итә алмау. Һеҙгә үҙегеҙҙең әсәйегеҙгә ҡарашты үҙгәртеүҙән башларға кәрәк, минеңсә, сөнки әлеге көндәге ҡыйынлыҡтарығыҙ ошо сферала башланғыс ала.

## ҮҘЕМДЕ НИСЕК ИХТИРАМ ИТТЕРӘЙЕМ ИКӘН?

*Мин ике йыл инде бер егет менән осрашам. Ул мине әле һаман бала-сағаға һанай, нимә эшләһәм дә етди ҡабул итмәй. Берәй кәңәш бирһәм дә, үҙең аңламаған нәмәләргә ҡыçылма, ти ҙә ҡуя. Шул уҡ кәңәште берәй дуçы бирһә, уны тыңлай... Үҙемде нисек ихтирам иттерәйем икән?*

***Азалия.***

Был проблеманың нигеҙе – үҙегеҙҙең шәхси сиктәрҙе ҡуйырға тырышыу һөҙөмтәһе. Әлбиттә, әгәр яратҡан егетегеҙ һеҙгә ихтирам менән ҡарай, һеҙҙе шәхес итеп ҡабул итә икән – ул тормошҡа булған ҡарашығыҙҙы, принциптарығыҙҙы ла ҡабул итә. Әгәр “бала-саға” тип күрә, әммә һеҙҙе “тәрбиәләп” алып була, тип уйлай икән, әйҙә, тырышып ҡараһын. Тимәк, әле өлгөрөп етмәгән шәхес итеп күрә ул һеҙҙе. Бында тәҡдим – әгәр мин шундай-шундай сифаттарға эйә булып, үҙгәреп китһәм, миңә һин кәрәк булырһыңмы, беҙ бергә була алырбыҙмы? тигәнерәк һорауҙарға яуап алырға кәрәк. Сөнки, күбеһенсә шундай “өлгөрмәгән” ҡыҙҙар менән дуçлашыусы егеттәр үҙҙәре лә ошо уҡ сифаттарға эйә һәм шуны башҡаларға күрһәтеүҙән ҡурҡалар. Ниндәйҙер шәхси үçештән һуң һеҙгә ул егет менән үткәргән ваҡыт йәл була башларға мөмкин. Шуның өсөн үҙегеҙҙең үçеш өçтөндә эшләргә, юғарыраҡ кимәлгә ынтылырға тәҡдим итәм. Юғарынан тормош та, һеҙҙе ураткан егеттәр ҙә яҡшыраҡ күренә ул.

# НИКАХ ЕПТӘРЕГЕҘ НЫҠМЫ?

**Йылдар үткән һайын сәстәрен сәскә бәйләп, мөхәббәтле донъя ҡороп йәшәй башлаған парҙың бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәттәре йә үҙгәрешһеҙ ҡала, йә күҙгә күренеп һыуына. Ә һеҙҙең тормош иптәшегеҙ менән араларығыҙ ниндәй кимәлдә икән? Ошо һорауға яуап табыу өсөн иғтибарығыҙға түбәндәге тесты үтергә тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Тормош иптәшегеҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе йыш асыкларға тура киләме?**

1. эйе – 1 мәрәй;
2. юк, бының бөтөнләй кәрәге юк – 0 мәрәй;
3. барыбер бындай һөйләшеү бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәйәсәк – 2 мәрәй.

**2. Хәләл ефетегеҙҙе үпкәләтмәй һәр саҡ тураһын әйтәһегеҙме?**

1. эйе, һәр саҡ – 0 мәрәй;
2. уңайлы ваҡыт тапкан осраҡта ғына – 1 мәрәй;
3. был хакта бөтөнләй һүҙ йөрөтөүе мөмкин түгел – 2 мәрәй.

**3. Иптәшегеҙ уны борсоған мәсьәләләр тураһында һеҙгә һөйләмәй тип иҫәпләйһегеҙме?**

1. эйе – 1 мәрәй;
2. яуап бирергә ҡыйынһынам – 2 мәрәй;
3. мин уның хакында барыһын да беләм – 0 мәрәй.

**4. Үҙегеҙгә ҡағылышлы мөһим мәсьәләне теләгән ваҡытта хәл итәһегеҙме?**

1. эйе – 0 мәрәй;
2. һирәк осраҡта, күпселек уңайлы ваҡытка ҡалдырабыҙ – 1 мәрәй;
3. юк, йыш ҡына ул ваҡыт таба алмай – 2 мәрәй.

**5. Һөйләшкәндә һәр һүҙегеҙҙе үлсәп әйтәһегеҙме?**

1. эйе, әйтер һүҙемде мин ныклы уйлайым – 1 мәрәй;
2. юк, бер-беребеҙгә тураһын әйтергә күнеккәнбеҙ – 2 мәрәй;
3. башта үҙ фекеремде әйтәм, һуңынан башкаларҙыкына колак һалам – 0 мәрәй.

**6. Иптәшегеҙгә үҙ проблемағыҙҙы һөйләп, уға мәшәкәт өҫтәйем тип һанайһығыҙмы?**

1. эйе, йыш ҡына – 2 мәрәй;
2. ҡайһы бер сакта ғына – 1 мәрәй;
3. юк, ул мине ысын күңелдән тыңлап, хәл итешә – 0 мәрәй.

**7. Үҙегеҙгә генә ҡағылышлы мәсьәләне иптәшегеҙ менән кәңәшләшмәй хәл итәһегеҙме?**

1. проблемам миңә генә ҡағыла – 2 мәрәй;
2. һәр саҡ кәңәшләшәбеҙ, әммә һәр кем үҙе теләгәнсә эшләй – 1 мәрәй;
3. беҙ барыһын да бергә хәл итәбеҙ – 0 мәрәй.

**8. Эс серҙәрегеҙҙе иптәшегеҙ менән бүлешкәнсе, дуҫтарға һөйләү мең артык тип иҫәпләйһегеҙме?**

1. ҡайһы сакта ундай уй тыуа – 1 мәрәй;
2. юк, мин һәр вакытта ла иптәшемә һөйләйем – 0 мәрәй;
3. эйе, сөнки дуҫтарым мине яҡшыраҡ аңлай – 2 мәрәй.

**9. Иптәшегеҙ менән һөйләшкәндә бөтөнләй икенсе нәмә тураһында уйлағанығыҙ бармы?**

1. эйе – 2 мәрәй;
2. юк, иптәшемде һәр саҡ иғтибар менән тыңлайым – 0 мәрәй;
3. башка ингән төрлө уйҙарҙан ҡотолоу өсөн иғтибарымды тулыһынса уға йүнәлтәм – 1 мәрәй.

**10. Һеҙҙең һүҙегеҙ һәр саҡ өҫтә ҡалырға тейешме?**

1. әлбиттә – 2 мәрәй;
2. ҡайһы сакта уның һүҙен ҡабул итәм – 0 мәрәй;
3. икебеҙ ҙә бер уртаҡ ҡарарға килергә тырышабыҙ – 1 мәрәй.

Ә хәҙер мәрәйҙәрҙе иҫәпләп ҡарайыҡ:

**0 – 10 мәрәй:** Ғаиләм – ҡәлғәм, тигәндәй, һеҙҙең ғаилә нигеҙегеҙ ныклы, ҡорған тормошоғоҙ ҙа тап шундай. Бер вакытта ла аңлашмай, кәңәшләшмәй эш итмәйһегеҙ. Ғаиләгеҙҙә ерһеҙ мөнәсәбәттәр асыклау, ығы-зығы бөтөнләй күҙәтелмәй.

**11 – 29 мәрәй:** Һеҙҙең ғаиләгеҙҙә аңлашылмаусанлыҡ бөтөнләй юк тип әйтеп булмай. Ул һеҙҙең үҙһүҙлегегеҙ йәки буйһонорға теләмәү арҡаһында тейешле кимәлгә үҫмәгән, асылмаған. Әммә ғаиләлә төүге сиратта ышаныс тойғоһо көслө булырға тейеш. Юғиһә, ғаилә ағзаларының бер-береһенән яйлап ситләшә башлауы ихтимал. Был ғаилә өсөн бик ҡурҡыныс. Сөнки һәр кем янында үҙен аңлаған кеше булыуын теләй. Әгәр ул юк икән, әҙләргә тотона... Шуға күрә, хәлде ҙурға ебәрмәй, үҙ өҫтөгеҙҙә ныклы эшләй башларға кәрәк.



# «ЫСУЛ»ДЫ «МӨМКИНЛЕК» МЕНӘН БУТАМА!



**БӨГӨН КЕШЕ БУЛМЫШЫН ИНТЕРНЕТҺЫҘ КҮҘ АЛДЫНА КИЛТЕРЕҮЕ ҠЫЙЫН. ӘЛБИТТӘ, КҮПТӘР УНЫҢ ЯРҘАМЫНДА ЭЛЕККЕ ҺӘМ ЯҢЫ ДУҪТАРЫ МЕНӘН АРАЛАША, ХАТТАР АЛЫША, ӘЙТКӘНДӘЙ, ЭШ БУЙЫНСА ЛА. ИКЕНСЕЛӘРЕ УНЫҢ "ЭСЕНДӘ" МӘҒЛҮМӘТ, БЕЛЕМ КАМИЛЛЫҒЫН ЭҘЛӘЙ. Ә БЕРӘҮҘӘР, МӘҪӘЛӘН, БӨТӘ ДОНЪЯ СЕЛТӘРЕНДӘ АҠСА ЭШЛӘҮГӘ ЛӘ ӨЛГӘШӘ. ШУЛАЙ ҘА ИНТЕРНЕТ ЯРҘАМЫНДА, ЙӘКИ ИНТЕРНЕТТА АҠСА ЭШЛӘП БУЛАМЫ ИКӘН? ӘЛЛӘ УЛ ЕҢЕЛ АҠСА АРТЫНАН ҠЫУЫУСЫЛАРҒА, БЕР ҠАТЛЫЛАРҒА ЙҮНӘЛТЕЛГӘН СИРАТТАҒЫ ТОҘАҠ, АЛДАУ ҒЫНАМЫ? АЛДАУ БУЛМАҺА, ВИРТУАЛЬ ЫСЫНБАРЛЫҠТА НИСЕК ҺӘМ НИНДӘЙ ЭШТӘР БАШҠАРЫП КИЛЕМ АЛЫРҒА МӨМКИН?**

## ИНТЕРНЕТТА ЭШ: ӘКИӘТМЕ ӘЛЛӘ ЫСЫНБАРЛЫҠМЫ?

Эште, теләгең булһа, теләгән урында табырға була, тиҙәр. Шул иҫәптән, Интернетта ла. Әммә бында ла "еңел акса" эҙләүселәр өсөн урын юк. Селтәрҙәге эш тә вакыт, түҙемлек, кайһы сакта финанс сығым, кәрәкле белем, ниндәйҙер кимәлдә бәхет талап итә.

Әгәр кешенең тейешле белеме булмаһа йә һәләттәре интернетта акса эшләү өсөн тап килмәһә, ауырға тура киләсәк. Быға, тимәк, тырыштар һәм бер-ике көндән "Минән булмай!" тип туктап калмаусылар ғына уңыш казанасак, сөнки бар нәмәгә өйрәнеп була. Уйлап карағанда, бөгөн илебеҙҙең юғары, урта махсус белем биреүсе бер укыу йорто ла Интернетта акса эшләү юлдарына өйрәтмәй. Әммә, шуға карамаҫтан, селтәрҙә килем табыусылар һаны йылдан-йыл арта бара.

## ФРИЛАНС

Интернетта эш табыуҙың иң кулай юлы – фрилансерлык. Ғөмүмән, бөгөн Интернетта уңышлы эш алып барыусыларҙың күпселек өлөшө үҙ эштәрен тап ошо һүкмактан башлаған да инде. Бөгөн фрилансер менән заказ биреүсе араһында хеҙмәттәшлек күпере ролен башкарыусы бихисап ресурс бар: Weblancer.net, Free-lance.ru, Acula.org, Toplance.ru, Dowork.ru һәм башка-

шоңҡар

## FREELANCE

I. ИСЕМ
1. а) штаттан тыш хеҙмәткәр,
   б) ирекле рәссам,
   в) ирекле актер;
2. бер ниндәй ҙә фиркәнең ағзаһы булмаған, кәрәк мәлдә теге йәки был фиркәгә кушылған сәйәсмән;
3. ирекле фекер йөрөтөүсе кеше.

II. СИФАТ
1. штаттан тыш;
2. бағымһыҙ, ирекле.

III. ҠЫЛЫМ
1. а) штаттан тыш хеҙмәткәр булып эшләү,
   б) ирекле рәссам булыу;
2. (һөйләшеү стилендә) тәүәккәллек менән эш итеү.

лар. Шулай уҡ “эш биреүсе” менән туранан-тура бәйләнеш тотоу ысулы ла бар. Йәғни был осраҡта фрилансер заказдар эҙләп төрлө биржаларға мөрәжәғәт итеүҙән азат.

Фрилансерҙар араһында ла конкуренция юғары. Әммә был мәсьәлә лә хәл ителмәҫлек түгел. Мәҫәлән, башҡарасаҡ эшең өсөн осһоҙораҡ хаҡ ҡуйырға мөмкин. Икенсенән, портфолионы мөмкин тиклем уйлап күрһәтә белергә кәрәк. ***Портфолио*** – заказ яһаусы өсөн башҡарыусының кимәлен күрһәтеүсе төп күрһәткес. Өсөнсөнән иһә, тәҡдимегеҙ өҫтөндә уйланығыҙ. Сөнки һүҙҙең көсөн әле береһе лә инҡар итмәгән.

## ЭШМӘКӘРЛЕК ТӨРӨ БУЙЫНСА ФРИЛАНСЕРҘАР БЕР НИСӘ ТӨРКӨМГӘ БҮЛЕНӘ.

### КОПИРАЙТЕРҘАР ҺӘМ РЕРАЙТЕРҘАР

**КОПИРАЙТЕР** – реклама текстарын, слогандарын яҙыу менән шөғөлләнә. Интернетта иһә был терминдың мәғәнәһе, эстәлеге тағы ла киңәйеп китә. Ҡыҫҡаһы, копирайтинг тип бөгөн Селтәрҙә төрлө йүнәлештәге текстарҙы атап йөрөтәләр: реклама, мәғлүмәт, аналитика, яңылыҡтар, күңел асыу өсөн йүнәлтелгән текстар.

**РЕРАЙТИНГ** – копирайтингҡа оҡшаш термин, әммә тура мәғәнәлә “күсереп яҙыу”, булған тексты һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе мәғәнә буйынса оҡшаштарына алмаштырып эшкәртеү тигәнде аңлата. Ҡағиҙә буларак, рерайтинг хеҙмәте тәүгеһенә ҡарағанда 1,5 таҡырға осһоҙораҡ тора.

**РЕФЕРАТ, ФӘННИ ЭШТӘР АВТОРҘАРЫ.** Алдағы икеүгә оҡшаһа ла, был эш Селтәрҙә “урынлаштырыу” өсөн башҡарылмай. Ул уҡыусылар, студенттар, ҡайһы саҡта фән кандидаттары өсөн дә яҙыла. Уларға һорау, ғәҙәттә, имтихандар, сессия осоронда арта. Weblancer һәм Free-lance кеүек ресурстарҙан ҡала уларға заказдарҙы махсус рефераттар, курс һәм диплом эштәре өсөн булдырылған сервистарҙа табырға мөмкин.

**ВЕБ-ПРОГРАММИСТАР.** Сайт төҙөү, уны “хәрәкәт” иттергән кәрәкле плагин, модулдәрҙе көйләү, HTML-кодты “төҙәтеп” ебәреү – барыһы ла веб-программистың иңендә. Бының эсенә әҙер сайт эшләп биреү йә булмаһа, сайт эшмәкәрлегендә ниндәйҙер проблема килеп сыҡҡан ваҡытта ашығыс ярҙам күрһәтеү ҙә инә.

**SEO-ОПТИМИЗАТОРҘАР.** Сайтты “тормошҡа яраҡлаштырыу” (оптимизация) һәм уны “йәшәргә өйрәтеү” - SEO-оптимизаторҙың төп бурысы. Ул конкурент сайттарға ла тулы анализ яһай, тикшереүҙәр үткәрә һәм ниндәй эҙләү һорауҙары буйынса сайтты үҫтереү кәрәклеген билдәләй. Әйткәндәй, ул шулай уҡ сайттың семантик нигеҙен булдыра һәм сайттың күрһәткестәрен (ТИЦ һәм PR) арттырыу менән дә шөғөлләнә.

**WEB-ДИЗАЙНЕРҘАР.** Кешене сайтта иң тәүҙә нимә “тотоп тора”? Әлбиттә, биҙәлеш. Ямаҡай, сыбар һәм төрлө төҫтәр менән емелдәп торһа, тәүгә килеп ингән “ҡунаҡ”, ғәҙәттә, ундай сайттан тиҙерәк сығып китеү яғын ҡарай. Сайттың биҙәлеше (“кәпәсе”, логотибы, баннерҙар һәм башҡа ваҡ-төйәктәре) – тап Web-дизайнерҙың эше.

**АДМИНИСТРАТОРҘАР, МОДЕРАТОРҘАР, КОНТЕНТ-МЕНЕДЖЕРҘАР.** Сайтты “оҙатып” барыу, даими рәүештә копирайтерҙер әҙерләгән мәҡәләләр менән тәьмин итеп тороу, һүрәттәр табыу, ҡулланыусыларға хаттар ебәреп тороу, хаттарға яуап тар яҙыу, сайтта реклама мәсьәләләре менән шөғөлләнеү – сайт хакимиәте башҡарған эштәр. Хакимиәттең, эштең күләменә ҡарап, бер кешенән йә бер төркөмдән тороуы мөмкин. Тәүлегенә 200 кеше инеп сыҡҡан сайт өсөн, мәҫәлән, менеджерҙар командаһының кәрәге юҡ. Ә бына инеүселәр һаны 10 мең кешенән кәм булмаған, даими яңыртылып торған, форумдары, блогтары булған етди мәғлүмәт порталына эшенә яуаплы ҡараған хеҙмәткәрҙәрһеҙ ауырға тура киләсәк.



**Ҡасан да булһа үҙен хөрмәт иткән, айырыуса ваҡытының ҡәҙерен аңлаған фрилансер “ирекле осоуға” сығырға теләйәсәк. Унда кәм тигәндә кемдер файҙаһына эшләүҙән туҡтап, Интернеттағы үҙ вәкәләтен — шәхси сайтын булдырыу хыялы барлыҡҡа киләсәк. Ошо урында “ысул”ды “мөмкинлек” менән бутамау мөһим. Ҡыҫҡаһы, һәр нәмәгә баһалы ҡараш та ташлай белергә кәрәк.**

**Киләһе һандарҙың береһендә веб-мастерҙарҙың йәшәү рәүеше, сайт ярҙамында аҡса эшләү һәм сайт төҙөү эшендә “сәйнүктәргә” мөһим булған кәңәштәребеҙҙе бирербеҙ.**

*Р. СӘЛИМОВ.*

# КУДО

**ДӨЙӨМ АЛҒАНДА, БӨТӘ СПОРТ ТӨРӨ ЛӘ ЯҠШЫ. ПРОФЕССИОНАЛЬ СПОРТСЫ БУЛЫП КИТМӘГӘН ХӘЛДӘ ЛӘ, ДӘРЕСТӘРҘӘ ТОРМОШТА КӘРӘГӘСӘК ЯҠШЫ КҮНЕКМӘ АЛЫУ МӨМКИНЛЕГЕ БАР. ҠАЙҺЫ БЕР АТА-ӘСӘЛӘР ДӨРӨҪ ЙЫҒЫЛЫРҒА ӨЙРӘНҺЕН ӨСӨН ГЕНӘ ЛӘ БАЛАҺЫН СПОРТҠА ЫЛЫҠТЫРА. СПОРТ КЕШЕНЕ ФИЗИК ЯҠТАН ҮҪТЕРӘ, РУХТЫ СЫНЫҠТЫРА, ТӘРТИПКӘ ӨЙРӘТӘ, ТИҘӘР. БЫЛ ЫСЫНЛАП ТА ШУЛАЙМЫ? ҒӨМҮМӘН, БАЛАНЫ НИСӘ ЙӘШТӘН СПОРТҠА ЫЛЫҠТЫРЫРҒА? БЫНА ОШО ХАҠТА ҺӘМ БӨГӨН ИЛЕБЕҘҘӘ КИҢ ТАРАЛҒАН СПОРТ ТӨРӨ – КУДО ТУРАҺЫНДА БАРЫР ҺҮҘЕБЕҘ.**



**КУДО** **– шәхесте үҫтереүгә тәғәйенләнгән рухи һәм физик камиллыҡтың универсаль бер системаһы.**

Кудоның башланғысы Японияның будо мастеры, 8-се данға эйә булыусы Адзума Такаши менән бәйле. Классик каратэның сиктәрен киңәйтеп, көрәшсе арсеналына башка алыш төрҙәре техникаларын өҫтәп, сикләүҙәрҙе “алып ташлап”, сэнсэй яңы алыш төрөнә нигеҙ һала. Тәүҙә кудо “Дайдо Джуко каратэ-до” тип йөрөтөлә, ә 2001 йылға тулыһынса тиерлек каратэ стиленән айырылып, үҙ аллы көрәш сәнғәте буларак формалаша. Рус теленә тәржемә иткәндә, “Ку” – бушлыҡ, “До” юл тигәнде аңлатып, “Бушлыҡ юлы”, “Асыҡ юл” тип тәржемә ителә (фәлсәфәүи мәғәнәһе: асыҡ аң, таҙа уй, ғәҙеллек). Көнсығыш философияһында “бушлыҡ” төп категорияларҙың береһе һанала һәм сикһеҙлек төшөнсәһен белдерә. Шуға ла уны тағы ла “Киң юл”, “Сиге булмаған юл” тип тә тәржемә итергә була.

Шулай итеп, А. Такашиға бер йүнәлеш эсендә төрлө алыш техникаларын гармониялы берләштереү насип була. Мәҫәлән:

*ҡул техникаһы – бокстан;*

*терһәк менән һуғыу һәм тубыҡ менән тибеү – тай боксынан;*

*аяҡ менән көслө удар – кекушинкай каратэһынан;*

*алып ташлауға, быуыуға, ауырттырыуға йүнәлтелгән алымдар – самбо һәм дзюдонан;*

*һаҡланыу техникаһы - һанап үтелгән алыш төрҙәренең һәр береһенән тупланған һаҡланыу берләшмәһе.*

Был төрҙә бөтә сараларҙы ла ҡулланырға мөмкин, әммә кудоның мораль принциптарына ярашлы, арттан һөжүм итергә, тамаҡҡа һәм быуындарға һуғырға (тибергә) һәм йығылған бәйгесене туҡмау тыйыла.

Үҙе булдырған системаның асылы хаҡында Адзума Такаши былай ти: “Кудо менән шөғөлләнгән кеше, йәғни үҙ-үҙен камиллаштырыу юлында барыусы, күңелендәге эгоизмды, асыуҙы ҡыуырға, аңын асыҡ һәм иркле итергә, ә рухын нығытырға тейеш. Маҡсатына өлгәшеүҙә ныҡышмал булырға, алышһыҙ бирелмәҫкә, ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәҫкә бурыслы... Кудоның асылы һәм юғары маҡсаты дәғүәсеңдә түгел, ә үҙ-үҙеңдә, йомшаҡ яҡтарыңды еңеүҙән ғибәрәт...”

Адзума Такашиҙың башланғыстарын хуплаусы тәүге илдәрҙең береһе – Рәсәй. Беҙҙең илгә кудо 1994 йылдарҙа үтеп инә башлай. Бөгөн иһә рәсәйлеләр был спорт төрө буйынса иң көслөләр рәтендә.

Ә Башкортостанда Кудо ниндәй кимәлдә? Уға үҫергә шарттар бармы? Ошо хаҡта БР Кудо буйынса федерация президенты Искәндәр Ғабдрахманов менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.




**БЕЛЕШМӘ:** Ғабдрахманов Искәндәр Хаматнур улы, Көнсығыш алыш төрҙәре буйынса спорт мастеры. Кекушинкай каратэһы буйынса – ҡара билбау, II дан; кудо буйынса квалификацияһы – ҡара билбау, III дан. Шулай уҡ 5 уҡыусыһы ҡара билбауға эйә.

14-15 йәштәрҙә самбо менән шөғөлләнә, параллель рәүештә каратэ, культуризм менән ҡыҙыҡһына башлай.

1988 йылдан каратэның Кекушинкай төрө менән профессиональ кимәлдә шөғөлләнә.

1989-1995 йй. Башҡорт дәүләт педагогия институтында белем алып, физкультура һәм спорт уҡытыусыһы дипломын ала.

1990 йылдан уҡытыусы-тренер карьераһын башлай.

1998-2000 йй. – БР Тай боксы федерацияһының вице-президенты.

2005 йылдан Волга буйы федераль округында Кудо буйынса федерация етәксеһе.

1999 йылдан хәҙерге көнгә хәтле БР "Дайдо Джуку каратэ-до" (КУДО) федерацияһы президенты.

2010 йылда Рәсәйҙең спорт мастеры тигән исемгә лайыҡ булған.

*- Искәндәр Хаматнурович, теге йәки был спорт төрөнә баланың һәләте барлығын нисегерәк белергә?*

- Һәр бер баланың һәләте бар, тик уны үҫтерергә генә кәрәк. Һәм ул үҫеш һәр кешенең шәхсән үҙенең кимәленә тиклем күтәрелә ала. Күп тренерҙарҙың хатаһы – секцияға килгән һәр баланы потенциаль спортсы итеп күреү. Ниндәй кимәлдә генә шөғөлләнмәһен, тормош һәр кешене барыбер үҙ урынына ҡуя. Һәр нәмәнең үҙ ваҡыты.

Ата-әсәләргә килгәндә иң тәүҙә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып үтке килә: ҡайһы берәүҙәр балаһын ниндәй генә секцияға йөрөтмәй: мәҫәлән, фехтование, каратэ, бассейн, математика, музыка, бейеү һ.б. Бала өсөн был ҙур йөкләмә. Шуның өсөн бер генә физик йүнәлеште билдәләргә кәрәк. Әгәр баланың ваҡыты күп икән, спорттан тыш икенсе шөғөл итеп музыкаль инструмент йә һүрәт төшөрөү кеүек сәнғәт төрөн һайлау мөмкин. Сөнки физик күнегеүҙәрҙән башка мораль баҫым да бар. Шуға ҙур иғтибар бирһендәр ине.

*- Ә баланы нисә йәштән спортка ылыктырыу һәйбәт?*

- Күпселек спорт төрҙәренә 5-7 йәштән алалар. 4-5 йәштән мөмкиндер тип уйлайым. Беҙ, мәҫәлән, 4 йәштән ҡабул итәбеҙ.

*- Ҡыҙыҡһынып йөрөй башлаған балаларҙың байтағы, күпмелер ваҡыт үткәс, күнекмәләргә йөрөүҙән баш тарта. Шул ваҡытта ата-әсә нимә эшләргә тейеш: мәжбүр итергәме, әллә башка спорт төрөнә бирергәме?*

- Әгәр һеҙгә теге йәки был секцияға барырға кәңәш иткәндәр һәм һеҙөмтә булырын беләһегеҙ икән, көсләп йөрөтөргә кәрәк. Мин гел генә әйтә киләм: бөгөнгө көндә әллә күпме дан яулаған, донъяға билдәле булған музыканттар йә балет артистары "кәрәкмәй", "теләмәйем", "бармайым" тип иламаған да, мыжымаған тиһегеҙме? Ә хәҙер улар интервью биргәндә көсләп йөрөткәндәре өсөн ата-әсәһенә рәхмәт кенә уҡый. Тормош эшләргә мәжбүр итмәһә, беҙ ҙә диванға ҡырын төшөп кенә ятыр инек тә ул...

Тағы ла мөһим бер әйбер: мәктәптә үҙенең фәненә һөйөү уята алған уҡытыусы кеүек уҡ, күп нәмә тренерҙан тора. Тәжрибәле тренер тәрбиәләнеүсеһе менән бер кимәлдә булырға тейеш, йәғни баланы ололар кимәленә күтәрергә кәрәк. Уның менән һөйләшкәндә, мәҫәлән, "Ниңә күнекмәләргә килмәнең, ҡатының ебәрмәнеме әллә?" кеүегерәк шаяртыуҙар аша балаға яҡынайырға мөмкин. Тәрбиәләнеүселәремдең күбеһе минең менән "һин"гә һөйләшә, сөнки улар әле "һин" менән "һеҙ"-ҙе айырмай. Шул уҡ ваҡытта дистанция тотоу зарур, әлбиттә.

*- Кудо мәктәбе Көнсығыш алыш төрҙәре араһында иң популяры бөгөн. Һәм иң "ҡаты" стиль һанала, шуға ҡарамаҫтан, ярыштарҙа йәрәхәт алыу йәһәтенән иң хәүефһеҙе тип билдәләнә. Уның үҙенсәлектәре хаҡында һөйләп үтһәгеҙ ине?*

- Һәр спорт төрөнөң үҙенә генә хас үҙенсәлектәре була. Башҡаларға ҡарағанда яҡшы ла, насар ҙа тип әйтә алмайым. Сикләүҙәр булмауы һәм ирекле стиль өҫтөнлөк иткәнe өсөн окшай ул миңә. Унда бөтә төр удар техникаһы, көрәш техникаһы (кыҙғаныска ҡаршы, ул баһаланмай) ҡулланыла. Үҙ сиратында был спортсыға алыш барышында һаҡланыу мөмкинлеге бирә. Мәҫәлән, ҡайһы бер алыш төрҙәрендә ҡул менән башка һуғыу тыйыла, шулай ҙа ҡайһы сакта йә яңылыш, йә инерция буйынса башка удар эләгә. Йәғни әҙер булмау сәбәпле, спортсының йәрәхәт алыу ихтималлығы күберәк. Башка төрҙәрҙән айырма-



лы, кудола төрлө яктан һөжүм көткәнлектән, спортсы һәр яклап һаҡланыу сараһын күрә. Һөзөмтәлә ул әҙерәк йәрәхәт ала. Шулай уҡ һаҡлаусы ҡорамалдар кейеү спортсының битен һаҡлауға булышлыҡ итә.

*- Иң бәләкәйҙәргә күнекмәне тик үҙегеҙ үткәреүегеҙ билдәле. Бының сәбәптәре нимәлә?*

- Беренсенән, бәләкәй балалар менән эшләүе миңә күпкә ҡыҙығыраҡ. Тәү сиратта үҙемде тренер итеп түгел, ә тәрбиәсе итеп тоям. Был йәһәттән иң төп шарттарҙың береһе тип бәләкәстәрҙе тәжрибәле тренерға биреүҙе һанайым. Сөнки йәш, яңы тормош башлаған уҡытыусыла шөғөлләнгәндәрҙең яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшеүе икеле. Оло йәштә булмаған хәлдә лә, үҙенең балаһы булыуы, бәләкәстәрҙең психологияһын белеүе мотлаҡ. Был күҙәтеү аҫтына алынырға тейештер тигән ҡараштамын.

“Минең бер арамъя (илке-һалкы, эшлекһеҙ) ғына тренер бар, шуны үҙеңә ал әле, балаларға...” тигәндәрен ишетергә тура килә ҡай саҡ, ҡыҙғаныска ҡаршы. Өфөлә лә, Рәсәй буйынса ла ундайҙар етерлек, әлбиттә. Уларҙан ниндәй һөҙөмтә сыҡһын?!

Йөрәкте өйкәп торған ошоға бәйле бер хәлде миҫалға килтерә алам. “Чемпион” магазинында йөрөп йәткәнда, бер малайҙың әсәһе шлем һайлай. Һатыусынан, 5 йәшлек балаға ошо барамы, тип һорай ҡатын. Шул саҡта түҙмәйенсә ҡайҙа, нисек шөғөлләнеүҙәрен һораным. Кудоға йөрөйбөҙ, тренер һатып алырға ҡушты, тип яуапланы ҡатын. Тиҙ арала тренерын алмаштырырға кәңәш иттем әсә кешегә, сөнки бәләкәстәрҙең башына һуғырға ярамай. Рәсми рәүештә балалар ун ике йәштән генә алышта ҡатнашырға хоҡуҡлы. Шуға ла беҙ башҡа һуғыуҙы сикләйбеҙ, ҙурая барған һайын, тәбиғи, сикләүҙәр кәмей.

*- Улар тыңлашһын өсөн ниндәй ысулдар ҡулланаһығыҙ?*

- Иң беренсе бер-береһенә тибә йә һуға, шаяра алмаҫлыҡ итеп теҙәм, беҙҙең телдә әйткәндә, “коробкаға” ҡуям. Икенсенән, уларҙы нисек тә булһа ҡыҙыҡтырыу фарыз. Бының өсөн тренер үҙе бының менән янырға тейеш. Күнекмәләрҙе уларға аңлайышлы итеп аңлатыу зарур. Килеп сыға башлаһа, бала үҙе быға маҡсатлы рәүештә ынтыла. Яза биреү йәһәтенән, мәҫәлән, һуңлағандар өсөн отжимание ҡаралған. Тыңлашмаһалар, япон философияһында киң таралған билбау методы бар. Билбау менән артына һуҡкан һымаҡ итһәң, ауыртмай, әммә үпкәләтә. Был ысул дисциплина тоторға ныҡ ярҙам итә. Әгәр мин Рәсәй президенты булһам, мәктәптәрҙә “шыйыҡ сыбыҡ” ҡулланырға рөхсәт итер инем. Тәртип булыр ине тип уйлайым.

Ваҡыты-ваҡыты менән ҡысҡырып көләшеп алабыҙ. Ҡайһы балаларға айырым иғтибар бүлеү талап ителә. Хәл-торошҡа ҡарап эш итергә тура килә.

*- Кудо ҡатын-ҡыҙ спорты һаналмай. Шулай ҙа һеҙҙең клубта уларҙы йыш осратырға була.*

- Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ донъяны яулай хәҙер (көлә). Малайҙар ҡыҙҙар һымаҡ була бара. Шуға мин, тиҙҙән һеҙгә бала табырға тура килер әле, тип егеттәрҙең сәменә тейәм. Әгәр ҡыҙ кешегә окшай икән, рәхим итһен. Спорттың төрөнә ҡарамай ул, күп нәмә тренерға бәйле. Мәҫәлән, бейеү менән генә шөғөлләнеп йөрөп тә, агрессив булырға мөмкин.

Әйткәндәй, балаларҙың агрессияһы тураһында. Беҙҙең клубка йөрөй башлағандан күпмелер ваҡыт уҙғас, ҡайһы бер ата-әсә балаһының агрессивка әүерелеүе хаҡында хәбәр итә. “Нимә менән шөғөлләнәһегеҙ унда?” тигәнерәк дәғүәләр ишетергә тура килә. Минең уйымса, барлыҡ агрессия компьютер уйындарынан, тулыһынса көсләүҙе пропагандалаған Америка йәнһүрәттәренән килә. Ундағы үлтереш, һуйыш иҫ китерлек бит. Ул турала бераү ҙә уйлап ҡарамай. Шуға ла балаларҙы компьютерҙан ситләштереү, тыйыу мотлаҡ. Кире энергияны сығарыу йәһәтенән футбол тибеү, ҡыш көндәре ҡарҙа аунап, көрмәкләшеү бик яҡшы сара. Ғөмүмән, саф һауалағы бөтә төр уйындар ҙа файҙалы икәне бераүгә лә сер түгел.

*- Спорт мәктәптәре, дәүләттекеме, шәхсиме – мөһим түгел, балаларҙың һаулығы өсөн яуаплымы?*

- Мотлаҡ. Шуға ла беҙ, тәү сиратта, тик Физкультура диспансерынан рөхсәт ҡағыҙы һорайбыҙ. Баланың билдәләнгән йөкләмәне күтәрә алыу-алмауына справка мотлаҡ булырға тейеш.

*- Кудола уңышка өлгәшеү өсөн нисек шөғөлләнергә кәрәк?*

- Беренсенән, даими рәүештә. Унан ҡыҙыҡһыныу, мауығыу кәрәк. Шөғөлләнгән өлкәгә ҡағылышлы китаптар уҡырға, көндәлек алып барырға була.

Һәр кешенең үҙенең һөҙөмтәһе була. Кемдер ун метрға күтәрелергә мөкин, кемдер – иллегә. Тренерҙың эше – быны күрә белеү.

Төркөмдәргә бүлеп ҡарарға кәрәк – кемдер профессиональ спортты һайлай, кемдер үҙе өсөн шөғөлләнә. Әммә үҙе өсөн, тимәк, илкеһалкы тигәнде аңлатмай. Ә бәлки, киреһенсә, үҙең өсөн хатта яҡшыраҡ шөғөлләнеү зарур.

Аҙнаһына өс мәртәбә шөғөлләнеп, өйгә ҡушылған күнекмәләрҙе башҡарғанда, мәсәлән, бер йыл эсендә яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Иң бәләкәстәрҙең үҙ аллы кейенеүе, һаулыҡ һораша белеүе, һуңларға ярамағанын аңлауы, тәүҙә тубыҡ тирәһенән юғары күтәрелмәгән аяғының бите тәңгәленә барып етеүе – былар барыһы ла билдәле бер нәтижә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ата-әсә "ярай, каратэңа һуңлаһаҡ ни булған, ҡурҡынысы юҡ" тиеберәк быларҙы боҙа. Һәм ҙурайғас үҙҙәре үк "гел һуңлайһың, булдыҡһыҙ" тигән дәғүә белдерә.

*- Көнсығыш алыш төрҙәре кешене рухи яҡтан сыныҡтыра...*

- Сыныҡтыра, әгәр был йүнәлештә эш алып барһаң. Көнсығыш алыш төрө менән шөғөлләнгәс, күңеле таҙа булырға тейеш тип уйлайһың. Көнсығыш алыш төрҙәре иң тәү сиратта шуны күҙ уңында тоторға тейеш тә бит. Әммә был өлкәлә күп кенә эскерле етәкселәрҙе күреү уның бөтәһенә лә ҡағылмағанын аңларға ярҙам итте. Һәм улар шундай уҡ яҡшы булмаған уҡыусыларҙы тәрбиәләй, ҡыҙғаныска ҡаршы. Рухи үсешкә башҡа төрлө лә өлгәшеп була, әлбиттә.

*- Май айында кудо буйынса Рәсәй кубогына ярыштар уҙа, ә февралдә – Донъя кубогына. Һеҙҙең тәрбиәләнеүселәрегеҙ ул сараларҙа ҡатнашасаҡмы?*

- Беҙ Рәсәй чемпионатында йыл һайын ҡатнашабыҙ, бер нисә мәртәбә чемпион исеменә лайыҡ булған тәрбиәләнеүселәрем бар. Шулар араһынан Сергей Никменов, Хәлил Мостафин, Эдуард Исхаҡов, Владимир Чунтонов, Евгений Бурундуков, Айҙар Миңлеғәлиев, Тимур Ғабдрахмановтар яҡшы һөҙөмтәгә өлгәште.

Донъя кубогына алыштар Рәсәйҙә уҙғарыла, Башҡортостандан унда ҡатнашыусылар юҡ, ә Волга буйы федераль округынан бер егет сығыш яһаясаҡ.

*- Алыштарҙа дәғүәсеңдең техникаһын белеү кәрәкме?*

- Техниканы өйрәнеү генә түгел, ятлап алырға кәрәк. Үҙең ҡулланмаһаң да, һаҡланыу өсөн.

*- Башҡортостанда кудоның үсеше өсөн шарттар һәм дәүләттең ярҙамы бармы?*

- Һәр хәлдә ҡамасауламайҙар. Кешенең үҙенән тора, теләктәре булғандарға үсергә мөмкинлектәр бар. Беҙҙең кеүек ойошмаларҙың һаны күп, шуға ла һәр береһенә дәүләттең ярҙам ҡулы һуҙыу мөмкинлеге юҡтыр тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, хатта олимпия резервына ингән спорт төрҙәре лә етерлек кимәлдә финансланмай. Шуға ла ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә теләгәндәр хужалыҡ иҫәбенә күсергә тейеш тигән ҡараштамын.

*- "Ҡиммәт, тимәк сифатлы". Быны менән килешәһегеҙме?*

- Һәр ваҡыт түгел. Әлеге лә баяғы тренерҙың кимәленән тора. Әгәр һөҙөмтә күренә икән, тимәк был ҡиммәт түгел. Беҙҙә арзан йә бөтөнләй буш секциялар ҙа эшләй ул, әммә күпселектә һөҙөмтәһеҙ. Ә улай булғас, ниңә йөрөргә? Һөҙөмтә булмаһа, йә һеҙҙе ҡәнәғәтләндермәһә, һеҙҙең һайлау хоҡуғығыҙ бар.

*- Тағы ла әйтер теләктәрегеҙ юҡмы?*

- Минең теләктәрем ата-әсәләргә булыр. Баланы ҡайҙалыр бирер алдынан иң тәүҙә тренер менән һөйләшеү мотлаҡ, уның ниндәй кимәлдә адекват икәнен белер өсөн. Күнекмә ваҡытында инеп ҡарап ултырыу мөмкинлеге булырға тейеш. Һәм бала менән бергә шөғөлләнергә, ҡыҙыҡһынырға кәрәк. Яҡшы педагогтың һүҙенә ҡолаҡ һалһындар ине.

Беҙҙең девиз: "Сәләмәт милләт". "Нисек булһа ла еңергә" тигән ҡараш беҙҙең юл түгел, лайыҡлы еңелергә лә мөмкин!

*- Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт, Искәндәр Хаматнурович. Алдағы эшегеҙҙә уңыштар ғына насип булыуын теләйем.*

***Ләйсән ШӘРИПОВА.***



**ҺҮҘ ЫҢҒАЙЫНДА...** Искәндәр Ғабдрахманов етәкләгән "Муромец" клубында сэнсэйҙың ҡыҙы Рита һәм улы Тимур ҙа эшләй. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Тимур тренер вазифаһын башҡара, ул үҙе кудо менән 7 йәштән шөғөлләнә. Тәрбиәләнеүселәре менән уртаҡ тел таба белгән егетте балалар бик ярата. Ә барлыҡ ойоштороу эштәре Рита иңендә. "Кудо мәктәбен асып ебәргәс, балаларымды эшкә үҙ яныма алдым. Оло ҡыҙым ғына башҡа юлды – бейеүҙе һайланы", – ти тәжрибәле тренер һүҙен йомғаҡлап.

# СТЕНА АША ҮТКӘН КЕШЕ



**Гарри Гудиниҙың был донъянан китеүенә 100 йыллап ваҡыт үткән. Шулай ҙа уны әле һаман ер йөҙөндәге иң бөйөк иллюзионистарҙың береһе булараҡ хәтерләйҙәр. Был легенда-кеше өсөн әллә ниндәй ҡатмарлы, ныҡ бығауҙар ҙа кәртә була алмаған, хатта... ул стена аша ла үтә алған! Шуға күрә күптәр уны фокусник ҡына тип түгел, ә ниндәйҙер тәбиғи булмаған һәләткә эйә кеше тип ҡабул итә...**

Гудиниҙың ысын исеме – Эрих Вайс. Ул 1874 йылда күп балалы венгр раввины (йәһүдтәрҙә юғары дәрәжәле рухани) ғаиләһендә тыуған. Эрих тыуғандан һуң АҠШ-ҡа күсенәләр һәм Эпплтонда, Висконсин штатында йәшәй башлайҙар. 1888 йылда улар Нью-Йоркка күсенә.

Ата-әсәһе бик үк етеш йәшәмәгәнлектән, Эрихҡа үҫмер сағынан уҡ гәзит һатып, аҡса эшләй башларға тура килә. Аҙаҡ "Г. Ритчерз Санз" фабрикаһына галстук бесеүсе булып эшкә урынлаша. Ошонда Джек Хейман тигән кеше менән таныша һәм ул Гудиниҙы кәрт ярҙамында төрлө фокустар ҡылырға өйрәтә. Бер ваҡыт Эрих Манхэттенда таушалып бөткән "Иллсе, яҙыусы һәм фокусник Робер-Гудиндың үҙе яҙған иҫтәлектәре" тигән китап һатып ала. Китапта яҙылғандар уны таң ҡалдыра һәм уның да фокусник булғыһы килә.

Әммә Вайс тәүҙә йүгереү, йөҙөү менән шөғөлләнә, хатта стриптиз менән дә мауығып ала. Шулай ҙа, бер көн килеп, фокустар менән аҡса эшләргә ҡарар ҡыла. Улар Джек Хейман менән арзан театрҙарҙа һәм һыра барҙарында сығыш яһай башлай. Кәрт, яулыҡтар ярҙамында иң ябай трюктар күрһәтәләр. Бүтән төрлө әйберҙәр алырға хәлдәренән килмәй әлегә. Эрих псевдонимын кумиры Робер-Гудин һәм ул ваҡыттағы билдәле факир Гарри Келли хөрмәтенә һайлай. Шулай Гарри Гудини булып китә.

## ҠУЛ БЫҒАУҘАРЫ ҺӘМ ТАБУТТАР

Профессиональ карьераһын Гудини киң таралған трюктан – ҡул бығауҙарынан ысҡыныуҙан башлай. Уның сере ҡул таҫыллығынан тора – Гудиниҙа бөтә булған ҡул бығауҙары моделдәренең асҡыстары булған. Ул уңышҡа өлгәшә һәм тиҙҙән танылған цирк һәм балаган хужалары уның менән ҡыҙыҡһына башлай.

1900 йылда Англияға килгәндән һуң Гарри билдәлелеккә өлгәшә. Ул үҙе башҡарған трюктарҙы һәр ваҡыт камиллаштырыу һәм ҡатмарлаштырыу өҫтөндә эшләй. Бер ваҡыт, Дрездендә гастролдәрҙә йөрөгәндә, үҙен тулыһынса сылбырҙар, бығауҙар менән урап, йылғаға һикерә. Һыуҙан сыҡҡанда быларҙың береһе лә булмай. Ярға килеп сыҡҡас, полиция уға газон өҫтөнән(!) үткәне өсөн штраф һала. 1903 йылда Рәсәйгә килә. Бында ул Себергә сәйәси ҡорбандарҙы алып китә торған поездың ҡорос менән тултырылған вагонынан ҡотолорға тейеш була.

1904 йылда Гудини сейфтарҙы асыу менән шөғөлләнеп ҡарай. Береһен ул эҫтә булған ки-



# ҮТКӘН МОДАҒА ЗАМАНСА ҺУЛЫШ







Заман ир-егетен ҡиммәтле костюм, тәрбиәләп таҙартылған аяҡ кейеме, ап-аҡ күлдәктән тыш, килешле галстукһыҙ йәки муйын яулыҡһыҙ күҙ алдына килтереүе ауыр. Сираттағы һүҙебеҙ тап ошо үҙенсәлекле аксессуар, галстукка яҡшы альтернатива — **МУЙЫН ЯУЛЫҒЫ** хаҡында.

Гардеробтың өҫтәмә аксессуары булған муйын яулыҡтары беҙҙең көнгә боронғо тарихтан йәнә әйләнеп ҡайта. Уның барлыҡҡа килеү тарихы француз короле Людовик XIV исеменә барып тоташа. Әммә бындай формалағы элементтар Боронғо Ҡытай, Боронғо Рим илдәрендә йәшәүселәре ҡулланыуында ла булыуы асыҡлана. Шуға ҡарамаҫтан, мода тарихсылары Людовик XIV муйын яулығының "атаһы" тип атай. Ул 1635 йылда Париж ҡалаһына аудиенцияға саҡырылған хорват илселәренең муйынында был аксессуарҙы күреп, французлар араһында тарата. Яулыҡҡа заманса "cravate" (франц. муйын яулығы) тигән исем бирелә. Унан һуң муйын яулығы бөтә ил аристократтары араһында киң таралыу таба. Сөнки улар галстуктарға ҡарағанда күпкә уңайлыраҡ. Бының бер нисә сәбәбе лә бар: беренсенән, яулыҡ муйынды һыҡмай, икенсенән, эйелгәндә буталып, ҡамасауламай, өсөнсөнән, муйынды һалҡындан һаҡлау мөмкинлегенә лә эйә.

Муйын яулығының ҡулланыу даирәһе киң: уны классик костюм, кардиган, күн пинжәк, күлдәк, блейзер йәки куртка менән дә тағырға мөмкин. "А ля Байрон", "Примо темпо", "Ирландса", "Көнсығышса" һәм башҡа яулыҡ бәйләү төйөндәре билдәле. Шулар араһынан беҙҙең көнгә килеп еткәндәренә ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ.









**АСКОТ** – муйын яулығының классик варианты. Ул XVIII быуатта бөтә Европаға билдәле ат сабыштары уҙғарылған Иҫке Англияның Аскот ауылы исеме хөрмәтенә атала. Ир-аттың етди кейем элементы һәм ҡәтғилек билдәһе булараҡ, уны тик тантаналы сараларҙа ғына ҡулланырға мөмкин булған. Шуға ла аскот ҡиммәтле ебәктән тегелә.

Аскот төйөнөн яһау өсөн:

1 – яулыкты яурынға һалып, остарын түш тирәһендә салырға;

2 – уң осо менән һулын уратып, өҫтән сығарырға;

3 – уң осо менән һулын ҡаплап, тигеҙләргә;

4 – төйөндө яға артында ҡалдырып, остарын күлдәк эсенә йәшерергә;

5 – күлдәктең өҫкө ике төймәһен элмәй ҡалдырырға кәрәк.



**ФУЛЯР** – 10 сантиметр киңлегендә һәм 1 метр оҙонлоғондағы тар ғына яулык. Уны мотлаҡ костюм менән түгел, ә бәйләнгән кардиган йәки ябай пинжәк менән дә тағырға ярай. Төҫтәр йәһәтенән дә ирекле ҡабул ителә. Күберәк сағыу һәм ялҡытҡыс булмағандарына өҫтөнлөк бирелә. Шулай уҡ төрлө биҙәк, һыҙык, борсаҡтар менән "байытылған"да булырға мөмкин.

Фуляр төйөнөн түбәндәгесә эшләргә була:

1 – яурында яулыктың остарын бер-береһенә параллель рәүештә тигеҙләргә;

2 – уң осон һулы аҫтында ҡалдырырға;

3 – уң осо менән һулын уратырға;

4 – өҫтән сығарып, элмәк аша үткәрергә;

5 – аҙаҡ ике осто бергә тигеҙләп, декоратив булавка йәки брошка менән ҡаптырып ҡуйырға була.



**ПЛАСТРОН** – фуляр һәм аскоттан форма йәһәтенән күпкә киңерәк. Шуға күрә ул муйынды ғына түгел, ә тотош күкрәкте каплай. Пластрондың уртаһы тарайып, остарына табан киңәйеп китә. Бәйләү төрө лә үрҙәгеләр менән сағыштырғанда ҡатмарлыраҡ. Бөгөнгө көндә был бәйләү төрө туй мәжлестәре өсөн актуаль.

Туй бәйләме өсөн:

1 – пластронды яурынға һалып, остарын бер-береһенә йәнәшә килтереп ҡуйырға;

2 – уң осон һулы аҫтында ҡалдырып, салып алырға;

3 – уңын муйын элмәге аша өҫтән үткәрергә;

4 – ике осон бер-береһен ҡаплап, тигеҙләргә;

5 – өҫтә ҡалған осон аҫтан уратырға;

6 – элмәк аша үткәреп алырға;

7 – төйөндө тигеҙләп, остары менән бер-береһен аҙ ғына ҡаплап, декоратив булавка йәки брошка менән элəктерергә.

**"Ағас күрке — япраҡ, әҙәм күрке — сепрәк" тиҙәр, әммә тотош стилде килешле кейем генә түгел, ә дөрөҫ ҡулланылған аксессуарҙар ҙа тыуҙыра. Шуға күрә гардероб элементтарына иғтибарығыҙҙы һәм ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Сөнки зауыҡлы ҡиәфәт бер ваҡытта ла күҙ уңынан ситтә ҡалмай.**

*Интернет материалдарын файҙаланып, Филиә БУЛАТОВА әҙерләне.*

# МАРТ АЙЫНА ЙОНДОҘНАМӘ

## ҠУҘЫ



Март айы Ҡуҙылар өсөн бик уңышлы ғына булмаҡсы. Әммә уның ни тиклем файҙалы, яйлы үтеүе тик һеҙҙән генә тора. Иң тәүге сиратта үҙегеҙҙе яҡшы уйҙар менән ыңғай яҡҡа көйләгеҙ. Баш етмәҫлек әйберҙәр хаҡында хыялланыу ҙа яҙыҡ булмаҫ. Тик һүҙ көсөнә һәм үҙегеҙгә ышанысығыҙҙы юғалтмағыҙ.

## ҮЛСӘҮ



Март айы иңегеҙгә алған бурыстарҙы үтәү өсөн ҡулай. Уларҙы хәлегеҙҙән килмәҫтәй тип уйлаһағыҙ ҙа, ниәт итегеҙ. Сөнки һеҙ мөмкинлектәрҙең ни тиклем күп булыуын күҙ алдына ла килтермәйһегеҙ. Ай аҙағында, ниһайәт, дуҫтарығыҙ менән аңлашылмаусанлыҡ ыңғай хәл ителер.

## БУҒА



Был айҙа Буғалар йыш ҡына ҡаршылыҡтар менән күҙгә-күҙ осрашып торор, моғайын. Быны маҡсаттарығыҙға ирешеүгә табан дөрөҫ юлдан барыу билдәһе тип ҡабул итегеҙ, сөнки аҫҡа тәгәрәүе генә еңел. Шуға ла төрлө мажаралар һәм ҡыйынлыҡтарға риза булығыҙ: һеҙгә уңышҡа өлгәшеү өсөн бер аҙым ҡалған.

## САЯН



Саяндарға лидер урынын биләргә бер аҙым ҡалған. Әлегә башҡаларҙа үҙегеҙ хаҡында ыңғай фекер ҡалдырыу мөһим. Яңы бәйләнештәр булдырырһығыҙ, бынан тыш мөхәббәтегеҙҙе лә осратыуығыҙ ихтимал. Шуға күрә тормошоғоҙҙа буласаҡ үҙгәрештәргә әҙер тороғоҙ.

## ИГЕҘӘКТӘР



Игеҙәктәргә элекке ҡануңдар менән килешеп кенә эш итергә кәңәш ителә. Коллективта, дуҫтар араһында ниндәйҙер яңы ҡағиҙәләр индерергә маташыуығыҙҙы өнәп еткермәҫтәр. Шуға күрә инициатива күрһәтер алдынан уның һөҙөмтәһен күҙаллап ҡарағыҙ: бәлки, көсөгеҙҙе бушҡа сарыф итергә лә кәрәкмәйҙер?

## УҠСЫ



Ниндәй генә ҡаршылыҡтарға юлыҡһағыҙ ҙа, ҡулдарығыҙҙы төшөрөргә ашыҡмағыҙ. Эшегеҙҙе ахырына тиклем еткерергә тырышығыҙ. Әммә бер аҙ ял итеп алыу тураһында ла хәстәрлек күрергә тура килер. Ваҡ-төйәк мәшәҡәттәрегеҙҙе кемгәлер ҡушыу хаҡында ла уйланыу урынлы.


ОЙОШТОРОУСЫҺЫ - БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ЭЛЕМТӘ ҺӘМ КИҢ КОММУНИКАЦИЯЛАР МИНИСТРЛЫҒЫ.
УЧРЕДИТЕЛЬ – МИНИСТЕРСТВО СВЯЗИ И МАССОВЫХ КОММУНИКАЦИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН.

директор-баш мөхәррир
**АЗАМАТ ЮЛДАШБАЕВ**
директор-главный редактор

МӨХӘРРИРИӘТ:
**Гөлнур ҠОЛҺАРИНА**
**Заһир ҠОТЛОСУРИН**
**Рәсүл СӘҒИТОВ**
**Зәки ӘЛИБАЕВ**
**Фирҙәүес ӘХМӘТЙӘНОВА**

**www.shonkar.ru.**

РЕДАКЦИЯ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ:
**Илшат ЗАРИПОВ** – баш мөхәррир урынбаҫары
**Гөлнара МОСТАФИНА** – яуаплы сәркәтип
**Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА** – бүлек мөхәррире
**Ләйсән ШӘРИПОВА** – өлкән мөхәррир
**Шамил ЯУБАҪАРОВ** – өлкән мөхәррир
**Байрас ҠЫУАНДЫҠОВ** – биҙәлеш мөхәррире
**Гүзәл НОҒМАНОВА** – верстка буйынса оператор
**Милә БИЛАЛОВА** – корректор
**Филүзә СӘЛИХОВА** – йыйыу буйынса оператор

**Алина ЗӘЙҘУЛЛИНА** – баш бухгалтер
**Айрат ИСМӘҒИЛЕВ** – водитель

**БЕҘҘЕҢ АДРЕС:**
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, “Шоңҡар” журналы редакцияһы.
**НАШ АДРЕС:**
450001, Республика Башкортостан, город Уфа, проспект Октября, 2.
Редакция журнала “Шонкар”.
**ТЕЛЕФОНДАР:**
27-77-992 – баш мөхәррир,
29-27-763,
27-77-995 – бүлектәр,
29-27-762 – бухгалтерия.
E-mail: Shonkar@ufanet.ru.



## ҠЫҪАЛА



Март айы кешеләргә үҙеңде күрһәтеү йәһәтенән бик уңышлы һанала. Һәр өлкәлә сығыштарығыҙҙы яратып ҡабул итерҙәр. Һөҙөмтәлә, дуҫ-таныштарығыҙ ғәйәт тиҙ артыр. Эшегеҙҙә яңы вазифа тәҡдим итеүҙәре мөмкин.

## ЫЛАҠ



Март айында барлыҡ уй-теләктәрегеҙ алдығыҙға килеп кенә торор. Ниһайәт, ай башында күптәнге хыялығыҙ бойомға ашыр. Финанс өлкәгеҙҙе йәйләрғә ярҙам итерҙәй мөмкинлек асылыр. Тик ҡағыҙҙар менән һаҡ эш итегеҙ.

## АРЫҪЛАН



Был йондоҙлоҡ вәкилдәрен март айында һөйгән йәрҙәре йәки туғандар араһындағы мөнәсәбәттәр йыш һынар, эштәрендә лә мәшәкәттәр артыр. Шуға ла төшөнкөлөккә бирелмәҫкә, хәл-ваҡиғаларҙы күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышығыҙ. Тормошоғоҙҙо үҙегеҙ теләгәнсә ҡороғоҙ.

## ҺЫУҒОЯР



Һыуғоярҙарҙы мөхәббәт өлкәһендә ҡыуаныслы ваҡиғалар көтә. Эштә ҡаҙанған уңышығыҙ ҙа етәксе тарафынан ыңғай баһаланыр, тик алдан ҡыуанырға ашыҡмағыҙ. Сөнки кеше һүҙе, ғәйбәт ишетеүегеҙ ихтимал.

## ҠЫҘ



Был айҙа еңел-елпе ҡарар ҡабул итеүҙән һаҡланығыҙ, һәр эштең ыңғай һәм кире яҡтарын үлсәп хәл итергә тырышығыҙ. Тирә-йүндәгеләр менән аралашҡанда үтә иғтибарлы булығыҙ. Сөнки уларҙың кәңәштәре һеҙҙе ҙур эштәргә этәреүе ихтимал.

## БАЛЫҠ



Был айҙа һәр кемгә лә иғтибарлы булырға тәҡдим ителә. Хатта ярҙам һорап килгән дошманығыҙҙан да ситләшмәгеҙ. Элек аҡса эшләү мәсьәләһе ауырға тура килһә, ай урталарында хәлегеҙ еңеләшер: өҫтәмә килем алыу ысулын табырһығыҙ.


**БЕҘҘЕҢ РЕКВИЗИТТАР. НАШИ РЕКВИЗИТЫ:**
КП РБ Редакция журнала “Шонкар”
Р/с 40602810600010000123 в Филиале ОАО “УралСиб” в г. Уфа,
БИК 048073770,
К/С 30101810600000000770, ИНН 0278123157,
ОКОНХ 87100, ОКПО 32060535

*Башҡортостан Республикаһының “Өфө полиграфия комбинаты” дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.*
*Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.*

*Йыйырға бирелде 01.02.11. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.02.11.*
*Ҡағыҙ форматы 60х84 1/8. Офсет ысулы менән баҫылды.*
*Шартлы баҫма табаҡ 10. Учетн.-изд. таб. 12. Тиражы 7517 дана.*
*Заказ 2.0011.11.*
*Һатыуҙа хаҡы ирекле.*
*Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан теркәлгән.*
*Теркәү номеры: ПИ № ФС 77-30609.*

**Материалдарҙы ҡулланғанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ.**

***Авторҙарыбыҙға гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:***
*– авторҙың тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;*
*– почта индексы һәм тулы адресы;*
*– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;*
*– тыуған йылы, айы һәм көнө;*
*– социаль номеры;*
*– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.*
*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*
*Редакцияға тапшырылған материалдарға һәм ҡульяҙмаларға рецензия бирелмәй, улар авторға кире ҡайтарылмай. Башҡа баҫмаларҙа донъя күргән йәки уларға тапшырылған материалдар ҡабул ителмәй.*

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# ЕЙӘНСУРА ҺЫЙЫ







## БАУЫРҺАҠ

- 5 йомортка
- 300 г он
- 1,5 стакан шәкәр
- көнбағыш майы

5 йомортҡаға 5 аш ҡалағы һыуыҡ һыу һәм балғалаҡтың осо менән генә сода һалып болғатабыҙ. Он өҫтәп, йомшаҡ ҡына ҡамыр баҫабыҙ. Ҡамырҙы ҡалынырaҡ итеп йәйеп, оҙонсалап киҫәбеҙ.

Суйын һауытҡа көнбағыш майы ҡойоп йылытабыҙ һәм бауырһаҡтарҙы төшөрәбеҙ. Ҡайнар майға һалырға ярамай. Майға төшөргәс ҡалҡып сыҡҡансы болғатмаҫҡа.

Айырым һауытта 1,5 стакан шәкәр ҡомон әҙ генә һыу ҡушып иретеп, әҙер бауырһаҡҡа ҡойоп болғатабыҙ. Матурлап тәрилкәгә өйөп ҡуябыҙ.



## АЛМА БӘЛЕШЕ

**Ҡамыр өсөн:**

- 1 стакан һөт
- 1 сәй ҡалағы сүпрә
- 1 стакан шәкәр
- 3 стакан он
- 1 ҡап маргарин
- 3 йомортҡа
- тоҙ

**Эслек өсөн:**

- 3 алма
- 2-3 аш ҡалағы шәкәр ҡомо

Йылымыс һөткә 1 сәй ҡалағы сүпрә, 1 стакан шәкәр һәм 1 стакан он һалып, яҡшылап бутағас, 30 минутҡа әсетергә ултыртаһың. Унан 1 ҡап маргарин, өс йомортҡа, тәмենә ҡарап тоҙ, самалап он өҫтәп, йомшаҡ ҡына ҡамыр баҫырға. Бер тапҡыр ҡабарып сыҡҡас, ҡамыр әҙер була.

Эслек өсөн алманы ваҡ ҡына итеп турап, шәкәр ҡомо һибергә. Алма урынына ҡурағә, үткәрелгән ҡарағат һ.б. ҡулланырға мөмкин.

Ҡамырҙы табаға йәйеп, эслек тултырғас, ҡамыр киҫәктәре менән биҙәргә һәм ҡыҙған мейестә 30 минут бешерергә.

**АШЫҒЫҘ ТӘМЛЕ БУЛҺЫН!**

шоңкар

# Ләйсән ИШЕМБӘТОВА

Бәйләргә, гөлдәр үҫтерергә һәм тәмле итеп бешеренергә ярата. Журнал уҡыусыларға Ейәнсура халҡы яратып әҙерләгән бауырһаҡ менән бәлеш рецептарын тәҡдим итә.





ISSN 2220-8437

# СКАНВОРД




*Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.*

**ҮТКӘН ҺАНДАҒЫ СКАНВОРД ЯУАПТАРЫ:**

**Горизонталь буйынса:** Олимпиада. Эрдельтерьер. Юрматы. Грипп. Быйма. Джунгли. Нөгәр. Тәгәрмәс. Саңғы. Китапхана. Сабый. Сәтләүек. Ирк. Ҡура. Түш. Бәкәлсәй. Кавалерия. Аркар. Аласыбар. Һуған. Иген. Һыуһар. Евразия. Африка. Ылаcын (ғәфү үтенәбеҙ, һорау дөрөҫ ҡуйылмаған). Салауат. Осоҡ. Ыңғырсаҡ. Себен. Салбар. Ехидна. Туҡыма (һорау дөрөҫ ҡуйылмаған). Ағас.

**Вертикаль буйынса:** Ирек. Детектив. Ғауға. Шалкан. Нахаҡ. Ирен. Убыр. Этюд. Бисара. Яурын. Абонемент. Опера. Ялҡын. Ышаныс. Мәте. Сара. Грог. Ҡарсыға. Лава. Альпинарий. Рапс. Палтус. Батша. Ҡурмас. Әлбә. Лампас. Кофта. Әйләнә. Сөмбөл. Лайғы. Үтес. Буҫтау. Күкйөн. Ришүәт.

Индексы 73867